ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Кискеүфө

25-1
июнь - июль
(һөтай - майай)
2022
№25 (1015)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һуғыш башланған көн

6

Һынауҙар һындырмай, сыныҡтыра ғына

8-9

Их, иланым июнь иртәһендә

Хәтер ҡанатына ултырып…

11

Милли балҡыш бит улар!

12-13

ТВ-программа 14

Шарап үҙен эсеүселәргә дүрт сифат бирә: тәүҙә кеше павлин кеүек ғорур итеп күкрәген кирә, хәрәкәттәре бөйөк, мөһабәт. Һуңынан ул маймылға оҡшап, шаяра, көлә башлай. Шунан арыҫландай ғорур, үҙ-үҙенә ышанған булып китә. Ләкин иң һуңында ул сусҡаға әйләнеп, бысраҡта туҙырап ята.
(Абу-ль-Фарадж).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

? Һабантуйҙар ысынлап та бөтә халыҡ теләгәнсә үттеме? Был көтөп алған байрамыбыҙҙа нимәләр оҡшаны һәм нимәләр оҡшаманы?

Әнғәм ХӨБӨТДИНОВ, Йылайыр районы: Быйыл беҙҙә һабантуй тәүгеләрҙән булып уҙҙы. Көнө лә бер аҙ һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, матур торҙо, кеше рәхәтләнеп ял итте. Һабантуйға шәхсән үҙем йыл һайын барырға тырышам. Айырыуса көрәш, ат ярышы күңелгә яҡын.

Һаҡмар йылғаһы буйлап тау битләүендә, Ситәнбар тип аталған урында ҡоролған тирмәләр хас та элекке йәйләүгә сыҡҡан ваҡыттарҙы күҙ алдына баҫтырҙы. Моғайын да, атай-олатайҙарыбыҙ йәйге миҙгелде нәҡ ошолай итеп үткәргәндер. Ә бына тирмәләр янына заманса палатка һәм тенттар ҡуйылмаһа, бигерәк шәп булыр ине, сөнки улар бай биҙәлгән, сағыу тирмәләрҙең йәмен ебәрә төҫлө.

Һабантуйҙы, башҡа ҙур байрам булһынмы, кемгәлер оҡшай, икенселәр мәңге риза булмай. Ҡайһы бер ауылдарҙа ҡатнашыусылар һаны кәмей, ҡайһы бер ауылдарҙа, киреһенсә, халыҡ ҡабат йәшәргә башлай. Ни өсөн шулай? Ни өсөн ҡайһы бер ауылдарҙа халыҡ ҡыҙыҡһынып, ә ҡайһы бер ауылдарҙа ваттырып эшләп, ҡыҙыҡһынып ял итә белә, ә ҡайһы бер ауылдарҙа ял итә лә белмәй, эшләй лә белмәй? Ни өсөн ҡайһы бер ауылдарҙа ҡунаҡтарҙы ҡаршы алыусылар ҙа, ҡунаҡтар ҙа ҡәнәғәт, ә ҡайһы бер ауылдарҙа ҡунаҡтар ҙа, ҡаршы алыусылар ҙа ҡәнәғәт түгел

✓ *Эшҡыуарҙар менән әңгәмә баҫылһа, унда ошо өлкәлә үҙен һынап ҡарарға теләгәндәр өсөн төплө кәңәш бирелә. Шулай уҡ башҡа һөнәр эйәләре менән эшләнгән мәҡәләләр аныҡ, асыҡ һәм кәрәкле мәғлүмәт менән һуғарылған була.*

БАШ ҠАЛАМ

РӘХМӘТ ҺИҢӘ, ҠАШҠАҘАН!

(Башы 1-се биттә).

Әйткәндәй, вирус яҡшы нәмә булманы, әлбиттә, тик бына ҡайһы берәүҙәребеҙҙең өйҙә ултырып эшләүгә күсерелеүе ана шул туҙып, келтерләп бөткән ҡыҫыҡ-һаҫыҡ ПАЗ-иктарҙа һелкенеүҙән бер аҙ ҡотҡарып торҙо. Ә хәҙер яңы, иркен, газда эшләүсе экологик таҙа, яңы класлы автобустарға ҡарап күҙ ҡыуана. Үкенескә, уларҙа ла барыбер ҡыҫыҡ һәм дә тығыҙлыҡ дауам итте, сөнки күбеһе иҫке-моҫҡо булғанлыҡтан, теге йәки был маршруттарҙы хеҙмәтләндереүсе автобустар һаны кәмегәйне. Әле бына республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Сипайловоға автобустар рейсын арттырырға ҡушып, тағы бер ҡыуандырҙы. Шатлыҡ булмаҫ ине, икенсе бер шатлыҡ ярҙам итте: Сипайловоның Ҡашҡаҙан паркын хәҙер бит танырлыҡ та түгел: Рәсәй һәм баш ҡалабыҙ Өфө көндәрен байрам итеү тантанаһына килеүселәр үҙҙәре лә быға шаһит булғандыр. Һәр хәлдә, әле күреп өлгөрмәгәндәр ҙә күптер, күргәндәр иһә тағы килеп күрергә теләйҙер. Тәбиғи, был йүнәлештә, автобустар рейстарын арттырыу кәрәклеге килеп тыуҙы. Өҫтәүенә, тыуаһы ай - июлдә йәйгесә эҫе көндәр вәғәҙәләй синоптиктар, тимәк, таҙа һыулы Ҡашҡаҙанда һыу инеп, яңы төҙөлгән пляждарында ҡыҙынырға тағы ла өфөләр Сипайловоға ағыласаҡ.

Әйткәндәй, паркты яңыртыуға тотонорҙан алда Радий Хәбиров киләсәктә уның заманса һәм Рәсәйҙә бер тигән парк буласағы хаҡында яҙғайны. Әле ул, дөрөҫ, асылды, ләкин уны яңыртып ҡороу, төҙөкләндереү, йәшелләндереү эштәре артабан дауам итәсәк. Һәр хәлдә, Өфөлә бер тигән иң популяр ял урындарының береһе буласаҡ ул. Ғаиләләре, дуҫтары менән Ҡашҡаҙанды күрергә ашҡынып тороусылар әле үк бихисап, тиҙәр, тик...әлеге лә баяғы пассажирҙар транспорты быға аяҡ сала икән, тип ишетелде. Республика Башлығының оперативкалағы махсус бойороғо Сипайловоға автобус рейстары мәсьәләһен яйға һалыр, тип ышанғы килә.

Кемдәрҙер бөтөн теләгән кешеләргә лә Ҡашҡаҙан пляжында урын етмәҫ, тип тә бошона икән. Быны хәл итеүҙең дә бер юлы бар: Сипайловоның таҙа, тулы һыулы йәмле Ҡариҙел йылғаһын һыулауын да онотоп ебәрмәгеҙ: унда барып та һыу инергә, ҡыҙынырға мөмкин. Әйткәндәй, Ҡариҙел йылғаһы яры урамының 20 ҡатлы 39/1 һанлы йорто ҡаршыһында шулай уҡ ошо көндәрҙә заманса уңайлы һәм матур ял урыны - яңы сквер асылды, "Ҡоштар скверы" тип атанылар уны. Миңә ҡалһа, "Ғаилә скверы" тип әйтергә булыр ине, сөнки бында төрлө йәштәге балалар өсөн маҡтырғыс уйын һәм спорт майҙансыҡтары, аттракциондар урынлаштырылған, асфальт һуҡмаҡтарҙан роликлы конькиҙарҙа, самокаттарҙа елдерергә була. Ошо тирәгә яҡында ғына, Яр буйы урамы 41/1 һанлы йорт алдын, "Башҡортостан ихаталары" программаһы буйынса төҙөкләндереү эштәре бара, арыраҡ балалар һәм өлкәндәр өсөн былтыр ғына урынлаштырылған яңы өлгөләге спорт һәм науыҡтырыу ҡоролмаһы эшләй.

Бына бит, әйтеп ҡарағыҙ Сипайловоны хәҙер "йоҡо биҫтәһе" тип. Юҡ, баш ҡалабыҙ менән бергә үҫә, матурлана, төҙөкләндерелә ул, ә бының өсөн Сипайловоны популяр биҫтәгә әйләндереүсе Ҡашҡаҙанға рәхмәтлебеҙ!

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ

БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫНА...

рух өҫтәүсе баҫма

Яратҡан гәзитебеҙ - "Киске Өфө"бөҙ матур юбилейын ҡаршыларға әҙерләнә икән. Ваҡытлы матбуғат донъяһына яңы һулыш биреп, гәзит уҡыусылар өсөн ҙур яңылыҡ булып килеп инде ул был баҫма ваҡытында. Инде ике тиҫтә йылға яҡын ваҡыт үтһә лә, ошо үткерлеген юғалтмайынса, мәҡәләләрен гәзит уҡыусы өсөн уҡымлы һәм фәһемле итеп бирә белгән, башҡорт донъяһына рух өҫтәп тороусы баҫма булып ҡала килә "Киске Өфө".

Бөрйәндәр - беҙҙең уҡыусыларыбыҙ

Гәзиттең һәр бите уҡымлы. Хатта ҡайта-ҡайта уҡыйбыҙ, сөнки һәр мәҡәлә уҡыусының иғтибарын йәлеп итерлек итеп яҙыла. Район йәки ҡала гәзиттәрендә, ғәҙәттә, шул төбәктә тыуып үҫкән, уңышлы эшләп йөрөгән, ғөмүмән, үҙ районында билдәле булған кешеләр тураһында мәҡәләләр баҫыла. Ә "Киске Өфө" тотош республиканың "районкаһы", тип әйтер инем, сөнки баҫмала төрлө билдәле шәхестәр тураһында яҙалар, төрлө өлкәлә уңыш ҡаҙанған аҫыл егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ хаҡында бәйән итәләр.

Гәзит һәр мәҡәләһендә гәзит уҡыусы өсөн файҙалы мәғлүмәт бирә белеүе менән алдыра. Мәҫәлән, эшҡыуарҙар менән әңгәмә баҫылһа, унда ошо өлкәлә үҙен һынап ҡарарға теләгәндәр өсөн төплө кәңәш бирелә. Шулай уҡ табип, уҡытыусы, ғалим, яҙыусы һәм башҡа һөнәр эйәләре менән эшләнгән бөтә мәҡәләләр ҙә уларҙы күтәрмәләүгә ҡоролған ҡоро һүҙ бутҡаһы ҡуйыртыуға ҡайтып ҡалмай, ә аныҡ, асыҡ һәм кәрәкле мәғлүмәт менән һуғарылған була. Бындай мәҡәләләр йөрәккә барып етеп, шунда үҙ урынын таба, уҡып сыҡҡас та әле ҡайта-ҡайта ҡайһы бер фекерҙәрҙе уйлап йөрөйһөң.

ӘЙТ, ТИНӘГЕҘ...

? Һабантуйҙар ысынлап та бөтә халыҡ теләгәнсә үттеме? Был көтөп алған байрамыбыҙҙа нимәләр оҡшаны һәм нимәләр оҡшаманы?

Фәтихә ӘХМӘТОВА, Әбйәлил районы: Һабантуйҙы йыл да көтөп алам һәм мотлаҡ барам. Быйылғы һабантуйға ла иең-леләрем менән күмәкләшеп барып, донъя күреп, йыр-моң тыңлап, бөтә райондан килгән таныштар менән осрашып-күрешеп ҡайттыҡ.

Әбйәлил һабантуйы уҙғарылған ялан ҙур, иркен, кеше рәхәтләнеп ял итһен өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған: колонкаларҙан һыуҙар ағып тора, бәҙрәфтәр эшләп ҡуйылған, концерт ҡарар өсөн уңайлы эскәмйәләр ултыртҡандар, һәм башҡалар. Шулай уҡ һатыу эше менән булғандарға ла махсус урындар бүлеп, һәр нөктәне электр уты менән тәьмин иткәндәр. Һабантуй йәме, минеңсә, һәр ауыл биләмәһе ҡорған һәм биҙәгән тирмәләрҙә. Быйыл йыбанмайынса һәр береһен ҡарап, унда ҡуйылған боронго әйберҙәрҙең тарихын һөйләтеп, мул итеп әҙерләнгән табындарҙың йәмлелегенә һоҡланып йөрөнөк. Мәҫәлән, бер тирмәлә 800 йыллыҡ тарихҡа эйә булған, фил һөйәгенән эшләнгән боронго ҡомартҡыны - һандыҡты - күрергә насип булды. Тағы ҡайҙа күрәм әле яҡындан бындай тарихи әйберҙе - музейҙарҙа улар йә быяла аҫтында, йәки яҡын барып булмаҫлыҡ итеп ҡуйылған. Өҫтәлдәр һый-ниғмәттән һығылып тора. Ул тиклем мул табындар әлеге лә баяғы етәкселәр, тирмәләрҙе ҡарап йөрөүсе комиссия өсөндөр инде. Улар урынына ауыл хужалығында эшләүселәрҙе матур итеп һыйларға ине ул, әгәр ҙә улар булмаһа, был байрам да, икмәк тә булмаҫ ине. Ә, бәлки, шулай итәләрҙер ҙә, беҙ барыһын да күреп-белеп тормайбыҙ, фаразлайбыҙ ғына.

Концерт ҡараныҡ. Йыр-моң һәр ваҡыт матур күренеш инде ул, ләкин бейеүҙәр артыҡ күп булды һәм уларҙың барыһы ла бер төрлө тиерлек. Бөтә байрам һайын бер үк кешеләр һәм ансамблдәр шул бер төрлө бейеүҙәр башҡара. Шуға күрә концерт программаһын төрләндерһәләр ине алдағы йылдарҙа, тип теләге килә. Заманса-раҡ итеп, төрлө йүнәлештәге номерҙар менән байытылған концерт ҡарағы килә. Ошоға бәйле тәҡдимем дә бар. Бәлки, республика райондары ошондай һабантуйҙар ваҡытында бер-береһенә мәҙәни командировкалар эшләй башлар? Мәҫәлән, күрше бөрйәндәр беҙгә килеп, үҙҙәренең талантын күрһәтеп ҡайтһа, беҙҙекеләр Баймаҡҡа барһа һәм йыл һайын райондар алмашынып торһа, барыһына ла ҡыҙыҡлы булыр ине, тип уйлайым. Ғөмүмән алғанда, байрам матур үтте, күңелле ял итеп, дәрт-дарман туплап ҡайттыҡ.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика статистарына халыҡ иҫәбен алыуҙы юғары кимәлдә үткәргәндәре өсөн рәхмәт белдереҙе һәм уларҙы һөнәри байрамы менән ҡотланы. Бынан һуң Башстаттың өс хеҙмәткәрен бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Хәтерегеҙгә төшөрөбөҙ, 25 июндә Рәсәйҙә Статистика хеҙмәткәрҙәре көнө билдәләнә. Өфөлә Статистика комитеты 1835 йылдың 9 мартында (хәҙерге стиль буйынса 21 мартта) асылған.

✓Башҡортостанда 27 июндә - Йәштәр көнөндә "ҡоро закон" ғәмәлдә була, тип белдерҙеләр республика Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығында. Республика ҡануниәтенә ярашлы, был көндә алкоголде ваҡлап һатыу тыйыла. Спиртлы продукцияны һатыу кафе, бар һәм ресторандарға ҡағылмай. Талапты боҙған өсөн штраф ҡаралған. Вазифалы кешеләргә - 20-40 мең, юридик берәмектәргә иһә 100-300 мең һум. Республикала яңы йыл каникулдарында, Һуңғы ҡыңғырау байрамында, Йәштәр көнөндә, Белем көнөндә, шулай уҡ һабантуйҙарҙа хәмер һатыу сикләнә.

✓Башҡортостан Мәскәү һәм Санкт-Петербург менән бергә Рәсәй Президенты гранттары конкурсы еңеүселәре исемлеген еттекләй. Ике баш ҡаланан тыш, республикабыҙҙың коммерцияға ҡарамаған ойошмалары 148 грант отто һәм 160 миллион һумға яҡын аҡса алды, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Уның һүҙҙәренсә, быйыл, Өфөнән тыш, Ғафури районы һәм Сибай үҙенең сифатлы проекттары менән ҡыуандырҙы. Сентябрҙә йәнә ғариза тапшырыу кампанияһы асыла икәне лә билдәләнде.

✓Республика Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Ташкент ҡалаһында милли байрамға - Һабантуйға һәм Башҡорт мәҙәни үҙәгенең 30 йыллығына арналған тантаналы сараларҙа ҡатнашты. Сәфәр барышында делегация Үзбәкстандың Алишер Навои исемендәге Милли китапханаһында булды, башҡортса китаптар тапшырҙы. Башҡортостан делегацияһы шулай уҡ Хәҙрәти-Имам дини комплексы етәкселеге менән дә осрашты һәм башҡорт телендәге Ҡөрьән китабын тапшырҙы.

✓Июлдә Башҡортостан халҡын 9 июлдән 11-енә тиклем өс ял көнө көтә. Өҫтәмә ял көнө 2022 йылда шәмбе, 9 июлгә, тура килгән Ҡорбан байрамын билдәләүгә бәйле индерелде. Шул сәбәпле ял көнөн дүшәмбегә күсерергә ҡарар ителде. Йома, 8 июлдә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара.

✓ *Ауыл хужалығы уҡыу йорттары йыл да йөҙәрләп агроном, зоотехник, ветеринар һәм башҡа ауыл хужалығы өлкәһе белгестәре әҙерләп сығара. Ошо йәш белгестәр ҡайҙа, нисек эшләүҙәре тураһында ла мәҡәләләр күрге килә.*

Баҫма гәзит уҡыусыға ҡыҙыҡлы булһын өсөн уның йөкмәткеле булыуы мөһим. Һәр кем, үҙенең йәшенә һәм һөнәренә ҡарамайынса, гәзиттә даими рәүештә үҙенә кәрәкле мәҡәлә йәки мәғлүмәт тапһа, ул уны уҡыясаҡ. "Киске Өфө"гә был йәһәттән һүҙ әйтеп булмай, сөнки кем ҡулына алһа ла, айырыла алмайынса уҡырлыҡ мәҡәлә таба. Ул мәҡәләләр бер тында уҡыла. Был да ҙур оҫталыҡ талап итә хәбәрселәрҙән, һәм "Киске Өфө" хеҙмәткәрҙәре быға уңышлы өлгәшә

Форсаттан файҙаланып, ҡайһы бер теләктәрем тураһында ла әйтеп үткем килә. Ауыл хужалығы өлкәһенә күберәк иғтибар бүлһәгеҙ ине. Ауыл хужалығында эшләүселәр менән әңгәмәләр баҫылһа, был өлкәлә ниндәй ярҙамдар барлығы тураһында яҙылһа, шәп буласаҡ. Шулай уҡ фермерҙар үҙҙәренең уңышлы эшләү серҙәре менән бүлешһә, һәр кем өсөн ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булыр ине. Ауыл хужалығы уҡыу йорттары йыл да йөҙәрләп агроном, зоотехник, ветеринар һәм башҡа ауыл хужалығы өлкәһе белгестәре әҙерләп сығара. Ошо йәш белгестәр ҡайҙа, нисек эшләй, эшләү шарттары ниндәй һәм башҡа үҙенсәлектәр тураһында ла мәҡәләләр күрге килә.

Иҡтисадҡа ҡағылышлы әйберҙәр күренеп ҡала, ләкин етерлек кимәлдә түгел. Иҡтисадты биш бармағы кеүек белгән үҙебеҙҙең егет һәм ҡыҙҙар барҙыр бит, халыҡҡа ябай тел менән ошо өлкә тураһында аңлатыу эше алып барһалар икән. Беҙҙең илгә ҡарата иҡтисади баҫымдар тураһында күп ишетәбеҙ, уҡыйбыҙ, ләкин ошо өлкәлә эшләмәгән кеше өсөн улар аңлашылып та бөтмәй. Бына ниндәй мәҡәләләр көтә һәр баҫманан гәзит уҡыусылар.

Гәзит һүҙе юғары көскә эйә. Ошо хәҡиҡәтте онотмайынса, үҙ уҡыусыһына кәрәкле булып, тағы ла оҙаҡ йылдар беҙҙе ҡыуандырып, йорттарыбыҙға килеп торһон "Киске Өфө".

Миңсара ӘХМӘТОВА.
Әбйәлил районы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

? Һабантуйҙар ысынлап та бөтә халыҡ теләгәнсә үттеме? Был көтөп алған байрамыбыҙҙа нимәләр оҡшаны һәм нимәләр оҡшаманы?

Сабир ҒӘЛИМЙӘНОВ, Ҡыйғы районы: Кеше күп йыйылған урындарҙы яратмаһам да, район һабантуйын ҡалдырмаҫҡа тырышам. Ошо матур, сағыу байрамда районыбыҙҙың йәшәү һулышын, кешеләрҙең кәйефен тойорға мөмкин. Быйыл оҙайлы байрам көндәренә тура килеү сәбәплеме, район һабантуйында айырыуса кеше күп булды. Байрам да юғары кимәлдә ойошторолғайны. Тирмәләр конкурсы, милли һәм спорт ярыштары, концерттарҙан тыш, быйыл беренсе тапҡыр һәр ауыл биләмәһе тирмәһендә төрлө оҫталыҡ дәрестәре үҙғарыуҙары оҡшаны. Мәҫәләп, ағастан әйбер эшләү, ҡыҫтыбый, сәк-сәк, бауырһаҡ һәм башҡа милли аш-һыу әҙерләү буйынса оҫталар бик ҡыҙыҡлы оҫталыҡ дәресе үткәрҙе. Хатта ғәҙәти билмән эшләүҙе лә мауыҡтырғыс сараға әйләндерҙе ауыл уңғандары. Үҙебеҙҙең яҡта үҫкән хуш еҫле үләндәр менән сәй ҙә тәмләтеләр ҡунаҡтарға, уларҙан ҡоймаҡ та ҡойҙорттолар.

Быйылғы һабантуйҙың тағы ла бер күңелгә ятҡан үҙенсәлеге - Ҡыйғы районы баҫыуҙарында эшләгән "тимер ат"тар күргәҙмәһе ойоштороло-уы. Яландар буйлап гиҙгән ғәйрәтле һәм бәләкәй ауыл хужалығы техникаһын яҡындан күреү ололарға ла, балаларға ла ҡыҙыҡлы булды. Айырыуса Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған механизаторы, КПСС һәм ВЛКСМ съездарында бер нисә тапҡыр делегат булараҡ ҡатнашҡан, Ҡыйғы районы Ибрай ауылы ҡыҙы Ғалина Нәҡиә апайҙың "ДТ-20" тракторын күреп ҡыуандыҡ. Әйтергә кәрәк, был трактор әле булһын баҫыу эштәрендә файҙаланыла икән. Ауыл хужалығы баҫыу һәм ер эштәре генә түгел, шул уҡ малсылыҡ та икәнлеген күҙ уңында тотоп, һабантуйҙа тоҡомло мал-тауарҙар күргәҙмәһе лә эшләне. Шулай уҡ байрамға килеүселәр урындағы етештереүселәрҙең төрлө тауарын - һөт аҙыҡтарын, ҡымыҙ, билмән һәм башҡаларҙы - тәмләп ҡараны.

Шулай ҙа миңә һабантуйҙың иң күңелгә ятҡан мәле - ауыл хужалығы эшсәндәрен тәбрикләү. Ысынлап та, һабантуй уларҙың байрамы, нәҡ улар был көндә ҡәҙерһөрмәт күреп, табындың иң түрендә ултырырға, маҡтау һүҙҙәрен тыңларға тейеш. Ауыл хужалығына иғтибарҙы арттырыусылар, был өлкәлә эшләрлек үҙҙәренә алмаш үҫтереүселәр нәҡ бөгөнгө алдынғы механизатор, тракторсы һәм науынсылар. Уларҙың эше баһаланыуын күреп, йәштәр ҙә юрист һәм иҡтисадсы булырға теләүҙән туҡтап, ауыл хужалығына йөҙ бороро-ар. Ауылда ла бына тигән донъя көтөп була икәнен йәштәргә аңлата алырлыҡ итеп уҙғарылған һабантуйҙарҙың баһаһы ҙур. Баҫыу һәм малсылыҡтың ни тиклем ауыр булыуына ҡарамайынса, ошо өлкәлә үҙенең эшен булдырып, кешене эш менән тәьмин итеүсе фермерҙарға ла дан йырларға кәрәк. Элекке һымаҡ колхоз-совхоздарҙы хәҙер нәҡ ошондай уңғандарҙың КФХ, ООО, СПК һәм башҡа төрлө аталған, ләкин асылы бер үк булған ойошмалар алыштыра ла инде. Һабантуйҙа матур итеп ҡотланылар барыһын да, улар өсөн халыҡ та ҡыуанды.

Зөлфиә САФИНА, Өфө ҡалаһы: Беҙ баш ҡалала йәшәгәс, яҡын-тирәләге һабантуйҙарға барабыҙ. Быйыл да Өфөнән алыҫ түгел районға барып ҡайттыҡ. Байрам һәр ваҡыт матур, күңелле була инде ул, шуға күрә маҡтауға күп туҡталмай, үҙемә оҡшамаған етешһеҙлектәр тураһында әйтеп үткем килә.

Ни өсөн район һабантуйҙарындағы ат сабышына әллә ҡайҙан килгән сит һыбайлыларҙы индерәләр? Улар сабыш өсөн махсус әҙерләнә һәм, тәбиғи, беҙҙең сабышҡа ла, эшкә лә тотонолған аттар уларға эйәрә алмай. Бүләк тә, аҡсалата премия ла ситтәргә китә, ә шул район кешеһе бер нәмәһеҙ тороп ҡала.

Тағы ла шуныһы. Һабантуйға кеше йыйыла, сәхнә ҡоролған, ләкин ул буш. Тирмәләр һәм ауыл биләмәләре тукталҡаларын комиссия ҡарап бөтмәйенсә, концерт башланмай. Ни өсөн һабантуйға килгән халыҡ көтөргә тейеш һуң ул? Әйҙә, һабантуйҙы ачындар ҙа, байраҡты күтәрһендәр ҙә, күңелдәре булғансы ҡарап йөрөһөндәр, ә халыҡ өсөн йыр-бейеү яңғарай торһон.

Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

ЙӘЙГЕ КӘСЕБЕГЕҘ УҢ, килемегеҙ мул булһын!

Оҙаҡламай урманда еләк-емеш өлгөрәсәк. Был күптәр өсөн аҡса эшләп ҡалыу мәле. Беҙҙең ғаилә лә йәйге миҙгелдең бер көнөн дә әрәм итмәҫкә, файҙалы итеп үткәрергә тырыша. Бөгөн үҙебеҙ ҡулланған аҡса эшләү юлы тураһында яҙып үтәм.

Мин әлеге ваҡыттан уҡ еләккә заказ йыя башлайым. Иң тәүҙә турғай (ҡайын еләге лә тиҙәр, төрлө яҡта төрлөсә әйтәләр) еләге бешә. Был тәмле лә, файҙалы ла еләкте күптәр ярата, шуға күрә алдан заказдар күп була. Ғәҙәттә, 1 литр турғай еләгең 500 һумға тәҡдим итәм. 5 литрҙан күберәк заказ бирһәләр, литрын 450 һумдан, ә 10 литрҙан алып - 400 һумға һатам. Турғай еләген йыйыу еңел түгел, үҙе ыуаҡ, әллә ни ырамай ҙа, шуға хаҡы ла оҫоҙҙан түгел. Ләкин даими клиенттарымды хаҡтар ҡурҡытмай. Еләк өлгөргәс тә, шылтыратып, ниндәй датаға һәм сәғәт нисәгә кәрәкләген аныҡлайым да, бөтә ғаиләбеҙ менән урманға юлланабыҙ. Һәр саҡ әйтелгән ваҡытҡа өлгөртәм, түләүҙе алдан талап итмәйем, шуға күрә клиенттарым йылдан-йыл арта ғына бара.

Турғай еләге миҙгеле тамамланһа, ер еләге бешә, шулай уҡ башҡа еләк-емештәр ҙә өлгөрә башлай. Уларҙың да һәр береһенең тәғәйен хаҡы бар.

Шулай уҡ ер еләген, мәҫәлән, таҙалап та бирә алабыҙ. Уның өсөн айырым хаҡ ҡуям.

Бөтә еләк-емеште лә таҙа, үләнһеҙ итеп йыйырға тырышабыҙ, сөнки тәҡдим иткән тауарындың йәме булмаһа, һатып алыусыһы ла булмаҫҡа мөмкин.

Еләк-емеш бешкәнгә тиклем бәшмәк һатабыҙ. Көндәр бер аҙ йылыныу менән урманда йөнтәҫ бәшмәк, бүрекбаш, ҡыу бәшмәк, һаңғырау бәшмәк һәм башҡалар барлыҡҡа килә. Беҙ үҙебеҙ гөрөздә һәм баллы бәшмәк кенә яратҡас, ҡалған бәшмәктәрҙе ашамайбыҙ, ләкин һанап үтелгән бәшмәктәргә һорау ҙур. Әлбиттә, бәшмәк еләккә ҡарағанда тиҙерәк йыйыла, шулай ҙа хаҡын әллә ни оҫоҙлатмайым. Бензин хаҡын һалам, бүленгән ваҡытты иҫәпләйем, заказдың әҙ йәки күп булыуын да күҙ уңында тотам.

Шулай иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем урман байлығын файҙаланып, аҡса эшләп ҡалабыҙ. Һәр ялыбыҙ, отпуск көндәребеҙ ошо эшкә тотонола, ләкин балалар ҙа, ирем дә ризаһыҙлыҡтарын белдермәй, ихлас йөрөп йыялар. Балаларҙың эшләгән аҡсаларының бер өлөшө тик үҙҙәренә булһа, ҡалғаны ғаиләнең дөйөм кәрәк-ярағына тотонола. Улар хәҙер кеҫә аҡсаһын бүлеп тоторға өйрәнде, шуға күрә уҡыу йылы дауамында киноға һәм башҡа ошондай күңел асыу шөғөлдәренә аҡса бүлмәйбеҙ. Дөйөм аҡсанан йортҡа берәй әйбер алабыҙ йәки көҙөн сәйәхәткә сығып китәбеҙ.

Был оҙон яҙмам менән нимә әйтергә теләнем һуң? Емеш-еләктең бешкәнен көтөп алып, уны йыйып һатыу урынына алдан бирелгән заказдар буйынса һатыу күпкә килемлерәк һәм тиҙерәк. Мин тәүге клиенттарымды интернетта эҙләнем, Өфөләге таныш-тоношҡа әйттем, туғандарҙы ла реклама эшләүҙәрен һораным. Шулай итеп яйлап клиенттар йыйылды. Йәйге кәсебегеҙ уң, килемегеҙ мул булһын, уңғандар.

Зөмәйрә ФӘТҠУЛЛИНА.
Иглин районы.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓25-26 июндә Әбйәлил районы Асҡар ауылында Түңгәүер ырыуы йыйыны уҙа. Ул 1812 йылғы Ватан һуғышына 210 йыл тулыуға арнала. Программала ҡаралғанса, был сарала Күҫәк Солтанғоловҡа һәйкәл асыласаҡ, шулай уҡ ғилми-ғәмәли конференция буласаҡ. 26 июндә иһә иртәнге 10.00 сәғәттә Асҡар ауылы эргәһендәге Айғырбатҡан яланында һабантуй башлана.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте республика райондары буйлап автоуҙыш ойоштороҙо. Автоуҙыштың маршруты: Өфө - Иҫке Собханғол - Белорет - Баймаҡ - Сибай - Асҡар. Халыҡҡа Башҡортостан тарихына, мәҙәниәтенә, тәбиғәтенә, республиканың күренекле эшмәкәрҙәренә арналған яңы китаптар, балалар өсөн сағыу йыйынтыҡтар, Башҡортостан яҙыусылары һәм шағирҙарының әҫәрҙәре, бүләк баҫмалары, мосолман һәм уҡыу-методик әҙәбиәт тәҡдим ителде.

✓Башҡортостан мәктәптәрендә һәм балалар баҡсаларында балаларға биойод менән байытылған йогурт ашата башланылар. Был аҙыҡ республикабыҙҙың күпселек районда-рында күҙәтелгән йодҡа ҡытлыҡты иҫкәртеү өсөн әҙерләнгән. Билдәләнеүенсә, биойод менән байытылған йогурт һатыуға ла сығарылған. Уны Башҡортостан район-ҡалаларындағы "Һөт кухняһы"ның 40 таратыу пунктында һатып алырға мөмкин. Үҙенсәлекле йогурт Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Октябрьскийҙа һәм Үргә Ҡыйғыла етештерелә.

✓Мал аҙығы әҙерләү - аграр секторҙа тағы бер йәйге мөһим кампанияларҙың береһе. Һауа торошо яҡшырыу менән хужалыҡтар бесән саба, сенаж һала башланы. "Быйыл аграрийҙар ике йылға етерлек ҡаты һәм һутлы мал аҙығы әҙерләргә ниәтләй. 2022 йылғы сәсеүлектәр структураһында мал аҙығы баҫыуы 650 мең гектарҙы биләй, шуның 436 мең гектары - күп йыллыҡ үләндәр", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығынан.

✓22 июндән Башҡортостанда 7 йәшкә тиклемге балалар электричкаларҙа бушлай йөрөй ала. Был турала 2022 йылдың 11 июнендәге 178-се федераль законға һылтанма менән Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы хәбәр итте. Балаларға өлкәндәрһеҙ поезда йөрөү тыйыла, тип белдерҙеләр компанияла.

✓ *Был фестивалдә башҡорт атлыларының батырлығына ғына түгел, шулай уҡ үҙҙәренең сыҙамлылығы менән дан тотҡан, күп быуаттар дауамында сифаттарын һаҡлаған башҡорт тоҡомло аттарға ла ихтирам күрһәтергә теләйбеҙ.*

ҠЫҪҠАСА

АЛТЫ ПРОЦЕНТ МЕНӘН...

Рәсәй Президенты Владимир Путин 2023 йылдың аҙағына тиклем балаһы тыуған ғаиләләргә льготалы ставка буйынса ипотека программаһын киңәйтергә ҡушты. Хәҙер программа 2018 йылдың 1 ғинуарынан 2022 йылдың 31 декабренә тиклем икенсе йәки артабанғы балаһы тыуған ғаиләләргә ҡағыла. Бындай кредитты 2023 йылдың аҙағынаса алырға мөмкин, тип хәбәр итте ТАСС. Йылына 6 процентҡа тиклем ставка менән ғаилә ипотекаһы программаһы 2018 йылдың башында эшләй башланы. Ул яңы төҙөлгән йортта фатир алырға, шәхси йорт һалырға һәм ер участкаһы һатып алырға, шулай уҡ беренсел баҙарҙағы торлаҡҡа ипотеканы ҡапларға мөмкинлек бирә. Мәскәү, Санкт-Петербург, Мәскәү һәм Ленинград өлкәләре өсөн дәүләт программаһы буйынса кредиттың максималь суммаһы 12 миллион һум булһа, башҡа төбәктәр өсөн иһә 6 миллион һум. Беренсе иғәнә фатир хаҡынан 15 проценттан да кәм булмаҫҡа тейеш.

✓ **Башҡортостанда Ҡорбан байрамына ситтән мал индереү сикләнә.** Башҡортостандың Ветеринария идаралығы начальнигы Азат Йыһаншин белдереүенсә, 9-нан 11 июлгә тиклем имен булмаған субъекттарҙан һәм илдәрҙән законһыҙ һыйыр малы килтереү хәүефе арта. "Был сара бешмә, бруцеллез һәм башҡа хәүефле сирҙәрҙе иҫкәртеү өсөн эшләнә. Карантин сараларын үткән хайуандарҙы ғына индерергә рөхсәт ителә", - тине Азат Йыһаншин. Уның әйтеүенсә, ҡорбан малы Башҡортостан ветеринария хеҙмәте контролендәге махсус бүленгән майҙансыҡтарҙа ғына салына. "Башҡортостандың барлыҡ муниципалитет һәм район башлыҡтарын беҙгә ярҙам күрһәтергә саҡырам, сөнки агросәнәғәт комплексы предприятиеларының ғына түгел, тотош республика халҡының именлеге лә шуға бәйле", - ти Азат Йыһаншин.

✓ **Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, халыҡ иҫәбен алыу көнөнә - 2021 йылдың 1 октябренә Рәсәйҙә даими йәшәгән 147,2 миллион кеше иҫәпкә алынған.** 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу менән сағыштырғанда, Рәсәй халҡы 2,05 миллион кешегә, йәғни 1,4 процентҡа күберәк, тип хәбәр итте Башстат етәксеһе Әкрәм Ғәниев хөкүмәттең Республикаға идара итеү үҙәгендә уҙған оператив кәңәшмәһендә. Рәсәйҙең 28 төбәгендә халыҡ һаны артҡан. "Илдең халыҡ тығыҙ йәшәгән төбәктәре - Мәскәү, Мәскәү өлкәһе, Краснодар крайы, Санкт-Петербург, Свердловск һәм Ростов өлкәләре, Башҡортостан, Татарстан. Уларҙа илебеҙ халҡының өстән бер өлөшө йәшәй. Башҡортостан Рәсәй субъекттары араһында халыҡ иҫәбе буйынса етенсе, шулай уҡ Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында беренсе урынды биләй", - тине Әкрәм Ғәниев. 2021 йылдың 1 октябренә ҡарата яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда даими йәшәгән 4,091 миллион кеше иҫәпкә алынған. 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары менән сағыштырғанда, республика халҡы 0,5 процент пунктына арткан. 2010 йыл менән сағыштырғанда, баш ҡалала халыҡ туғыҙ процентҡа арткан.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ҠАҘАҒСТАНҒА САҠЫРА

Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ҡазағстан президенты Ҡасым-Жомарт Токаев менән эшлекле осрашыу үткәрҙе. Улар сауҙа-иҡтисади, сәнәғәт, инвестиция һәм мәҙәни-гуманитар өлкәләрҙә Ҡазағстан менән Башҡортостан араһында хеҙмәттәшлекте артабан нығытыу сараларын тикшерҙе.

Ҡазағстандың Рәсәй менән стратегик партнерлығында Башҡортостан махсус урын биләй, тип билдәләне Ҡасым-Жомарт Токаев әңгәмә барышында. Дәүләт башлығы Ҡазағстан менән Башҡортостан араһында сауҙа-иҡтисади мөнәсәбәттәрҙең үҫешеүен билдәләне. "Беҙ, һис шикһеҙ, Ҡазағстан менән Башҡортостан араһында эшлекле хеҙмәттәшлек өсөн аныҡ проекттар булдырыу һәм уларҙы үҫтереү менән ҡыҙыҡһынабыҙ. Шуға күрә һеҙҙең компанияларҙың етәкселәрен Ҡазағстанға саҡырам. Беҙ барлыҡ шарттарҙы булдырырбыҙ. Әгәр һеҙҙең яҡтан индустриаль потенциалды иҫәпкә алып, берлектәге ҡыҙыҡлы проекттар тәҡдим ителһә, һәйбәт эшләрбеҙ тип ышанам", - тине Ҡазағстан президенты. Токаев һүҙҙәренсә, Башҡортостан Ҡазағстан менән Рәсәйҙең төбәк-ара хеҙмәттәшлеген нығытыуға ҙур өлөш индерә. Радий Хәбиров ошо ил менән хеҙмәттәшлекте үҫтереүҙең стратегик мөһимлеген билдәләне һәм: "Ҡазағстанға сәфәрем барышында бер нисә килешеү төҙөлдө һәм ғәмәлгә ашырылды. Тауар әйләнеше йылдан-йыл арта. Ул әле яҡынса 430 миллион доллар тәшкил итә", - тине.

БИШЕНСЕ УРЫНДАБЫҘ

Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Башҡортостан 65 миллиард һумлыҡ 31 килешеү төҙөнө.

Хөкүмәт Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов йәлеп ителгән инвестицияларҙың дөйөм күләме 65 миллиард һумдан ашыуыраҡ булыуын билдәләне. "Үҫеш институттары линияһы буйынса килешеүҙәр ҙә бар. Мәҫәлән, ДОМ.РФ корпорацияһы менән 21 миллиард һумдан ашыу аҡса йәлеп итеү өсөн килешеү төҙөлдө. Катодлы баҡыр етештереү тураһында 13,5 миллиард һумлыҡ, Белоруссияның "Амкодор" холдингы менән 2,5 миллиард һумлыҡ килешеүгә ҡул ҡуйылды. Улар менән килешеү сиктәрендә инвестиция проектын ғәмәлгә ашырыу тиҙлеген һынап ҡарарға тигән маҡсат ҡуябыҙ. 2023 йылдың мартында уҡ продукция етештереүгә сығырға теләйбеҙ", - тип билдәләне Рөстәм Моратов. Форумда Рәсәй төбәктәрендә Инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингы һөҙөмтәләре иғлан ителде. Уны йыл һайын Стратегик башланғыстар агентлығы әҙерләй. 2021 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында бишенсе урынды һаҡлап ҡалды. Хәтерегеҙгә төшөрөбөҙ, бер йыл элек республика тәүге тапҡыр бишенсе урынға сыҡты. 2019 йылда - туғызынсы, ә 2018 йыл йомғаҡтары буйынса 16-сы урында ине. Тәүге урындарҙа - Мәскәү, Татарстан, Мәскәү һәм Тула өлкәләре. Башҡортостан Түбәнге Новгород, Төмән, Новгород, Сахалин өлкәләре менән бишенсе урынды бүлеште.

БАЙМАҠТА - ИҢ ҘУР АТ ПАРАДЫ

Баймаҡ районында башҡорт тоҡомло аттарҙың республика фестивален уҙғарыуға әҙерлек эштәре бара. "Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, "Башҡорт аты" төбәк фестивале йылҡысылыҡ, ҡымыҙ бешеү, кәсептәр, спорт ярыштары традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү маҡсатында уҙғарыла.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡорт аты көнөн булдырыу тәҡдиме менән сығыш яһағайны. Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров был башланғысты хуплауын белдерҙе һәм тейешле указ сығарҙы. Документка ярашлы, байрам йыл һайын июлдең өсөнсө шәмбеһендә уҙғарылырға тейеш. Баймаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Азат Бадранов рәйеслегендә ошо үҙенсәлекле фестивалде үткәреү буйынса ойоштороу комитетының тәүге ултырышы уҙҙы. Баймаҡ районы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, август башында Граф күле янындараҡ "Башҡорт аты" республика фестивален үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанға Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән йылҡысылыҡ өлкәһендәге эксперттар килә. Пленар ултырышта йылҡысылыҡты, ҡымыҙ бешеү эшен һаҡлау һәм үҫтереү, шулай уҡ башҡорт тоҡомло аттарҙы популярлаштырыу мәсьәләләре тикшереләсәк. Бынан тыш, ҙур байрам программаһында - "Ылаҡ", "Тай-тулаҡ" милли спорт төрҙәре буйынса мауыҡтырғыс ярыштар, уҡ атыу, башҡорт тоҡомло аттар ҡатнашлығында сағыу шоу. "Шулай уҡ бында Рәсәйҙә иң ҙур ат парадын уҙғарыу күҙаллана, - тип өҫтәне Азат Бадранов. - Республика Рәсәйҙең әлегә бер төбәгендә лә булмаған фестиваль ойошторорға йыйына. Уға әҙерлек әүҙем алып барыла, был ҙур ваҡиға булмаҡсы, артабан уның федераль статус алырына ышанам. Был фестивалдә башҡорт атлыларының батырлығына ғына түгел, шулай уҡ үҙҙәренең сыҙамлылығы һәм талымһыҙлығы менән дан тотҡан, күп быуаттар дауамында үҙенсәлекле сифаттарын һаҡлаған башҡорт тоҡомло аттарға ла ихтирам күрһәтергә теләйбеҙ. Ошондай фестиваль - мөмкин тиклем күберәк кешене башҡорт аты феномены менән таныштырыу өсөн яҡшы мөмкинлек".

Вероника НИКИТИНА.

УРМАНДАР ТЕРГЕҘЕЛӘ

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында урманды терегеҙеү буйынса алда барған урмансылыҡтарҙы атаны.

"Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән һәм Йылайыр урмансылыҡтары - лидер. Ҡуртымға алыусылар ҙа урманды тергеҙеүгә яуаплы ҡарай - быйыл улар 3,7 меңдән ашыу гектар майҙанда яңы ағас ултыртты. Быларҙың барыһы ла урман хужалығы хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүендә башҡарыла, - тип яҙҙы республика Башлығы. - Йыл һайын яҙ һәм көҙөн республикала урманды тергеҙәбеҙ. Быйыл башлыса 5,2 мең гектарҙа ҡарағай, шыршы, ҡайын, йүкә, дардар ултырттыҡ. Көҙ дауам итәсәкбеҙ".

Радий Хәбиров әйтеүенсә, үҫентеләр менән республика питомниктары ярҙам итә. Уларҙа йылына яҡынса 50 миллион үрсетмә үҫтерелә. Быйыл яҙ урман культуралары орлоғо 20-нән ашыу гектарҙа сәселде. Һауа торошона бәйле булмаҫ өсөн үҫенте үрсетеүгә тағы 24 теплица төҙөлдө. Бөгөн улар республикала 56. "Башҡортостан биләмәһенең 40 процентын урман биләй. Һәм беҙ киләсәк быуын өсөн уны һаҡларға бурыслы. Был мөһим эште артабан да дауам итәсәкбеҙ", - тине төбәк етәксеһе.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Башҡортостандың баш ҡалаһы һәм Екатеринбург, Ҡазан, Хабаровск һәм Цицикар, Гуанчжоу ҡалалары (Ҡытай Халыҡ Республикаһы) араһында алты яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Тантана видео-конференц-бәйләнеш форматында үтте. Ратмир Мәүлиев белдереүенсә, һуңғы йылдарҙа тығыҙ һәм оҙайлы муниципаль-ара мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырылды, һөҙөмтәлә 18 сит ил һәм Рәсәйҙең 14 ҡалаһы менән хеҙмәттәшлек булдырылды. Рәсәй һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһы ҡалалары менән үҙ-ара файҙалы мөнәсәбәттәр булдырырбыҙ, тигән ышаныс белдерҙе ул.

✓Медицина хеҙмәткәрҙәре көнөндә Өфөлә 300-ҙән ашыу медицина хеҙмәткәрен бүләкләү тантанаһы булды. Ҡотлау алты майҙансыҡта үткәрелде. Башҡорт дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда медицина ойошмаларының ижади коллективтары ойоштorған концерттан һуң, Медицина ойошмаларының флагтарын тотҡан врачтар колоннаһы Зәки Вәлиди урамынан "Торатау" Конгресс-холына тиклем атлап уҙҙы.

✓10 июндән Өфөлә "Макдоналдс" селтәре ресторандары ябылды. Был хаҡтағы мәғлүмәтте "Башинформ" агентлығына ике ресторан раҫланы. Ҡасанға тиклем - әлегә билдәһеҙ. Уларҙың эше туҡталыуы брендҡа ҡағылышлы үҙгәрештәргә бәйле.

✓Баш ҡала автомагистралдәрендә юл билдәләре тулыһынса эшләнмәүгә ямғырҙар сәбәпсе булған. Эште тамамлау өсөн көндәрҙең 4-5 тәүлек ҡоро тороуы ла етә. Шулай уҡ финанстар буйынса ла проблемалар булған, әммә уны Башҡортостандың Транспорт министрлығы 145 миллион самаһы аҡса бүлеп, хәл иткән. Әле 7 бригада тупланған, ҡоро көндәр башланыу менән улар эшкә тотонасаҡ. Шул уҡ ваҡытта, статистика буйынса, Өфөлә юлдарға билдәләр һалыу былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда ике тапҡырға күберәк күләмдә башҡарылған.

✓Дағстандың баш ҡалаһы Махачкала аэропортында Өфөнән тәүге тура рейсты ҡаршы алдылар. Өфө аэропортының телеграм-каналынан хәбәр итеүҙәренсә, трап һауа шарҙары менән биҙәлгән, пассажирҙарҙы урындағы журналистарҙың ижади төркөмө ҡаршы алған. Хәтерегеҙгә төшөрөбөҙ, осоштарҙы 20 июндән дүшәмбе һәм кесаҙна көндәрендә, Nordwind Airlines авиакомпанияһының самолеттары башҡара.

“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.

✓ *Закон граждандарҙың социаль яҡланмаған категорияларына ҡарата хоҡуҡи ғәҙәлһеҙлекте бөтөрөүгә йүнәлтелгән. Ул етемдәр, инвалидтар бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең балаларына ла ҡағыла.*

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

БЕРЕНСЕ СЕНТЯБРҘӘН...

Мәғлүм булыуынса, һәр йыл 1 июлдән коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр арта. Инде быға яйлап булһа ла өйрәнеп барабыҙ, шикелле. Әммә Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең быйыл 3 февралдә ҡабул ителгән 92-се ҡарары сентябрҙә күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәрҙе тағы бер шаңҡытыуы ихтимал. Оҙонға һуҙмай ғына әйткәндә, 21 июндә Өфө ҡала хакимиәтендә үткән түңәрәк ҡорҙа һуҙ тап ошо сентябрҙә көтөлгән үҙгәрештәр тураһында барҙы.

Ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев билдәләп үтеүенсә, быға тиклем халыҡ коммуналь хеҙмәттәр өсөн шәхсән ҡулланған күләмдән тыш, дөйөм йорт ихтыяждарын раҫланған норматив буйынса түләһә, ә артыҡ өлөш идара итеү ойошмалары иңенә ятһа, 1 сентябрҙән барлыҡ сығымдар ошо йорттарҙа йәшәүсе милекселәр кеҫәһенән сығасаҡ. Яңыса түләү шарттары менән "Өфө ҡалаһы торлаҡ хужалығы идаралығы" МБУ-ны директоры урынбаҫары Альфред Зиннәтуллин таныштырҙы һәм коммуналь ресурстарҙы - һыу, электр, йылылыҡ - тотоноуҙың нормативтан артыҡ күләме нисек иҫәпләнеүен миҫал ярҙамында аңлатты. Мәҫәлән, бер йорт айына 100 кубометр ресурс ҡуллана икән, шәхси иҫәпләү ҡорамалдары һәм иҫәпләү ҡорамалы булмау һөҙөмтәһендә норматив буйынса түләгән милекселәрҙең дөйөм ҡулланған күләме 70 куб тәшкил итһә, ҡалған 30 кубометры - дөйөм йорт милке өлөшө. Шуларҙың 10 кубометры - милекселәр түләгән норматив (КРСОИ), 20 кубометры - нормативтан артҡан өлөш һәм ул идара итеү ойошмалары елкәһенә ята. 1 сентябрҙән милекселәргә 2022 йылдың 4 айында (сентябрь-декабрь) нормативтан артҡан КРСОИ өсөн түләүҙәр 2023 йылдың 1-се кварталында киләсәк.

Альфред Зиннәтуллин аңлатыуынса, дөйөм йорттоң ресурс иҫәбен алып барған ҡорамалы булмағанда, түләү раҫланған норматив буйынса башҡарыла (ғәҙәттә, норматив ғәмәлдә ҡулланылған ресурстарҙан күберәк билдәләнә); түләүҙәр факт буйынса башҡарыла; йорт милекселәренең дөйөм йыйылышы ҡарары менән түләү уртаса айлыҡ күләмдән сығып иҫәпләнә һәм киләһе айҙа ҡабаттан ҡаралып, төҙәтелә, шулай уҡ түләү факт буйынса башҡарыла.

Дөйөм йорттоң иҫәп алыу ҡорамалы булғанда һәм милекселәр йыйылышы уҙғарелмәгәндә лә түләүҙәр норматив буйынса башҡарыла һәм киләһе айҙа ул ҡабаттан ҡарап, дөрөҫләнә. Үҙ фатиры өсөн һәм дөйөм йорт ихтыяжы өсөн түләүҙәр айырым квитанцияларҙа килә. Ҡайтанан иҫәпләү йылына киләһе йылдың беренсе кварталында башҡарыла. Әгәр идара итеү ойошмаһы алмашынһа, дөйөм йорт ихтыяжы өсөн түләүҙәр һуңғы ай өсөн түләү квитанцияһына индерелә.

Әйткәндәй, идара итеү компанияларының бурысы дөйөм йорт ихтыяжы өсөн ҡулланылған ресурстар өсөн түләүҙән генә түгел, ә ошо йортта йәшәүсе һәм түләүҙәрҙе ваҡытында башҡармаусы милекселәр иҫәбенә лә арта. БашРТС мәғлүмәттәре буйынса, йыл ярым эсендә баш ҡаланың идара ойошмаларының эҫе һыу өсөн бурысы ғына ла 267 миллион һумға еткән. Бында тағы ла бер миҫал килтереп китеү урынлы: мәҫәлән, аныҡ бер йортта апрелдә дөйөм йорттағы иҫәп ҡорамалының эҫе һыуҙы 183 кубометр күләмендә тотоноуын күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта милекселәр фатирҙарҙан тапшырған күрһәткестәр буйынса тотонолған эҫе һыу күләме 132 кубометр була, фатирҙарында иҫәп ҡорамалдары булмағандар өсөн - 25 кубометр, ә дөйөм йорт ихтыяжына 12 кубометр яҙыла. Был осраҡта эҫе һыуҙы нормативтан артыҡ ҡулланыу 14 кубометр тәшкил итә һәм ул идара ойошмаһы иңенә ята. Артыҡ кубометрҙар ҡайҙан килеп сыға? Асыҡланыуынса, сәбәптәрҙең береһе булып иҫәп ҡорамалы булмаған фатирҙа бер кеше теркәлеп, унда бер нисә кеше йәшәгән осраҡтарҙың булыуы тора.

Шулай уҡ сығыш яһаусылар артыҡ кубометрҙар барлыҡҡа килеүгә дөйөм йорттарҙағы иҫәп ҡорамалдарының бөгөн 40 проценты самаһы ғына эшләүе, торбаларҙан һыу ағып тороуы ла сәбәп булыуын билдәләне. Торлаҡ-коммуналь хужалығында йәмғәт контроле буйынса төбәк үҙәге етәксеһе Антон Дубовский, йылылыҡ өсөн нормативтан артҡан бурыс барлыҡҡа килеүе өсөн яуаплылыҡты идара компанияларына ғына түгел, ә ресурс менән тәьмин итеү ойошмаларына ла һалырға тәҡдим итте. Ғөмүмән, был тема буйынса аңлашылмаған һәм асыҡлыҡ талап иткән мәлдәр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, быға тиклем идара итеү ойошмалары иҫәбенә йыйылған бурыстарҙы кем ҡаплай? Улар "ҡара һаҡал" булып эйәреп йөрөп, яңы ҡарар буйынса намыҫлы милекселәр елкәһенә ятамы, әллә сентябргә тиклем намыҫһыҙ - бурыс йыйған милекселәрҙән түләттереләме һәм нисек? Әллә идарасы ойошмалар банкротлыҡҡа сығарылып, яңы ҡарар буйынса иҫәпләүҙәр һәм түләүҙәр аҡ ҡағыҙҙан - яңы биттән башланамы?

Был һәм башҡа һорауҙарға, моғайын, сентябргә тиклем яуап таба алырбыҙ, сөнки түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар алдағы ике айҙа киң мәғлүмәт саралары, социаль селтәрҙәр, йорттарҙың милекселәре чаттары, иғландар таҡталары аша халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыуҙы йөкмәтте. Хәйер, яуап таба алмаған хәлдә лә ҡарар 1 сентябрҙән көсөнә инә...

Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.

ҠЫСҠАСА

ТАШЛАМА МЕНӘН...

✓ **Колледждарға һәм техникумдарға уҡырға ингәндә льготалар тураһында закон проекты ҡабул ителде.** Рәсәй Дәүләт Думаһы рәйесе һүҙҙәренсә, уҡырға ҡабул иткәндә социаль яҡлауһыҙ граждандарға өҫтөнлөк бирелә. Дәүләт Думаһы пленар ултырышта граждандарҙың льготалы категорияларына урта профессиональ белем биреү программалары буйынса уҡырға инеүгә өҫтөнлөклө хоҡуҡ биреү тураһында закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. "Закон проекты граждандарҙың социаль яҡланмаған категорияларына ҡарата хоҡуҡи гәҙәлһеҙлекте бөтөрөүгә йүнәлтелгән. Ул етемдәр, беренсе һәм икенсе төркөм инвалидтарына, бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең балаларына ла ҡағыла. Әле уларҙың вуздарға ғына федераль бюджет иҫәбенә өҫтөнлөклө рәүештә уҡырға инеү хоҡуғы бар", - тип билдәләне Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин. Тәҡдим ителгән үҙгәрештәргә ярашлы, социаль яҡлауһыҙ 13 категория техникум һәм колледждарға льготалы уҡырға инеү хоҡуғына эйә була.

✓ **Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған ҡарарында Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларына, инфраструктура объекттарын тергеҙеү өсөн халыҡтың йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин итеүгә мохтаж башҡа биләмәләргә командировкаға ебәрелгәндәр өсөн түләүҙәр күләмен билдәләү ҡағиҙәләре раҫланған.** Документҡа ярашлы, дәүләт хеҙмәткәре булмаған федераль дәүләт органдары хеҙмәткәрҙәре, ведомство ҡарамағындағы учреждениелар хеҙмәткәрҙәре, шулай уҡ Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары биләмәләрендә инфраструктура һәм йәшәү эшмәкәрлеге объекттарын тергеҙеү менән шөғөлләнгән башҡа ойошмаларҙың хеҙмәткәрҙәре командировка ваҡытында икеләтә эш хаҡы алырға тейеш. Бынан тыш, эш биреүсе бындай хеҙмәткәрҙәргә командировкаларҙағы өҫтәмә сығымдарҙы ҡаплау өсөн отчетһыҙ сумма түләргә хоҡуҡлы. Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары биләмәләренә командировкаға килгән бюджет ойошмалары хеҙмәткәрҙәре өсөн тәүлек түләү - 8480 һум.

✓ **Республика ауылда үҙмәшғүлдәр өсөн субсидияға Рәсәй бюджетынан 200 миллион һум алырға мөмкин.** 2023 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә өй эргәһендәге һәм баҡса участкаларында, шулай уҡ шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙа йәшелсә культураларын үҫтереү буйынса халыҡҡа яңы ярҙам саралары индерелә. "Үҙмәшғүлдәрҙең йорт янындағы участкаларҙан йәшелсә һәм картуф үҫтереп һатыу буйынса сығымдарына субсидиялар алыу мөмкинлеге бар. Республика ошо маҡсатҡа федераль ҡаҙнанан 200 миллион һумға тиклем аҡса алырға иҫәп тота", - тип хәбәр итте ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Ирек Сураҡов республиканың социаль-иҡтисади үҫешен тәьмин итеү буйынса оператив штаб ултырышында. Башҡортостан Башлығы ауылда үҙмәшғүлдәргә дәүләт ярҙамының яңы төрҙәре буйынса мәғлүмәт-аңлатыу эшен ойошторорға ҡушты. "Баҡсасыларыбыҙға үҫтерелгән продукцияны ҡала һәм ҡасаба баҙарҙарында һатыуҙа артабан да ярҙам итербеҙ, - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров. - Иң мөһиме, унда баҡсасылар үҙ продукцияһын үҙҙәре һатырға тейеш".

ХАЛЫҠ ДАУАНЫ

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Хәтерҙе яҡшыртыу

❖ Ананас атеросклероз барлыҡҡа килеүҙе иҫкәртә. Уны бигерәк тә күп мәғлүмәт һәм һандарҙы хәтерҙә тоторға бурыслы һөнәр кешеләренә ҡулланыу кәрәк. Айына 7-8 тапҡыр көнөнә 1 стакан ананас һутын даими эсергә кәрәк.

Базилик

❖ Базилик (базилик обыкновенный) ҡолаҡ шешен (отит) дауалауҙа файҙалы. 2 ҡалаҡ үләнгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп талғын утта ҡайнар хәлгә еткерергә, әммә ҡайнатмаҫҡа, 10 минут төнәтергә. Һыҙлаған ҡолаҡҡа боҫлама эшләп, 1-2 сәғәт торорға. Был рәүешле ҡолаҡ һыҙлауы бөткәнсе көн һайын дауаланырға була.

❖ Конъюнктивит булғанда 1 ҡалаҡ кипкән үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуынғансы төнәтергә. Ошо төнәтмә менән күҙҙе көнөнә бер нисә тапҡыр сайырға.

❖ Тән ҡысығанда 2 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Ашарҙан алда көнөнә 2-3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

Бәпембә

❖ Ашҡаҙан яман шеше (рак) менән яфаланғанда бәпембә япрағы, майҙа йыйылған кесерткән япрағы, меңъяпраҡ һәм юл япрағы һуттарын бер тигеҙ өлөштә һығып ҡушырға. Ашағандан 1 сәғәт үткәс, көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланырға, йәки 2 айға ла оҙайтырға мөмкин, шунан 1 ай туҡталып торорға. Был ысул башҡа төр шифалы сараларға ярҙам булараҡ ҡулланыла.

❖ Бауыр яман шеше булғанда ваҡ ҡына итеп тураҡланған бәпембә япрағы һәм тамырын тигеҙ өлөштә алып ҡушырға. Шуның 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. 50 мл төнәтмәне ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 4 тапҡыр эсергә.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

✓ *Һуғыш башланған осорҙа совет халҡы дошмандың көсөн, нацизмдың ни икәнен күҙ алдына ла килтермәй, улар һалдат шинеле кейгән немец эшселәре һәм крәҫтиәндәре тип уйлай һәм уларҙың беҙҙең яҡҡа сығырына ышана.*

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

АҒАС һАУЫТ-һАБА

Бөрйән районы Әтек ауылындағы көрәгәне тик бер төрлө биҙәк менән семәрләгәндәр: һауыттың өҫкө һәм аҫҡы өлөшөн, ҡапҡасы ситтәрен арҡан биҙәк тирәләтеп тора. Әммә был осраҡта ул күберәк ишелгән таҫмаға оҡшаған, сөнки ике рәт бер-береһенә ҡушылған, ә һүрәт айырым арҡыры һыҙаттар урынына мөйөштәр ярҙамында эшләнгән. Шундай уҡ, әммә вертикаль һыҙаттар арҡыры рәттәр менән киҫешеп, тәпәндең тояҡтарынан өҫкә ҡарай күтәрелә. Ҡапҡастың уртаһын түңәрәк эсендә урынлашҡан мөйөштәр теҙмәһе биҙәй.

Ғәҙелгәрәй ауылындағы көрәгә лә өҫтән һәм аҫтан ике ҡатлы мөйөштәр һыҙаты менән уратылған. Тояҡтарынан ишелмә биҙәк күтәрелә. Ситтәрендә тар арҡан биҙәктән ҙур түңәрәктәр эшләнгән. Ҡапҡасы биҙәкһеҙ, ул түңкәрелгән тәрилкә кеүек эшләнгән. Ситтәрендә семәрле ике тотҡаһы бар. Бөрйәндән тыш, бындай көрәгәләр күрше Күгәрсен районында ла осрай.

Мәндәғол ауылындағы ҡымыҙ көрәгәләре башҡаларына ҡарағанда бейегерәк булып күренгән. Әммә көрәгәләрҙең бейеклеге бер нисә сантиметрға ғына айырылған. Уларҙың бейеклеге киңлегенә тиң булған, әммә орнаменттары ситтәренән бер ни тиклем арауыҡ ҡалдырып урынлаштырылған һәм башҡа осраҡтарҙағына ҡарағанда киңерәк булған. Иң ситтә киҫешкән һыҙаттар эшләнгән, улар ҡыя шаҡмаҡ һәм өсмөйөштәр рәүешендәге ҡабарынҡы семәрҙәр хасил иткән. Тотҡаларына ла өсмөйөшлө биҙәктәр эшләнгән. Өҫкө арҡыры һыҙаттарға өсмөйөштәр теҙмәһе төшөрөлгән. Тояҡтарынан ишмә биҙәк күтәрелә һәм, ғәҙәттәгесә, арҡыры орнаменттың өҫтөнән үтә; ул аҫтағы "билбауҙы" тотоп торған кеүек. Ҡапҡасты биҙәүгә айырыуса иғтибар бүленгән. Ике үҙәктәш һыҙат менән ситтәре ҡаймаланған, уларҙың өҫтөнә "сатраш" алымы менән ҡыя шаҡмаҡ һәм өсмөйөштәр һырланған. Ҡапҡас уртаһында бер-береһенең өҫтөнә эшләнгән өс түңәрәк урынлашҡан. Үҙәк түңәрәк ҡыя һыҙыҡ - нурҙар ярҙамында тигеҙ булмаған өлөштәргә бүлгеләнгән. Уның тирәләй нәҙек арҡан биҙәк һырланған, шунан һауыттың һәм ҡапҡас ситенә эшләнгән кеүек ҡыя шаҡмаҡтар һыҙаты уратып алған. Ҡалған майҙанда бер-береһенән тигеҙ алыҫлыҡта өс түңәрәк һырланған. Ҡапҡастың уртаһына эшләнгән биҙәк ҡатын-ҡыҙҙарҙың туй кейеме - еләнгә сигелгән мөһөр биҙәкте хәтерләткән.

Бөрйән районы Мәндәғол ауылы көрәгәһе. РЭМ фондынан. Рәссамы В.М. Шутова

Бөрйән ҡымыҙ көрәгәләрендәге орнамент. РЭМ фондынан

Светлана ШИТОВА.
"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.

ХӘТЕРЛӘП...

22 июндә булып үткән Хәтер һәм ҡайғы көнөндә беҙ тағы ла уйыбыҙ менән бынан 81 йыл элекке йәйге йәкшәмбе иртәһенә, Рәсәй тарихындағы иң ҙур ҡан ҡойошло Бөйөк Ватан һуғышы башланған көнгә әйләнеп ҡайттыҡ. Был көн хаҡында беҙ күп һанлы фильмдарҙан һәм китаптарҙан, шаһиттар иҫтәлектәренән ишетеп беләбеҙ. Тарихи хәтер үҙенсәлеге шунда: йылдар үтеү менән ысынбарлыҡ сиктәре юйыла төшә, ә инде ваҡиғаларҙың бөтөн нескәлектәрен һаҡлап ҡалыу - тарихсыларҙың бурысы. БР Йәмғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары, БДУ-ның Рәсәй тарихы, тарихи яҙмалар һәм сығанаҡтар менән эшләү кафедраһы мөдире Рәмил РӘХИМОВ һуғыштың тәүге көндәре күренештәрен тергеҙергә ярҙам итте.

һУҒЫШ БАШЛАНҒАН КӨН

Һүрәттәрҙә - Хәрби музей экспозицияларынан.

➔ **Рәмил Насибулла улы, 1941 йылдың 22 июне, тигәндә, урамдарҙа ҙур борсолоу менән Германияның СССР-ға баҫып инеүе хаҡында радионан иғлан ителеүсе хәбәрҙе тыңлаусы төркөм-төркөм өймәкләшкән кешеләр күҙ алдына баҫа. Ысынлап та шулай булғанмы?**

- Ысынлап та, йыш ҡына шундай күренештәр һүрәтләнә, асылда иһә, хәл бер аҙ башҡасараҡ була. Башҡортостан ҡалаларының радио нөктәләре булған вокзалдарында һуғыш башланыуын 22 июндә СССР-ҙың сит ил эштәре наркомы Вячеслав Молотов сығышынан төш мәлендә генә ишетәләр. Ауыл ерҙәрендә, хатта радио булған урындарҙа ла был хәбәрҙе ишетмәй ҡалалар - баҫыуҙа эштә булалар, шуға күрә һуғыш башланыуын улар кискә табан йә иртәгәһенә генә беләләр.

➔ **Беҙ СССР һуғышҡа әҙер булмаған, дошман кинәт һөжүм иткән, тип уйларға ғәҙәтләнгәнбеҙ, был дөрөҫмө?**

- Ул ваҡытта планлы рәүештә ойоштороlған эвакуация СССР-ҙың һуғыш башланыу ихтималлығына әҙерләнеүе файҙаһына һөйләй. Башҡортостанға, мәҫәлән, тәүге эшелондарҙың 27 июнгә килеп етеүе билдәле. Нефть һәм машина эшләү заводтарын шундай уҡ етештереү тармаҡтары булған төбәктәргә күсереү тиҙләтелгән. Тимәк, әҙерлек алып барылған. Был турала шундай мәғлүмәт тә асыҡ һөйләй: СССР-ҙа мәктәптәр, кәрәк була ҡалһа, госпиталь итеп файҙаланыу мөмкинлеге биргән махсус типовой проект буйынса төҙөлгән. Бындай биналарҙы 1930 йылдарҙа уҡ әле Өфөнөң төньяҡ сәнәғәт зонаһы - буласаҡ Черниковкала ла төҙөгәндәр. Уҡыу кластарын палата инеп файҙаланыу мөмкин булһа, һыу һәм электр үткәргестәр тиҙ арала операция бүлексәһенә күсереп булырлыҡ итеп ҡоролған. Бындай биналарҙа махсус сығыу урындары, бомбанан йәшеренеү урыны, дизель-генераторҙар өсөн бүлмә эшләнгән, былар мәктәп-госпиталдәрҙең автоном эшләй аласағын тәьмин итерлек булған. Уларҙың ҡайһылары Өфөлә әлегә тиклем һаҡланып ҡалған, мәҫәлән, Менделеев урамындағы 19-сы, Пушкин урамындағы 45-се һәм Черниковкалағы ҡайһы бер мәктәптәр.

Советтар Союзының һуғышҡа әҙерләнеүе хаҡында тағы бер дәлил: БАССР-ҙа 1941 йылдың 15 майында 45 көнлөк хәрби сборҙар башланған һәм шул саҡ Өфөлә һәм уға яҡындағы ауылдарҙа урынлашҡан 186-сы, шулай уҡ Стәрлетамаҡ менән Дәүләкәндә 170-се ике дивизия тупланған. Был сборҙарға элек хәрби хеҙмәт үтмәгән 18-ҙән 21 йәшкә тиклемге егеттәр саҡырылған. Күпселеге - ауылдыҡылар. Ошо дивизиялар Көнбайыш хәрби округына хәрби күнекмәләргә сығып китергә тейеш булған. 186-сы дивизия июнь баштарында юлға сыға. Һуғыш хәбәрен улар Псков өлкәһе Себеж районындағы иҫке ил сигендә ишетәләр. 170-се дивизия Стәрлетамаҡтан 22 июндә сыға һәм юлда күнекмәләр үтә. Был ике дивизия ла генерал-лейтенант Филипп Ершаков етәкселегендәге 22-се армия составына инә. Һалдаттарҙың күпселеге дары еҫен еҫкәп тә ҡарамаған тәжрибәһеҙ булһа ла, июль айы буйына һәм август баштарына тиклем батырҙарса һуғышып, фашистарҙың тиҙ генә еңеүгә иҫәп тотҡан ниәттәрен емерә һәм Полоцк нығытмаһы районында дошман хәрәкәтен тотҡарлай. Ике дивизия ла ҙур юғалтыуҙар менән ҡамауҙан сыға.

➔ **Һуғыштың тәүге көнөндә үк кешеләрҙең военкоматтарға килеп, үҙ теләктәре менән фронтҡа яҙылыуҙары ысын булғанмы икән?**

- Беренсенән, 22-һе ял көнө булған, военкоматтар эшләмәгән, унда дежур төркөм генә булған. Тәү сиратта военкоматҡа офицерҙар саҡырылған, башҡаларға повесткаларҙы 23 июндә генә ебәрә башлағандар. Шунан һуң мобилизация башланған. Үҙ теләктәре менән китеүселәр ҙә булған, әлбиттә, ләкин тәүҙә фронтҡа повестка буйынса оҙатылғандар.

➔ **Һуғыштың оҙаҡҡа һуҙыласағын аңлау ҡасан билдәле була?**

- Беҙгә килеп еткән иҫтәлектәр һәм документтар буйынса күптәр еңеүҙең аҙ юғалтыуҙар менән тиҙ арала яуланыуына ышана. Һуғыш башланған осорҙа совет халҡы дошмандың көсөн, нацизмдың ни икәнен күҙ алдына ла килтермәй, улар һалдат шинеле кейгән немец эшселәре һәм крәҫтиәндәре тип уйлай һәм уларҙың беҙҙең яҡҡа сығырына ышана. Шуға ла күптәр һуғыш бөтөп ҡуймаҫ элек, тип, фронтҡа китергә ашыға, хатта ирҙәре, туғандары артынан ҡатын-ҡыҙҙар ҙа үҙ теләктәре менән һуғышҡа барырға яҙыла. Бындай мөнәсәбәт 3 июлгә тиклем дауам итә, ләкин шул көндө радионан фронттағы ауыр хәлдәр, фашистарҙың Минскиҙы алыуы, башҡа йүнәлештәрҙә лә ҡан ҡойғос үлемесле һуғыш барыуы хаҡында Сталин сығышын тыңлағандан һуң ғына был һуғыштың оҙаҡ, ауыр һәм ҡан ҡойғос буласағын аңлау килә.

ШУЛАЙ ИТЕП, БЕЛЕШМӘ:

Башҡортостандан Бөйөк Ватан һуғышы фронттарына 710 мең кеше китеп, шуларҙың яҡынса 322 меңе һәләк була. Күрһәткән тиңһеҙ ҡаһарманлыҡтары өсөн 278 яугирға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә, 35 һалдат Дан орденының тулы кавалеры була. Республика эвакуацияланған 278 мең кешене, 63 эвакогоспиталь һәм унда дауаланыусы 250 мең яралыны ҡабул итә. Республикабыҙҙа 200-ләп етештереү ҡеүәттәре, мәғариф, фән, мәҙәниәт учреждениелары урынлаштырыла. Һәр өсөнсө совет танкы һәм самолеттары Башҡортостан яғыулығы менән йөрөй. БАССР-ҙың 416 мең кешеһе "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн" миҙалы менән наградлана, 20-нән ашыу кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә.

Роман ЯКИМЧУК
әңгәмә ҡорҙо.

✓ ***Тарихи Башҡортостан территорияһында йәшәгән 2 миллиондан ашыу кеше аслыҡтан интегә, рәсми документтарҙа 650 меңдән ашыу кешенең аслыҡтан ҡырылыуы теркәлә.***

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

ОЛО БАШҠОРТОСТАНҒА - 100 ЙЫЛ

1921 йылдың февралендә башланған ҡот осҡос аслыҡ башҡорт халҡының иң аяныслы фажиғәһе менән тамамлана: Тарихи Башҡортостан территорияһында йәшәгән 2 миллиондан ашыу кеше аслыҡтан интегә, рәсми документтарҙа 650 меңдән ашыу кешенең аслыҡтан ҡырылыуы теркәлә. Башҡа мәғлүмәттәргә ҡарағанда, башҡорт халҡының дөйөм һаны ике тапҡырға тиерлек ҡыҫҡара.

Ошо ваҡытта Башҡортостан етәкселеге, Үҙәк властан ярҙам һорап ҡына ҡалмайынса, киләсәктә республиканың ышаныслы аҙыҡ-түлек ресурстары базаһы булаҫаҡ территорияны - Өфө губернаһына ҡараған боронғо башҡорт ерҙәрен Автономиялы Башҡорт республикаһы составына индереү мәсьәләһе буйынса ныҡышмалы эш алып бара. Оло Башҡортостан мәсьәләһе буйынса тейешле материалдар әҙерләү өсөн Совнарком рәйесе М.Д. Халиҡов етәкселегендә махсус комиссия булдырыла. 1921 йылдың мартында Башҡ ЦИК исеменән Бөтөн Рәсәй башҡарма комитетына ебәрелгән телеграммала ошондай фекер белдерелә: "Образование Большой Башкирии в корне изменяет все административные и экономические условия Башреспублики, которая получит свыше миллиона башкир, в настоящее время оторванных от нее, крупный культурно-административный центр - Уфу, большую железнодорожную и водную базу, довольно цельную в промышленно-экономическом отношении территорию, позволяющую планомерно развивать органическую работу Башреспублики и скоро изжить экономическую разруху".

Башҡортостан хөкүмәте рәйесе Муллаян Халиҡов, Өфө губернаһы өйәҙҙәрен Кесе Башҡортостан составына ҡушыуҙы нигеҙләп, ошолай тип белдерә: "В Малой Башкирии было 400 тысяч башкир и 200 тысяч татар, а в то время как в Уфимской губернии было 800 тысяч башкир и более 200 тысяч татар и, кроме того, по своему экономическому положению Малая Башкирия область потребляющая, а Уфимская губерния производящая, и поэтому Уфимская губерния для Малой Башкирии была необходима".

Хәҙерге ваҡытта ҡайһы бер замандаштарыбыҙ, хатта ки ғилми исем йөрөткән "тарих белгестәре", йәнәһе, Өфө губернаһында башҡорттарҙың һаны бик аҙ булғас, уны бөтөрөп, Кесе Башҡортостанға ҡушыу бары тик большевиктарҙың сәйәси бер аҙымы булған, тип кенә баһаларға маташа. Рәсәй империяһында 1897 йылда уҙғарылған халыҡ иҫәбен алыу материалдарында сағылдырылған мәғлүмәтте күрмәмеш тә белмәмеш улар. Ысынбарлыҡта Өфө губернаһында йәшәгән 2 196 642 кешенең 899 910-ы ирекле рәүештә туған телен башҡорт теле, тип яҙҙырта. Тимәк, Өфө губернаһы халҡының (уға Өфө, Бәләбәй, Бөрө, Златоуст, Стәрлетамаҡ һәм Минзәлә өйәҙҙәре инә) 40,9 проценты үҙен башҡорт халҡы вәкиле итеп күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта губернала туған телен татар теле, тип таныған кешеләрҙең дөйөм иҫәбе ни барыһы 184 817 була. Әлбиттә, ошо иҫәп алыу материалдарында мишәр телләләр айырым теркәлһә лә, улар барлығы 20 957 кеше генә булған. Тағы ла 40 меңгә яҡын типтәр халҡын иҫәпкә алған саҡта ла, башҡорттар Өфө губернаһындағы башҡа мосолман халыҡтарынан 3,6 тапҡырға күберәк була бит!

Автономиялы ССР Халыҡ Комиссарҙары рәйесе Муллаян Халиҡовтың һүҙҙәре хаҡ, ул заманына күрә мәғлүмәтле кеше булған. Күрәһең, Совет хөкүмәте, Кесе Башҡортостандың аяныслы иҡтисади хәлен, бында йәшәүсе халыҡтың аслыҡтан, ярлылыҡтан интегеүен, уның был төбәктә власть органдарына ҡарата көсәйә барған ризаһыҙлығы менән бер рәттән, Өфө губернаһындағы башҡорттар иҫәбен дә иғтибарға алған булырға тейеш. Совнарком рәйесе Владимир Ленин үҙе лә Өфө губернаһы башҡорттарының мотлаҡ Башҡортостан республикаһында йәшәргә теләүе менән ризалаша. Нисек кенә булмаһын, 1922 йылдың 14 июнендә Бөтөн Рәсәй үҙәк башҡарма комитеты (ВЦИК) "Автономиялы Башҡорт Социалистик Совет Республикаһы сиктәрен киңәйтеү тураһында" тип аталған декрет ҡабул итә. Өфө губернаһы бөтөрөлә, Өфө, Бөрө, Бәләбәй өйәҙҙәре, Златоуст өйәҙенең байтаҡ өлөшө Кесе Башҡортостан составына ҡушыла. Силәбе губернаһына ҡараған Мейәс, Турғаяҡ, Сыростан олоҫтары, Мейәс ҡалаһы, Магнит тауы янындағы һәм Ҡыҙыл йылғаһы буйындағы Таш Йырынтылар, тип аталған ерҙәр шулай уҡ Оло Башҡортостан ҡарамағына бирелә. Өфө ҡалаһы Башҡортостан республикаһының баш ҡалаһы статусын ала. Шул уҡ декретҡа ярашлы, Златоуст өйәҙенең элек тә Кесе Башҡортостанға индерелмәгән ерҙәренә ҡуша Ялан кантоны территорияһы (хәҙерге Ҡурған өлкәһенең Әлмән һәм Сафакүл райондары), Башҡортостандан алынып, Силәбе губернаһына ҡушыла. 1922 йылдың аҙағына, административ үҙгәрештәрҙән һуң, Башҡорт Совет республикаһының территорияһы барлығы 8 кантонға бүленә: Арғаяш, Бәләбәй, Бөрө, Йылайыр, Мәсәғүт, Стәрлетамаҡ, Тамъян-Ҡатай һәм Өфө кантондары.

Әммә Оло Башҡортостандың географик сиктәрен билдәләү ҡатмарлы шарттарҙа ғәмәлгә ашырыла. Пермь, Екатеринбург, Төмән һәм Силәбе губерналары ингән Урал иҡтисади өлкәһе органдары ошо зонаның тау-завод сәнәғәте предприятиелары ерлегендә Златоуст сәнәғәт округын булдырыу планын алға һөрә. Урал иҡтисади советы 1922 йылдың яҙында уҡ Силәбе губернаһына Златоуст өйәҙен, Өфө өйәҙенең тау-завод зонаһын (Аша - Балашев, Сим һ.б.) һәм Башҡорт республикаһының Тамъян-Ҡатай кантонының төньяҡ өлөшөн (Белорет ҡалаһы менән) Силәбе губернаһына ҡушыу хаҡындағы проектты Бөтөн Рәсәй үҙәк башҡарма комитетының административ комиссияһы ҡарамағына йүнәлтә. 1922 йылдың 17 августында ВЦИК, ошо тәҡдимде хуплап, декрет ҡабул итә. Шулай итеп, Башҡорт республикаһы иҡтисади яҡтан үтә мөһим роль уйнаған металлургия һәм метиз заводтарынан мәхрүм ителә.

Әммә Мәскәү властары был мәсьәләне хәл иткәндә милли моментты иҫәпкә алмай. Башҡорт республикаһының Үҙәк башҡарма комитетының Президиумы 23 августағы ултырышында федераль власть органының ҡарары менән килешә алмау хаҡында белдереү яһай, шуға ярашлы үҙ ҡарарын ҡабул итә. Ул быны Оло Башҡортостан буйынса 1922 йылдың 14 июнендә ҡабул ителгән декрет положениеларын боҙоу, тип белдерә. Башҡортостандың башҡарма власы ҡарары РКП (б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты яғынан да хуплау таба.

Ялан кантоны башҡорттары араһында ла ҙур ризаһыҙлыҡ тыуа, улар Башҡортостан составында ҡалырға теләй. Әммә Үҙәк власть был хәлгә лә күҙ йомоп ҡарай. Оҙайлы бәхәстәрҙән һуң ВЦИК Президиумы Тамъян-Ҡатай кантонын Башҡорт республикаһы составында ҡалдырыу менән ризалаша.

1924 йылда Туҡ-Соран кантоны ла Ырымбур губернаһы составына ҡушыла. Башҡортостандан ситтә бары бер генә милли анклав - Арғаяш кантоны ҡалдырыла, әммә уныһы ла 1934 йылда Силәбе өлкәһенә ҡушыла. Шулай итеп, Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Рәсәй составындағы географик сиктәре хәҙерге ваҡытҡа тиклем һаҡланып килгән формаһын ала.

Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.
(Аҙағы. Башы 23-24-се һандарҙа).

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77

ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

1943 йылдың июль айында Курск дуғаһында Икенсе Бөтөн донъя һуғышының иң ҡан ҡойошло, дәһшәтле алыштарының береһе башлана. Немец-фашист командованиеһы, Ҡыҙыл Армияның Үҙәк һәм Воронеж фронттары ғәскәрҙәрен ҡамап алып, юҡ итергә план ҡора. Әммә дошман планы тормошҡа ашмай, киреһенсә, беҙҙең яугирҙарыбыҙ бөтөн фронт буйынса контрһөжүмгә күсә. Курск янында ай ярым буйына барған бәрелештәрҙә немец ғәскәрҙәре еңелеүгә дусар ителә.

1943 йылдың августында Ҡыҙыл Армияның Үҙәк, Воронеж, Дала, Көньяҡ-Көнбайыш һәм Көньяҡ фронттары башлаған стратегик һөжүмдең төп маҡсаты - Украинаның Днепрҙан һул яҡта ятҡан ерҙәрен, Донбасты дошмандан азат итеү һәм Днепрҙы аша сығыу була. Ошоға тиклем Воронеж өлкәһендә өр-яңынан комплектациялау киҫергән 7-се гв. корпусы (уның составындағы 112-се Башҡорт атлы дивизияһы нигеҙендә хасил булған 16-сы гв. атлы дивизияһы ла) 15 сентябрҙә Үҙәк фронттың генерал-лейтенант П.А. Белов етәкселегендәге 61-се армияһының оперативҡарамағына бирелә. Үҙәк фронттың һул ҡанаты ғәскәрҙәре Чернигов йүнәлешендә һөжүм итеп, 150 - 180 саҡрымлап алға үтеп, Десна йылғаһына сыға. 7-се гв. корпусына, башҡа частар менән бергә дошманды эҙәрлекләп барып, төньяҡ-көнбайыштан Чернигов төркөмө ғәскәрҙәренең сигенеү юлын киҫергә бойорола.

Украинаның Чернигов ҡалаһы өс йылға арауығында урынлашҡан: көнсығыштан - Десна, төньяҡ-көнбайыштан - Снов, көнбайыштан - Днепр йылғаһы. Был ҡала дошман тарафынан бик көслө нығытылған хәрби үҙәккә әйләндерелгән була. Немец командованиеһы тап ошонда, Үҙәк фронт һөжүмен тотҡарлап, беҙҙең ғәскәрҙәрҙе артабан Днепрға табан үткәрмәҫтәренә ныҡ инанған була.

Беҙҙең атлыларҙан алда 61-се армияның 76-сы һәм 77-се уҡсы дивизиялары хәрәкәт итә, әммә улар немецтарҙың тиҙ сигенеүсе механизацияланған частарын тейешле кимәлдә эҙәрлекләп бара алмай. Атлы частарға, уҡсыларҙың алдына сығып, Черниговҡа яҡын уңайлы бейеклектәрҙә дошманға нығынырға ирек бирмәү бурысы ҡуйыла. 16 сентябрҙә армия частары, Десна йылғаһы аша сығып, плацдарм булдыра. 7-се гв. корпусы, 19 сентябргә ҡаршы төндә Десна йылғаһын киҫеп сығып, иртә менән Зметнев, Березна һәм Чернигов йүнәлештәрендә дошманды эҙәрлекләп барырға тейеш була. Артабан уларға, Снов йылғаһы аша сығып, Седнев исемле торлаҡ пункты янында плацдарм алыу бурысы билдәләнә.

Корпустың беренсе эшелонында 16-сы (Башҡорт) һәм 14-се гв. атлы дивизиялары (командирҙары - гв. полковниктары Г. А. Белов һәм К. В. Фиксель), ә гв. генерал-майоры И. Т. Чаленконың 15-се гв. кавдивизияһы 2-се эшелонда бара. Дошман ашығыс рәүештә Снов йылғаһы аша сыға башлағас, корпус командиры, 17 сентябрҙә үк һөжүмгә күсеп, 18 сентябргә Снов йылғаһындағы һыу аша сығыу урындарын алырға, Чернигов ҡалаһына һөжүм итеп, уны дошмандан азат итергә бойора.

16-сы дивизияның авангардында гв. подполковнигы Таһир Кусимов полкы барһа, 14-се дивизияла алдынғы отряд ролен гв. майоры Ф. Г. Нелидовтың 52-се кавполкы үтәй. Кусимов атлылары, Десна йылғаһы аша киҫеп сығып, алға хәрәкәт итә. Иң алдан барған өлкән лейтенант М. М. Гранитов эскадроны һаҡ-разведка бурыстарын да башҡара. 18 сентябрь таңында эскадрон Десна йылғаһының уң ҡушылдығы - Уборть йылғаһы ярына килеп етә. Йылғаның икенсе ярында дошман һалдаттары барлығы беленә. Тиҙ арала киҫеү табып, өлкән сержант П. И. Меньшиков йылға аръяғындағы дошманға тылдан атакаға ташлана. Бер нисә минут үтеүгә немецтарҙың 20-ләп һалдаты юҡ ителә, өсөүһе әсиргә алына. Артабан М. Гранитов эскадроны Сосница исемле ҙур ауылдан дошманды ҡыуалап сығарып, Бабы ауылы йүнәлешендә һөжүм итеүен дауам итә. Бында немецтарҙың пехота полкы штабы тар-мар ителә, байтаҡ ҡына дошман һалдаты әсиргә төшә. Бабы ауылындағы алышта (был ауыл хәҙер Жовтнево, тип атала) эскадрон командиры М. М. Гранитов батырҙарса һәләк була.

Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.
(Дауамы бар).

✓ *Беҙ артта ҡалған йә бөтөнләй булмаған юғары технологик тармаҡтарҙы үҫтерергә мөмкинлек алабыҙ, ул ғына ла түгел - уларҙы үҫтерергә мәжбүр буласаҡбыҙ, шул иҫәптән ауыл хужалығы тармағына ла яңыса ҡараш артасаҡ.*

Бөгөн Рәсәй еңел булмаған осор кисерә, өҫтәүенә, ян-яҡтан ағылған мәғлүмәттең ҡапыл ғына ҡайһыһы дөрөҫ, ҡайһыһы ялған икәнлеген айырыуы ла еңел түгел. Ошо ваҡытта тап белгестәргә мөрәжәғәт итеү урынлы ла инде, сөнки улар үҙ өлкәһе буйынса күпте белә, һандар араһында ла албырғап ҡалмай, ябай күҙгә күренмәгән мәғлүмәттә лә уҡый ала. Ошо ауыр шарттарҙа Рәсәй һәм Башҡортостан иҡтисады нисек тын ала, ул ниндәй хәл-торошта икәнен фаразлап тормай, үҙебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙарыбыҙҙы иҡтисад фәндәре докторы, БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Азат ЙӘНГИРОВҡа төбәнек.

Азат Вәзир улы, әңгәмәне шунан башлайыҡ - бөгөн Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың иҡтисади хәл-торошон нисек баһалайһығыҙ?

- Әлбиттә, бөгөн Рәсәй бик ауыр шарттарҙа үҫешә. Белеүебеҙсә, санкциялар ауыр йоғонто яһай, сикләүҙәр индерелә. Әммә шуны билдәләр инем: беҙ ошо шарттарға бик тиҙ яраҡлашып барабыҙ. Мәҫәлән, йылдың тәүге дүрт айын алып ҡараһаҡ, Рәсәй буйынса уртаса сәнәғәт етештереү индексы 104 процентҡа яҡын икәнен күрәбеҙ. Файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу - 124 процент, эшкәртеү индексы - 103,7. Был, минеңсә, бик һәйбәт күрһәткес. Шул уҡ ваҡытта ил Президенты пособиеларҙы, пенсияларҙы, йәшәү минимумын ун процентҡа күтәрергә ҡарар итте. Әлбиттә, бының өсөн бюджет бар һәм ул йыл башында профицитлы ине. Бында шуны әйтеп китергә кәрәк: бюджет ул йә дефицитлы була, йә профицитлы. Дефицитлы булһа, килем сығымдарҙы ҡапламай, ә инде профицитлы булһа, килем сығымдарҙы ҡаплап ҡыҫҡа ғына ҡалмай, ул артып ҡала. Йәғни Рәсәй бюджетының профициты һигеҙ йөҙ миллиардтан ашып китте. Был ил халҡының өҫтән бер өлөшөнөң күберәге, йәғни 54 миллион самаһы граждан ярҙам саралары менән ҡуллана аласағына бер дәлил һәм үҙе үк Рәсәйҙең Көнбайыштың санкцияларына уңышлы ҡаршы тора алыуы тураһында һөйләй һәм, әлбиттә, пенсияларҙың йыл башынан артыуын алып ҡараһаҡ, ул әлеге ваҡытҡа 19 процентҡа артты һәм был инфляция кимәленән артығыраҡ. Ил Президенты белдереүенсә, инфляция күләме 17,4 процент булды, майҙа уның тағы ла кәмеүе күҙәтелде.

Тағы шуны әйтер инем: 2020 йылдан башланған осор Рәсәй өсөн иҡтисади суверенитетты нығытыу мәле буласаҡ. Был беҙҙең өсөн бик мөһим, ул инфраструктураны һәм технологик базаны үҫтереүгә йоғонто яһаясаҡ. Шулай уҡ белгестәр әҙерләү кимәленең сифатын күтәреүҙе көтәбеҙ. Әммә иң мөһиме - бойондороҡһоҙ һәм һөҙөмтәле финанс системаһын булдыра аласаҡбыҙ, тип өмөтләнәбеҙ. Финанс системаһының бойондороҡһоҙлоғо күп кенә процестарға бәйле. Беренсенән, беҙ сит ил банктарынан суверенлы буласаҡбыҙ. Күп кенә финанс операциялары хәҙер үҙебеҙҙең банктар аша үтә һәм башҡарыла башланы ла инде.

Әлбиттә, ошо санкция шарттарында ниндәйҙер юғалтыуҙар булһа ла, Рәсәйҙең Азия илдәре менән сауҙа-иҡтисади бәйләнештәре артасаҡ һәм беҙ быны бөгөн үк күҙәтәбеҙ. 2010 йылдан алып Рәсәйҙең тышҡы сауҙа бәйләнешендә Азия илдәренең өлөшө 3 тапҡырға тиерлек артып, быйыл ул 30 проценттан ашып китте. Санкцияға эләккән Рәсәй компаниялары Азияла яңы сауҙа баҙары табырға тырыша. Йыл дауамында ике аралағы сауҙа әйләнешен 50 миллиард долларға арттырыу мөмкинлеге бар.

Ошо санкциялар арҡаһында импортты алыштырыу процестары шәбәйҙе тип әйтергә була. Мәҫәлән, республикала электр ҡорамалдары эшләү - яҡынса өс тапҡырға, өй йыһаздары һәм дарыуҙар етештереү бер ярым тапҡырға артҡан һәм былар барыһы ла импортты ватан етештереүсеһе продукцияһына алмаштырыу процестарының тиҙләнешен күрһәтә. Сәнәғәт етештереү индексы буйынса Башҡортостан күрһәткестәре Рәсәйҙекенән юғарыраҡ. Былтыр ул 107,5 процент булһа, йылдың тәүге дүрт айында иһә 105,7 процент тәшкил итә. Тағы ла матур ҡаҙаныштарҙан Башҡортостандың хәҙер инде икенсе тапҡыр инвестиция климаты торошоноң милли рейтингы буйынса биш алдынғы төбәк рәтенә инеүен билдәләр инем. Быға "Алға" тип аталған айырым иҡтисади зона барлыҡҡа килеүе булышлыҡ итте. Унда күп кенә предприятиелар инә башланы. Уҙышлы социаль-иҡтисади үҫеш территорияларе (ТОСЭР) уңышлы эшләп килә һәм резиденттар һаны күренеп үҫә. Ошо биләмәләр арҡаһында республикала ике меңдән ашыу эш урыны булдырылды. Йәғни Башҡортостан ошо ауыр шарттарға ҡарамайынса, бик һөҙөмтәле үҫеш күрһәтә, һынауҙар уны һындырмай, киреһенсә, сыныҡтыра ғына.

Әлеге ваҡытта Рәсәй донъяла иң күп санкциялар иғлан ителгән ил, әммә шул уҡ ваҡытта ул оҙаҡ йылдар санкциялар ҡыҫымы аҫтында йәшәй һәм алға барыуын дауам итә. Санкциялар ил өсөн ниндәй йоғонто һәм эҙемтәгә эйә, ул ниндәй тармаҡтарҙы нығытып, ниндәйҙәренең үҫешен бер аҙ тотҡарларға мөмкин?

- Беренсенән, сит ил тауарҙарын ватан етештереүсеһенекенә алмаштырыу халыҡ араһынан яңы етештереүселәр барлыҡҡа килеүенә этәргес буласаҡ, яңы эш урындары барлыҡҡа киләсәк, халыҡҡа аҡса эшләү мөмкинлеге тыуасаҡ. Һәм бик мөһим күренеш - Рәсәйҙә капиталдың сит илгә китеү проблемаһы бар ине, хәҙер ул ярайһы уҡ кәмейәсәк.

Икенсенән, Рәсәй газы өсөн түләүҙе һумға күсереү - бик кәрәкле һәм мөһим аҙым. Иҡтисадта был процесс дедолларизация тип атала, йәғни ил валютаһы нығына һәм беҙ әле шул күренешкә шаһит.

Минеңсә, ошо санкцияларҙың ауыл хужалығына йоғонтоһо ыңғай буласаҡ, ауыл хужалығы продукцияһына һорау тыуасаҡ, был инде өлкә хеҙмәткәрҙәренә яңы техника, ҡорамалдар, мал һатып алырға яңы мөмкинлектәр бирә. Урындағы етештереүселәргә иғтибар арты-

уы үҙ сиратында уларҙың продукцияһының үҙкиммәтенә лә йоғонто яһаясаҡ. Дөйөм әйткәндә, беҙ артта ҡалған йә бөтөнләй булмаған юғары технологик йүнәлештәрҙе һәм тармаҡтарҙы үҫтерергә мөмкинлек алабыҙ, ул ғына ла түгел - уларҙы үҫтерергә мәжбүр буласаҡбыҙ, шул иҫәптән ауыл хужалығы тармағына ла яңыса ҡараш артасаҡ.

Әммә санкцияларҙың кире яғы ла бар: әлбиттә, ул ниндәйҙер тармаҡты бөтөнләй эшләүҙән, йәшәүҙән туҡтата алмай, шулай ҙа ниндәйҙер тотҡарлыҡ яһауы мөмкин. Мәҫәлән, юғары технология менән эшләнгән машиналар, компьютерҙар. Уларҙың күп өлөшө, запас частары сит илдән индерелә ине. Уларҙы етештереүҙе үҙебеҙҙә башлап ебәреү өсөн 5-10 йыллап ваҡыт талап ителә. Икенсе яҡтан ҡарағанда, Рәсәйҙә аҡыллы кешеләр етерлек, бары тик уларға иғтибар бирергә, уларҙы үҫтерергә кәрәк. Шул саҡта, бәлки, биш йылға ла тотҡарланмабыҙ. Уйлап ҡараһаң, тормошобоҙҙа ниндәйҙер сәйер күренештәр ҙә бар ине. Мәҫәлән, өй йыһаздарының ябай ғына механизмдарын сит илдән һатып алдыҡ. Ә бит уларҙы бер ниндәй ауырлыҡһыҙ үҙебеҙҙә эшләп була. Баҙар иҡтисадына күскәс, күп нәмәләрҙе онотоуға дусар иттек, элекке совет осоронда төбәк менән төбәк араһындағы тығыҙ бәйләнеште юғалттыҡ. Бөгөн шул хеҙмәттәшлекте ҡабаттан тергеҙеү мөмкинлеге барлыҡҡа килде.

Ғәҙәттә, санкциялар инфляцияға килтерә, инфляция иһә эш хаҡының хаҡын, баһаһын төшөрә. Эш хаҡы тураһында һүҙ алып барғанда, ғәҙәттә, айлыҡ уртаса эш хаҡы буйынса күрһәткестәр килтерелә, ләкин медиан эш хаҡы тигән төшөнсә лә бар. Ғәзит уҡыусыларға ошо ике төшөнсәне аңлатып, бөгөн медиан эш хаҡының күләме күпме икәнен асыҡлап китегеҙ әле.

- Ысынлап та, эш хаҡына килгәндә, уны уртаса күрһәткес һәм медиан күрһәткес менән билдәләп була. Медиан эш хаҡын ҡараһаҡ, ул эш урындарының 50 проценты Рәсәйҙә уртаса статистик хеҙмәткәр алған эш хаҡы кимәленән күберәк, 50 проценты кәмерәк тигәнде аңлата һәм, әлбиттә, ул уртаса эш хаҡы күрһәткесенән бер ярым тапҡырға кәмерәк булып сыға. Мәҫәлән, уртаса эш хаҡын алһаҡ, ул Рәсәй буйынса яҡынса илле - илле бер мең һум икән, медиан эш хаҡы яҡынса 30 - 35 мең була.

Бик йыш, республикаға мигранттар килеүе һөҙөмтәһендә айырым секторҙарҙа эш хаҡының түбән булыуы тураһында һүҙҙәр ишетелә, йәғни улар түбән хаҡҡа ла эшләргә риза һәм шуның менән эш хаҡы кимәленә лә йоғонто яһай. Ошо хаҡта фекерегеҙҙе ишетергә ине...

- Миграция мәсьәләһе, әлбиттә, күп ҡырлы. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙән гастарбайтерҙар китә башланы, бында сикләүҙәрҙең дә йоғонтоһо бар. Ләкин был Рәсәй өсөн ыңғай күренеш түгел тиер инем. Ни өсөн? Мигранттарға кире яҡтан ғына ҡарарға ярамай, сөнки беҙҙең халыҡ, күреүебеҙсә, түбән эш хаҡына ауыр хеҙмәт талап ителгән эш урындарын тултырырға әҙер түгел. Уларҙа гастарбайтерҙар эшләй, эшсе ҡулдарға ихтыяжды ҡаплай. Әммә мәсьәләгә дөйөм ҡараһаҡ, хеҙмәт баҙарында уларҙың өлөшө ни бары 12-15 процент ҡына. Был ҙур күрһәткес түгел, ләкин ил өсөн дә, төбәктәр өсөн дә был фактор кәрәк, сөнки иҡтисади йәһәттән ошо ситтән килеүселәр оҫоҙ хеҙмәттәре менән беҙҙең ойошмаларыбыҙҙың, предприятиеларыбыҙҙың сығымдарын кәметә, тимәк, уларҙың конкурентлыҡҡа һәләттәрен арттыра. Шул уҡ ваҡытта гастарбайтерҙар юғары квалификациялы һәм юғары түләүле эш урындарына дәғүә итмәй. Шуға улар урындағы юғары белемле белгестәрҙең эш хаҡына бер ниндәй ҙә йоғонто яһамай, әммә, икенсе яҡтан, ошо хеҙмәт мигранттары тыуған яҡтарына күп кенә аҡса ебәрә. Капитал беҙҙең иҡтисад эсендә эшләмәй, ситкә китә һәм был һәйбәт күренеш түгел. Әлбиттә, бында тағы бер факторҙы әйтергә кәрәк: сит мәҙәниәтле мигранттар йәмғиәткә ыңғай йоғонто яһамай. Уларҙың интеграцияһы, урындағы халыҡ менән низағҡа кереүе, ҡаршылыҡ акцияларында ҡатнашыуы, үҙҙәренең компактлы йәшәү урындарын булдырыуы кеүек күренештәр бар.

Мигранттарҙың ойошма-предприятиеларҙың сығымын кәметеүе яҡшы, әммә улар шул урында эшләп йөрөгән урындағы халыҡтың эш хаҡы күләмен кәметә килеп сыға бит. Мәҫәлән, баш ҡалала урам таҙартырға кеше булманы һәм коммуналь хеҙмәт өлкәһендә эшләүселәрҙең эш хаҡын арттырырға тура килде. Әгәр түбән эш хаҡына риза булған гастарбайтерҙар, йәғни эшләргә кеше булмаһа, эш хаҡын яйлап күтәрергә мәжбүр буласаҡтар түгелме?

ҺЫНАУҘАР ҺЫНДЫРМАЙ, сыныҡтыра ғына

- Әлбиттә, бындай күренеште юҡ тип әйтеп булмай, әммә, минеңсә, бында дәүләттең иғтибары кәрәк. Мәҫәлән, ауыл хужалығында мигранттар бик юҡ, улар күберәген ҡала тирәһендә, төҙөлөштәрҙә мәшғүл. Улар булмаған урындарҙа урындағы халыҡҡа эшләү өсөн барлыҡ мөмкинлектәр бар. Тағы шуны ла билдәләп китергә кәрәк: мигранттар уртаса эш хаҡы һәм медиан эш хаҡына ла йоғонто яһай.

Мигранттарға ҡағылғас, тағы бер мөһим теманы күтәрмәй булмай - ошо көндәрҙә Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың яҡынса мәғлүмәттәре билдәле булды һәм ул республикала халыҡ һанының артыуын күрһәтә. Был динамикаға ниндәй процестар йоғонто яһаған, һеҙҙеңсә: мигранттар ағымымы, әллә тәбиғи тыуыммы?

- Халыҡ иҫәбен алыу - бик мөһим сара, сөнки төрлө йәштәге кешеләр иҫәбен дөрөҫ һәм аныҡ белһәк, алдағы йылдарҙа халыҡ һанының үҙгәреүен фаразлай алабыҙ: күпме кешенең социаль ярҙамға мотаж булыуын беләбеҙ, йәғни был сара халыҡтың билдәле төркөмдәрендә дәүләт ярҙамы сығымдарын иҫәпләү өсөн тура ысул булып тора, шулай уҡ нисә балалар баҡсаһы, мәктәп, нисә башҡа социаль учреждение кәрәклеген күҙаллайбыҙ. Ҡыҫҡаса әйткәндә, халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәһе бюджетты планлаштырғанда файҙаланыу өсөн мөһим ҡулланма булып тора. Уҙған халыҡ иҫәбен алыуҙың тәүге һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостанда халыҡ һанын һаҡлай алдыҡ, 2010 йыл менән сағыштырғанда, 0,5 процентҡа артҡанбыҙ ҙа. Был бик мөһим, сөнки ошондай күрһәткестәргә ни бары тик егерме һигеҙ төбәк кенә етә алған, ҡалғандарҙа халыҡ һаны кәмегән. Әлбиттә, был Башҡортостан өсөн ҙур ҡаҙаныш, тип әйтергә була. Быға өлгәшеүгә ниндәй факторҙар йоғонто яһаған, тигәндә, тәү сиратта, миграция, сөнки Башҡортостанда һәм башҡа бик күп төбәктәрҙә тыуым кәмей, халыҡ һанының бары тик Кавказ төбәктәрендә генә артыуы күҙәтелә. Шуға, миграция мөһим фактор булып тора.

Белеүебеҙсә, бик оҙаҡ йылдар дауамында Башҡортостандан йыл һайын 7-9 мең кеше ситкә китә ине. Власҡа яңы команда килгәс, күрһәткестәр, йәғни миграция йүнәлеше үҙгәрҙе, хәҙер Башҡортостанға киләләр һәм улар - йәштәр, студенттар эшкә яраҡлы категория. Минеңсә, был күренеш тап Башҡортостандың иҡтисади ҡеүәте артыуы һөҙөмтәһендә мөмкин булды. Әйтеп китеүемсә, инвестиция буйынса ла, рейтингтар буйынса ла күҙгә күренеп күтәреләбеҙ, ә уҙышлы социаль-иҡтисади территориялар бик матур уңышлы эшләй башланы, халыҡ-ара фән үҙәге барлыҡҡа килтерелә, уҡыу ойошмалары бик күп гранттар яулай, федерациянан ҙур финанс ресустарын ала башланыҡ - ошолар барыһы ла беҙгә йәштәрҙе ылыҡтыра. Ауыр шарттар - тажҙәхмәт, санкциялар күп кенә төбәктәрҙең күрһәткестәре түбәнәйеүгә сәбәп булһа, киреһенсә, Башҡортостандың тотороҡло үҫешен күрһәтте.

Республика өсөн халыҡ һанын һаҡлап ҡалыу һәм арттырыуҙың мөһимлеге тағы шунда - был Рәсәй Федерацияһы яғынан бюджет ресурстарын күберәк йәлеп итә алабыҙ, тигәнде аңлата, сөнки төбәктәргә бүленгән ресурстар йән башына иҫәпләнә. Беҙ былай ҙа федераль керемдәрҙе бик нығ арттырҙыҡ. Мәҫәлән, быға тиклем бер нисә йыл элек ни бары тик 30-35 миллиард һум килтерһәк, хәҙер ошо күләмде 80-90 миллиард һумға еткерә алдыҡ һәм халыҡтың һанын һаҡлап ҡалыу арҡаһында керемдәрҙе тағы ла нығыраҡ арттырасаҡбыҙ тип өмөтләнә алабыҙ.

Бөгөн иҡтисад үҫешен инвестицияларға бәйләйҙәр, ҡайҙандыр ситтән "ҡалын" кеҫәле ойошма-предприятиелар килеп, республикала ниндәйҙер тармаҡты үҫтереүгә аҡса һалып, республика халҡына эш урындары булдыра, килем алып, һалым түләй һ.б. Һуңғы ваҡытта инвесторҙарҙы ылыҡтырыу өсөн талаптар ҙа йомшартылды. Ә бына уларҙың эшмәкәрлеген тикшергән ҡануниәт камилмы, йәғни улар, мәҫәлән, ерҙе ҡуртымға алып, һуңынан уны артабан ҡулланырлыҡ итеп ҡалдырамы, әллә елеген һурып ташлап китәме? Инвестиция йәлеп итеүҙең ыңғай яҡтары билдәле, ниндәй кире яҡтары бар?

- Ысынлап та, иҡтисадтың мөһим күрһәткестәренең береһе булып инвестициялар тора. Был йәһәттән Башҡортостандың ҡаҙаныштары бар, тажҙәхмәткә ҡарамайынса, республикаға һалынған инвестиция күләме арты. Мәҫәлән, 2021 йылды алһаҡ, был сумма дүрт йөҙ миллиард һумды үтеп китте. Быға тиклем ни бары 250-260 миллиард һум араһында йөрөй инек. Әлбиттә, быныңсәбәптәре республикала даими рәүештә сәнәғәт, инвестиция сәғәттәре үткәрелә башлауы, бизнес-шериф институттары барлыҡҡа килеүе һәм ошо йүнәлештә берҙәм эш алып барыуға бәйле. Ошондай темптарҙы һаҡлағанда, киләсәктә инвестициялар күләме тағы ла артасаҡ тип көтөлә.

Сер түгел, файҙалы ҡаҙылмалар өлкәһенә инвесторҙар йәлеп иткәндә әлегә тиклем тәртип, ныҡлы тикшереү булманы: конкурстар үтеп торҙо, лицензиялар бирелде, техника урынға барып эш башлай ине, ә халыҡ нимә эшләгәндәрен, нимә сығарғандарын, ҡайҙа алып киткәндәрен белмәне. Һәм ошо "инвесторҙар" участкаларҙы оятһыҙ рәүештә файҙаланып, килем ала, бары тик табышҡа ғына йүнәлтелгән эш алып бара ине. Хәҙер был тармаҡта, минеңсә, күп кенә үҙгәрештәр бар һәм ул тәү сиратта лицензия биреү процестарын тәртипкә һалыуҙан башланды: махсус комиссия барлыҡҡа килде. Ошо әйтеп киткән "инвесторҙар" дөйөм инвестиция күләмендә ҙур өлөш алып тормай, ҙур өлөш Өфөгә, Салауатҡа һәм Стәрлетамаҡҡа, йәғни сәнәғәт ҡалаларына тура килә. Ауыл хужалығы менән шөғөлләнгән зоналарҙа ундай инвестициялар юҡ. Әммә киләсәктә инвесторҙарҙың эшмәкәрлеген контролләү алып барылһа, улар үҙҙәре эшмәкәрлек алып барған ауыл хакимиәте бюджетына ла, район бюджетына ла ниндәйҙер өлөш индерә, шулай уҡ социаль инфраструктураны үҫтереүҙә ҡатнаша башлар, моғайын.

Башҡортостан борон-боронданер аҫты байлыҡтары менән дан тота, шуға ҡарамаҫтан, мәҫәлән, Татарстан менән сағыштырғанда файҙа беҙҙең иҫәпкә түгел. Быныңсәбәптәрен нимәлә күрәһегеҙ?

- Республикалағы иң ҙур предприятиелар: "Башнефть", "Башҡортостан сода компанияһы" Башҡортостан идаралығына ҡарамай ине һәм уларҙың бөтә табыштары ситкә китеп торҙо. "Башнефть"тең 25 процент акциялары, "БСК"-ның 38,3 процент акциялары Башҡортостан милкенә кире ҡайтарылыуы, һуңынан 10,7+1 акция кире бирелеүе мөһим һынылыш булды. Йәғни улар республика контроленә ҡайтарылды һәм уларҙың саф килеме дөрөҫ бүленә башланы, республика уны контролдә тотоу хоҡуғын алды һәм уның үҫеше менән идара итә. Әле мин быны беренсе аҙым ғына тип ҡарайым һәм киләсәктә республика мөһим предприятиеларҙы үҙ милкенә ҡайтарыу буйынса эш алып барыр, тырышыр тип көтәм. Контроль булмағанда ҙур сәнәғәт предприятиеларының ҡалдыҡтары тәбиғәткә ҙур зыян килтерә ине, бөгөн уларҙың килеменең бер өлөшө экология проблемаларын хәл итеүгә йүнәлтелә һәм был ғәмәл контролдә тотола.

Татарстан менән сағыштырғанда Башҡортостан арттараҡ бара тип әйтмәҫ инем, сөнки хәҙер беҙ күршеләрҙе ҡайһы бер позициялар, мәҫәлән, инвестиция йәлеп итеү буйынса, ҡыуып етеп барабыҙ. Ә бына мәғариф, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә хатта уҙып киттек тиер инем. Әлбиттә, үҫеш араһында айырма бар, сөнки Татнефть, башҡа күп кенә ойошмалар Татарстан милкенән сығарылманы һәм уларҙың бөтә килеме республика эсендә ҡалды, улар барыһа ла нығ алға китеү, үҫеш өсөн этәргес булып торҙо. Беҙ хәҙер ошо факторҙарҙы республика мәнфәғәтендә файҙалана башланыҡ. Тағы шуны әйтергә кәрәк: республика Башлығы Радий Хәбиров Татарстан иҡтисады менән яҡынлашыу аҙымдарын яһай һәм интеграция процестары булдырыла. Күп кенә йүнәлештәр буйынса Татарстан менән бергәләп үҫешә алабыҙ һәм, әлбиттә, ошо ҡеүәтте ҡулланырға тейешбеҙ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Төбәктәр көслө булһа, ил дә көслө - был быуаттар буйы раҫланған хәҡиҡәт. Ил иҡтисады ҡеүәтле һәм тотороҡло икән, тимәк, төбәктәрҙә лә үҫеш тотороҡло. Һынауҙар беҙҙе, ысынлап та, һындырырға тырышып, сыныҡтыра ғына. Шулай булған, шулай булды, шулай буласаҡ та. Тарих быға үҙе шаһит. Хаҡ тарих алдашмай, ул барыһын да үҙ урынына ултырта.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.

УЙЛЫҒА - УЙ

ҠЫЛҒАН ҒӘМӘЛДӘРЕҢ...

аңлайышлы булһын!

Гәзитебеҙҙең һәр һанының аҙағында "Аҡыл-ҡаҙна" тип аталған рубрикала фәһемле хикәйәттәр сығып тора. Бәғзеләре уйға һалырлыҡ, ҡайһы берҙә бәхәс ҡоторлоҡ фекерҙәр ҙә килеп сыҡҡылай. Тап ана шуның менән дә ҡыҙыҡлы инде был рубрика…

Сираттағы бер хикәйәтте ҡыҙыҡһынып, ҡабат-ҡабат уҡып сыҡтым. Әнүәр суфый тигән бер кешенең башҡаларға сәйер күренгән ҡылығы хаҡында ине ул. Мәжлестә һәр саҡ табындаштарын үҙенә яҡынлатмай, уларҙан айырым ултырып ашаған был кешенең ҡыланышы бүтәндәргә аңлашылып етмәй. Хатта ҡайһы берәүҙәр быға ризаһыҙлығын да белдерә, "тәкәббер" тип тә атайҙар уны. Ә инде уның һауытының бөтөнләйгә буш икәнен һәм уның тик ашап ултырған кеше булып ҡыланғанын күргән бер йәш суфый ҡыҙыҡһыныуын еңә алмай, был хаҡта һорау биргәс, әлеге Әнүәр ошолайыраҡ итеп яуап бирә: "...Кешене уның тышҡы билдәләренә генә ҡарап баһалауҙан да ҙурыраҡ гонаһ юҡ. Былай эшләү - тимәк, изге кешенең эске донъяһын мыҫҡыл итеү ул... Һай аҡыллылар һай нәмәгә ҡарап нығымта яһар..."

Эйе, уның был һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар. Әммә был хаҡлыҡты раҫлау өсөн тап ошондай Әнүәр суфыйҙыҡы һымаҡ ғәмәл кәрәк инеме икән? Шуға ла ошо хикәйәттең йөкмәткеһе менән танышҡас, мин дә башта тап әлеге Әнүәрҙең табындаштары һымаҡ фекер иттем. Нәҡ 3-4 йәшлек сабый бала "ашау уйыны" уйнаған һымаҡ ҡыланған бындай оло кешене үҙем күрһәм, уны "тәкәббер" тип атамаҫ инем атауға, әммә уның наулығының самалыраҡ булыуы хаҡында фекер йөрөтөр инем. Күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ: психик яҡтан камил булған һәр кем икенсе берәүҙең адекват булмаған ғәмәлен күрһә, нис шикһеҙ, уға сәйерһенеп ҡараясаҡ бит. Быға оҡшаш бихисап миҫал килтерергә була. Әйтәйек, берәү буш мөйөшкә ҡарап һөйләшә башланы икән, башҡалар мотлаҡ уға иғтибар итәсәк һәм аптыраясаҡ. Сөнки мөйөштә - бер кем дә юҡ! Ошондай кеше хаҡында башҡалар ни уйларға тейеш? Минеңсә, аҡылы камил булған кешенең ҡылған һәр ғәмәле ни менәндер аңлатылырға тейеш. Сөнки бындай сәйер нәмәләр башҡаларҙа ифрат нормаль һорауҙар тыуҙырасағы көн кеүек асыҡ.

Утыҙынсы йылдарҙа беҙҙең ауылдан бер мулла олатай төрмәгә барып эләккәс тә, намаҙ уҡыуын туҡтатмаған. Төрмә һаҡсылары уның был ҡылығына "Что делает этот сумасшедший?" тип ғәжәпләнгәс, кемдер берәү: "Он Богу молится", - тип әйткән. Һаҡсыларға барыһы ла аңлашылған һәм улар башҡаса һорау бирмәгән. Был миҫалда мулла олатайҙың намаҙ уҡыуы, ундағы һәр ҡыланышы (рөкүғ, сәждәләре) шәриғәт ҡануны менән дәлилләнә һәм аңлатыла. Ә әлеге Әнүәр исемле кешенең бүтәндәрҙән ситләшеп, буш науыттан ашап ҡыланғанын бер ни менән дә аңлатып булмай.

Бер нисә йыл элек аят уҡыу мәжлесенә барырға тура килде. Мулла итеп саҡырылған оло йәштәрҙәге берәү башҡаларҙан алдараҡ килгәйне. Беҙ өс-дүрт кеше өйгә бер аҙ ғына һуңыраҡ индек. Бер ағай "Әссәләмү ғәләйкүм" тип мулла ағайға ҡул һондо, әммә дин әһеле уның сәләмен дә алманы, ҡул да бирмәне: "Бар, төҙҙә ҡулыңды йыу", - тип ванна бүмәһенә күрһәтте. Икенсе ағайға ла: "Ҡулыңды йыуҙыңмы?" - тине лә, уның яуабын да көтөп тормай, әлегесә ымлап, үҙе эргәһенән ҡыуып ебәрҙе. Мин уның һорауын көтөп тормаҫтан: "Мин - тәһәрәтле. Әссәләмү ғәләйкүм!" - тип уға ҡулымды һондом. Миңә инде ҡулын биреүендә шигем дә юҡ ине, әммә бабай: "Ҡулыңды йыуҙыңмы?" - тип миңә лә һорау бирҙе. "Тәһәрәтле кешенең ҡулы йыуылған була инде ул", - тинем тыныс ҡына итеп. Ә ул: "Бар, йыу!" - тип, мине лә үҙенең янынан ҡыуҙы (был хәл коронавирус пандемияһынан күпкә алдараҡ булды). Ашар алдынан, әлбиттә, һәр кем ҡул йыуа инде ул. Әммә сәләм бирep күрешкәндә, кешенең ҡулы йыуылыу-йыуылмауын һорап, нормаль кешеләрҙе аптыратырға нис кенә лә ярамай, тимәксемен. Шәриғәттә быға дәлил юҡ. Ә бына мосолмандың биргән сәләмде алмауының насарлығы хаҡында риүәйәт бар. Ошо турала әлеге бабайға әйтергә баҙнат иттем, шулай ҙа. Был бабай ҙа, бәлки, изгелер, әммә уның ҡыланышы кешеләрҙе бөтөнләйгә икенсе төрлө фекерләүгә көйләй...

Барыһы ла ҡул йыуып, өҫтәл артына ултырҙылар, әммә бабайға башҡаса ҡул биреүсе булманы. Ҡөрьән аяттары уҡыла башлағас, миңә лә уҡырға тура килде. Бер нисә ҡыҫҡа аят уҡығас, әлеге бабай бар мәжлескә ишеттерерлек итеп: "Ҡулһуалла өс мәртәбә уҡыла!" - тип, миңә тағы "етди" иҫкәрмә яһаны. "Бер мәртәбә уҡыһаң да ярай уны, - тип кенә яуап бирҙем уға. - Уны ҡайһы бер осраҡтарҙа өс тапҡыр уҡыу кәңәш ителә ул, әммә был - мотлаҡ түгел..."

Дин әһеленең һәр ғәмәле, һүҙе изге Ҡөрьән һәм Бәйғәмбәр с.ғ.с. хәҙистәре менән дәлилләнергә, башҡалар өсөн асыҡ булырға тейеш, шул ваҡытта кешеләрҙә уның абруйы булыр һәм уны бер кем дә "сәйер" тип атамаҫ. Гәзитебеҙҙә әленән-әле теге йәки был дин әһеле менән әңгәмәләр сыҡҡылап тора. Уларҙың һәр һүҙе аңлайышлы, сөнки улар - уҡыған кешеләр, һөйләгәндә фәҡәт Китапҡа һәм сөннәткә нигеҙләнәләр. Ана шундай ғилемле хәҙрәттәребеҙҙең һүҙҙәрен күберәк ишетке килә.

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.

✓ Аҫка ҡалын хәрефтәр менән иғлан яҙылған: "Шәғәле Шаҡман исемендәге призға яндан атыу буйынса ярыш үткәрелә". Беренсе урынды яулаусыға автомобиль, тип, бер нисә өндәү билдәһе ҡуйылған.

* * *

Хакимиәт йортонан күңелһеҙ генә сыҡты Айбулат. Былай килеп сығыр тип һис тә күҙ алдына килтермәгәйне. Уйниәте һис шикһеҙ бойомға ашыр һымаҡ ине. Себерҙә йөрөгән саҡта ла тыуған яҡҡа ҡайтҡас яңы шөғөлө булыр, яндан атыу спорты райондың брендына әйләнер, тип хыялланғайны. Юғарынан ҡоламаҡ булды, килеп сыҡманы. Юғарынан ҡолаһаң, оҙағыраҡ ҡолайһың шул, шаңҡыуы оҙағыраҡ була. Әллә ситтә йөрөп, тормоштан артта ҡалдымы икән? Айбулат ундайҙарҙан түгел, юғарынан терәк булмағас, аҫтан башларға кәрәк. Хыялының буш ҡыуыҡ түгеллеген иҫбат итергә кәрәк. Хәҙер үк район гәзитенә инеп, ян спорты менән шөғөлләнергә теләүселәрҙе йыйыу тураһында иғлан бирәсәк. Башы булһа, аҙағы булыр - спорт комитеты һуңғы терәк түгел дә! Ғөмүмән, Айбулат өсөн һуңғы тигән һүҙ юҡ - һуңғы тигәнде ул яңының башы тип өйрәнгән: ҡайҙа ғына йөрөмәне, ҡайҙа ғына эшләмәне, һәр саҡ яңынан башларға тура килде.

Гәзит тураһында уйлағас, бая спорт комитеты начальнигы биргән гәзиткә иғтибар итте. Тормош дауам итә! Бына бит берәү иғландарҙан торған гәзит сығарып бушлай тарата, аҡса ла эшләй, башҡаларға ла ярҙам итә. Тимәк, йәштәр буш ятмай, алға ынтыла, яңы шөғөл таба. Беренсе биттә иң өҫтә торған иғлан шундуҡ иғтибарын үҙенә йәлеп итте. Ҡараны ла тәне эҫеле-һыуыҡлы булып сымырлап китте. Аҡ түбәтәйле ап-аҡ һаҡаллы олатаһына оҡшаған берәү ҡулына ян тотоп тора ла баһа! Аҫҡа ҡалын хәрефтәр менән иғлан яҙылған: "Шәғәле Шаҡман исемендәге призға яндан атыу буйынса ярыш үткәрелә". Беренсе урынды яулаусыға автомобиль, тип, бер нисә өндәү билдәһе ҡуйылған. Етмәһә, приздың фотоһын да урынлаштырғандар. Сәскәләр менән биҙәлгән ҡыҙыл төҫтәге еңел машина аҫтына "Приз эйәһен көтә!", тип яҙылған. Өнмө был, әллә төшмө? Айбулат телефон номерҙарына иғтибар итмәй, билдәләнгән адрес буйынса барырға булды. Яңы төҙөлгән ҡунаҡхананың беренсе ҡатындағы 102-се бүлмәгә мөрәжәғәт итергә ҡушҡандар. Ниңәлер, ҡапыл олатаһын күргән төшө иҫенә төштө...

* * *

Яһып килеп инде Айбулат ҡунаҡханаға. 102-се бүлмәнең ҡайҙалығын һорап, тура шул яҡҡа ынтылды. Ишекте бар көсөнә асып ебәрҙе. Бүлмәлә олатаһы йылмайып ҡаршы алыр һымаҡ тойолдо уға. Елкенеүе көслө булғандыр, ишектән сығып килгән ҡыҙ уның ҡосағына килеп тә инде.

- Пардон! - Айбулат шаҡ ҡатты. Бәй, бая ашхана эргәһендә осратҡан ҡыҙ ҙа баһа!

Ҡыҙ ҙа был хәл булырын күҙ алдына килтермәгәндер, егеткә тейәлде.

- Әйттем бит мин һиңә, минең юлда йөрөмә тип! Аяҡ баҫыр урын юҡ, эләгеп ҡоларға була, - әлбиттә, Айбулат бик йомшаҡ итеп әйтте был һүҙҙәрҙе. Ҡыҙ егеттең шаярыуын ҡабул итте.

- Тышта көтәм, моғайын, бәйгегә килгәнһеңдер, - тине мут йылмайып.

* * *

- Бәй, һинең машинаң аҡ төҫтә икән дә баһа! - ҡунаҡхананан сығып килгән Айбулатҡа ҡыҙҙың әйткән тәүге һүҙе шул булды.

- Мин үҙем дә ҡара түгел, - егет үҙенсә мәғәнәле итеп яуап бирҙе.

Айбулаттың һүҙҙәре йоғонто яһанымы, ҡыҙ егеткә һынсыл ҡарашы менән баштан-аяҡ күҙ йүгертте. Ҡараштар осрашты. Һаҡал-мыйығы ҡырылған, сәсе ҡупшы итеп алынған, өҫтөнә килешеп торған яңы кейем кейгән Айбулатҡа ҡарап, баяғы урман айыуын таныуы ҡыйын ине.

- Алыш бармы, бireш бармы? - Айбулат тик ошо ҡыҙға ғына үҙенең оҫталығын күрһәтергә тейеш һымаҡ һанай ине.

- Мин риза, әйҙә, ярышабыҙ, - тине өҫтөнә ҡыҙыл төҫтәге спорт кейеме кейгән ҡыҙ. Баяғы аҡ тунлы Ҡарһылыу әкиәтенән сығып, сибәр башҡорт ҡыҙына әйләнгәйне...

* * *

Ҡасабанан сығып, район һабантуйы үткәрелгән аҡланда туҡтанылар. Ҡыҙ машинаһынан уҡ-һаҙағын алды, сәптәрәлә үҙе менән икән.

- Нисә метрҙан атышабыҙ? - ҡыҙҙың хәрәкәттәренә ҡарап, Айбулат ҡаушай төштө, үҙен бигерәк ышаныслы тота, оятҡа ҡалмағайны.

- Һеҙ һайлағыҙ, мин ҡушылырмын, - тигән булды уңайһыҙ хәлдән ҡотолор өсөн.

- Улайһа, олимпиадалағы һымаҡ, етмеш метрҙан атышабыҙ, - ҡыҙ машинаһынан янын алғас, Айбулат саҡ ултыра төшмәне. Бындай ҡорамал үҙе бер машина хаҡы торалыр, тип уйлап ҡуйҙы.

Теүәл етмеш метрҙы үлсәп, сәпте нығытҡас, ҡыҙ оҙаҡ ҡына тоҫҡап торҙо ла атып ебәрҙе. Айбулат шаҡ ҡатты. Атыу булманы был - ҡыҙ кәүҙәһен тура тотоп, бейеү хәрәкәттәре яһанымы ни! Моноклен сығарып, сәпкә ҡарағас, бала һымаҡ ҡулдарын сәпәкәйләп ҡуйҙы.

- Ун очко! Хәҙер һеҙҙең сират, күрһәтегеҙ оҫталығығыҙҙы, - һынаулы ҡараш Айбулатты үтә тиште.

- Хәҙер, - тигән булды егет. Машинаһынан ян сығарҙы.

- Уау! - ҡыҙҙың иҫе китте. - Ҡарарға мөмкинме? Шәғәле Шаҡмандың яны ҡыҙҙың нескә ҡулдарына күсте. Ул үҙенең янын егеткә тоттороп, бер күреүҙән ғашиҡ кешеләй, янға текәлде. Яндың керешен тартып ҡараны - көсө етмәне. - Был ҡорал ирҙәр өсөн генәлер, - тип янды кире Айбулатҡа бирҙе. - Дөрөҫөрәге, батырҙар өсөндөр... Мә, атығыҙ, һеҙҙең сират.

Айбулат тимер башаҡлы иң оҙон уҡ һайлап алды, ҡыҙ иҫенә килгәнсе төҙәп тә тормай атып ебәрҙе. Атты атыуын, элеккеләй ышаныс кисермәне - уғы яҙа оса, ер тишегенә инерҙәй булаҫаҡ. Ҡыҙ моноклен сәпте ҡараны.

- Ҡотлайым, уғығыҙ һөт эсергә китте, - тине. Айбулаттың сикәләре уттай баҙлап яна башланы.

- Әйҙә, барып ҡарайыҡ! Минең яҙа атҡаным юҡ!

Йүгерә-атлай сәп янына килделәр.

- Әйтәм бит, минең яҙа атҡаным юҡ! - Айбулаттың ауыҙы ҡолағына етте. Ҡыҙҙы ҡосағына алып, үҙ ҡыйыулығына үҙе хайран булып, ҡыҙҙы өйрөлтә башланы.

Уҡ ҡыҙҙың уғы эргәһенән генә сәпте үтә тишеп, ары осҡайны, саҡ эҙләп таптылар.

* * *

Ярыш ҡыҙыу барҙы. Ҡатнашыусылар бик күп булып сыҡты. Интернет заманы бит, бәйге тураһында ишетеп, күрше өлкәләрҙән дә килгәндәр. Ярыш ҡомарына бирелеп, Айбулат ҡыҙҙы күҙ уңынан юғалтты. Ярымфиналға үткәс, уны яның спорт стандарттарына тура килмәй, тип, ярыштан алырға булып киттеләр. Традицион яндан атырға рөхсәт, тип, кире ҡалдырҙылар. Әйтеүҙәре буйынса, ярышты ойоштороусы шәхсән үҙе рөхсәт иткән, тинеләр. Өсөнсө көндә финалға сыҡҡан биш кеше араһында күптәнге таныш осратҡас, Айбулаттың йөрәге тағы ялп итте. Ҡыҙ янына килеп: "Мин һиңә нимә тинем?" - тип һораны шым ғына.

- Нимә тинең? - ҡыҙ аңламаны.

- Минең юлда йөрөмә, тинем.

- Ә мин һине теге ваҡыт барыбер артҡа сиктерҙем, - ҡыҙ ошоноң менән һүҙ бөттө тигәндәй, боролоп китеп тә барҙы.

Финалда икәһе генә тороп ҡалғас, егет менән ҡыҙ бер-береһенә әйләнеп тә ҡараманылар - ярыш сәме икәһен дә йотто. Оҫталыҡ еңмәне, таһыллыҡ еңде, стандарт отманы, боронғолоҡ көслөрәк булып сыҡты. Олатай мәктәбе Айбулатты беренсе итте.

* * *

Шау-шыу уҙҙы. Өс көн гөрләп торған ҡунаҡхана алды бушап ҡалды. Айбулат үҙе йәшәгән бүлмәнең асҡысын тапшырғас, әйберҙәрен йөкмәп, тышҡа сыҡты. Кисә ярыштан һуң булған осрашыу иҫенә төштө. Эйе, сәйер осрашыу булды ул. Ярышты ойоштороусы уның менән шәхсән осрашып, бик оҙаҡ һөйләште. Бәлки, ул тиклем оҙаҡ та булмағандыр, әммә Айбулат өсөн был диалог ярты ғүмерендәй тойолдо. Әйтерһең дә, быға тиклем ул шул хәтлем дә эскерһеҙ булған, ваҡытын бушҡа әрәм иткән, мәғәнәһеҙ тормош менән йәшәгән. Еңеү шатлығынан башы әйләнгән Айбулатты һалҡын һыу менән ҡойондорҙолармы ни! Был кешене, ярышты ойоштороусыны, Айбулат тәү күреүҙән үк оҡшатмағайны. Башта ул уның ярыш хужаһы икәнен дә белмәне, тамаша ҡылыусыларҙың береһелер тип уйлағайны. Айбулат ярыш һыҙығына баҫыуы була, тып итеп эргәһенә килеп тә баҫа. "Һин мотлаҡ беренсе алырға тейеш!" - әйткән һүҙе шул. Нисектер бойороҡ һымаҡ итеп әйтә. Ҡаты итеп, артҡа сигер урын ҡалдырмай әйтә. Айбулат тәүҙә был бәйләнсек әҙәмгә иғтибар итмәҫкә тырышты, аҙаҡ, түҙмәй, уның тауышына оҡшатып, ҡаты итеп: "Не мешай, а!" - тине. Теге ҡабат өндәшмәне, әммә уның талапсан ҡарашын Айбулат ярыш бөткәнсе арҡаһы менән тойҙо.

Нимәһе менән оҡшамағандыр был әҙәм, үҙе лә аңламаны. Тәү ҡарауға үҙе бик тә һөйкөмлө күренә. Төҙ, нәҙек көмөрө танауы шыма итеп ҡырылған сирышһыҙ йөҙөнә килешеп тора. Ҡыйғас ҡаштары аҫтында хәйләкәр ҡарашлы дөм-ҡара күҙҙәр йәшеренгән. Ыҫмала төҫөндәге бөҙрә сәстәре сибәрлеҡ өҫтәгәндәй. Быға иҫе китмәне Айбулаттың. Унан һәр саҡ хушбуй еҫе аңҡып тороуына ла аптыраманы. Иң асыуы килгәне, моғайын, уның килешле кейеменә өҫтәп, күбәләк-галстук тағып йөрөүе булғандыр. Ярайһы уҡ һыуыҡ, ҡай саҡ әсе ел дә өрә, ә ул көн дә, цирктағы клоун кеүек, күбәләген ҡалдырмай. Өшөп ҡыҙарған танауы шаян образды тулыландырғандай тойола. Себерҙә эшләгәндә лә нәҡ шундай әҙәм була торғайны. Егеттәр үҙ-ара уны "Майонез" тип йөрөттө. Йәнәһе, ҡиәфәте бар, файҙаһы юҡ. Етмәһә, ул үҙе лә майонез ашарға ярата торғайны. Тәүҙә Айбулат уны шул ҡылығы өсөн "Майонез" ҡушаматы алғандыр тип уйлай торғайны. Ҡушамат мәғәнәһе төптәрәк ятҡан икән: ҡиәфәт бар, фәтүә юҡ. Ғәҙәттә, тәрән мәғәнәгә эйә ҡушамат ныҡ йәбешә шул. Айбулат уны ғаиләһен онотоп, тик үҙе өсөн генә фырт йәшәгән әҙәмгә оҡшата торғайны. Әллә шул иҫенә төшкәндер, кем белә инде, ярышты ойоштороусы менән тәүге аралашыуы шулайыраҡ килеп сыҡты. Беренсе урын өсөн бирелгән машина асҡыстарын тапшырғанда, ул Айбулаттың ҡулдарын оҙаҡ ҡына һелкетте, әрһеҙ ҡараштары менән йоторҙай итеп ҡарап, үтә лә аҡ (күрәһең, махсус ағарттырғандыр), тигеҙ тештәрен ыржайтып йылмайҙы. Кисәге осрашыуҙа ла ярышты ойоштороусы үҙен бик иркен тотто. Айбулат бүлмәгә инеү менән бер яҡ беләгенән матҡып тотоп алды.

- Мин һине оҙаҡ эҙләнем, ниһайәт, таптым, - тәү әйткән һүҙенән үк теҙгенде үҙ ҡулына алды был. - Был рәсми осрашыу түгел, әммә беҙ бөгөн бик тә мөһим Килешеүгә ҡул ҡуйырға тейеш. Мә, ултыр, уҡып сыҡ.

Айбулат ҡағыҙға текәлде. Башта рәсми тел менән яҙылған, дөрөҫөрәге, төҙөлгән, документтың эстәлегенә төшөнә алмай, иҫе китте. Яратмай ул рәсми ҡағыҙҙарҙы, уларҙан ниндәйҙер налҡынлыҡ бөркөлә, ихласлыҡтың тамсыһы ла юҡ уларҙа, әрһеҙлек үҙ ҡоршауына ала. Баҡһаң, Айбулат ошо ҡағыҙға ҡул ҡуйһа, ярышты ойоштороусының мөлкәтенә әйләнә. Әлбиттә, килешеүҙә мөлкәт тигән һүҙ юҡ, әммә ябай телдә уны шулай аңлатырға була. Бер ни ҙә аңламағас, Айбулат ойоштороусыға ҡараны, йәнәһе, ябай тел менән төшөндөрөүен һорай.

- Тиҙҙән уҡ атыу буйынса халыҡ-ара ярыш була. Беҙ унда мотлаҡ беренсе булырға тейеш.

- Ни өсөн беҙ? Һеҙ ҙә ҡатнашаһығыҙмы ул ярышта? - Айбулат буласаҡ хужаһының тел төбөнә төшөнә башланы.

- Әлбиттә! Мин һинең продюсерың булам. Тренировкаларҙы, ял итеүҙе, юл сығымдарын үҙем ҡаплайым. Иң мөһиме, елле гонорар түләйәсәкмен. - Берәү ҙә күреп ҡуймаһын тигән һымаҡ, ул сумманы ҡағыҙға яҙып күрһәтте. - Долларҙарҙа... Ризамы?

Айбулат ҡаушап ҡалды. Сумма елле!.. Ундай аҡсаны ул ғүмере буйы ла эшләй алмаясаҡ. Ун йыл буйы Себерҙә йөрөп туплай алмаған аҡсаны бер ярыш өсөн генә тәҡдим итһендәр әле, башың әйләнмәҫ ерҙән әйләнер.

- Ризамы? - бәйгене ойоштороусы нәҙек оҙон аҡ бармаҡлы ҡулын Айбулатҡа һондо. - Бик яйлы мәл булмаҡсы, икеләнмә.

- Уйларға ваҡыт биреҙ. - Айбулат хушлашмайынса бүлмәнән сығып китте. Артабанғы ваҡиғалар булмаһа, бәлки, ризалашыр ҙа ине...

* * *

Айбулат Гөлнәзирәгә шылтыратты. Ҡулындағы сәскә гөлләмәһен ҡайҙа ҡуйырға белмәй, призға бирелгән машинаһының эсенә һалды. Бөгөн һыуыта төшкән, сәскәләр йылы ярата. Ҡыҙ көттөрмәне, йылмайып килеп тә сыҡты. Айбулат сәскәләрҙе машинаһынан алып, ҡыҙға тотторҙо, артабан нимә әйтергә белмәй, баҙап ҡалды. Ҡыҙ ҙа өндәшмәй. Шул саҡ ҡыҙ менән егет эргәһенә полиция кейемендәге ике ир килде.

- Айбулат Юлдашев һеҙ булаһығыҙмы?

- Эйе, мин булам.

Ирҙәрҙең береһе ҡыҙыл тышлы танытмаһын күрһәтте.

- Беҙҙең менән полиция бүлегенә барырға тура килер. Ялыу бар, һеҙ Юлдаш ауылы музейынан Шәғәле Шаҡман янын урлауҙа ғәйепләнәһегеҙ.

Айбулат аптырап ҡалған ҡыҙға текәлде. Кеҫәһенән асҡыс сығарып, уға тотторҙо.

- Ҡыҙыл төҫтәге машинала ҡыҙҙар йөрөргә тейеш. Был машина, әйҙә, һиңә булһын. Әгәр бөгөн ҡайтып китмәһәң, кискә осрашыуға саҡырам.

- Мин көтөрмөн, - тине ҡыҙ.

- Улайһа, Бизонды һаҡла, - тине Айбулат.

- Аңланым, Айбулат ағай, - Гөлнәзирә егеткә шундай наҙлы итеп ҡараны, буйҙаҡтар араһында йөрөп, күңеле ҡатып бөткән егет ҡолап китә яҙҙы. - Бизондың багажнигында ятҡан Бизонды әйтәһеңме?

- Тап шулай, - тине лә егет, полиция машинаһына табан йүнәлгәйне генә:

- Айбулат улым, туҡта! - тигән тауышҡа әйләнеп ҡараһа, Ғәле Ҡаһарманович күреп, ҡатып ҡалды. "Әһә, Ғәле олатай эҙләтә икән янды", тигән уй йүгереп үтте шунда башынан.

- Айбулат улым, ғәфү итә күр, музейҙан Шәғәле Шаҡмандың янын һин алып киткәнде ауылда кемдер күргән, полицияға хәбәр иткән. Шунан ауылдаштар мине яндың юғалыуы тураһында полицияға ғариза яҙырға күндерҙеләр, - тине Ғәле Ҡаһарманович, шунан полиция хеҙмәткәрҙәренә мөрәжәғәт итте:

- Егеттәр, һеҙ ҙә ғәфү итегеҙ. Хәҙер мин үҙем полиция бүлегенә барып, ян юғалыуы тураһындағы ғаризамды кире алам. Аңлашылмаусылыҡ килеп сыҡты бында...

Полиция машинаһына табан атлаған ерҙән туҡтап, Айбулатҡа боролоп, Ғәле Ҡаһарманович тағы шулай тип өҫтәне:

- Янды оҙағыраҡ килтермәй тотҡас, етмәһә, ауылдаштар музейҙа ян юҡҡа сыҡҡанын шәйләгәс, үҙем дә аптыранғайным шул. Бәлки, янды юғалтып-фәләп ҡуйҙымы икән, тип тә шикләнгәйнем. Әле бына яндан атыу буйынса ярыш булғанын, шунда һинең еңеүең тураһында ишеттек. Ауылдаштарға аңлаттым: ысынлап та, йәштәрҙе яндан атырға өйрәтәм, олимпия чемпиондары тәрбиәләйем, тип янып йөрөгән кешелә булырға тейеш артабан был ҡомартҡы, тинем. Музейҙа оҙаҡ һаҡланды, халыҡҡа хеҙмәт итер ваҡыты етте был Шәғәле Шаҡман янының...

Шулай тине лә, тәүәккәл аҙымдар менән полиция хеҙмәткәрҙәре артынан атланы...

(Аҙағы. Башы 23-24-се һандарҙа).

ЗАУЫҠ

ИХ, ИЛАНЫМ ИЮНЬ ИРТӘҺЕНДӘ

Хәтер ҡанатына ултырып…

Әлфис ҒАЯЗОВ

Ил сигендә ҡырҡ берҙә

Сихри тынлыҡ.
Был тынлыҡҡа иртән
Хайран ҡалған кеүек ер һәм күк.
Бер ҡошсоҡҡа бер ни кәрәк түгел -
Өҙгөләнә бары тик кәкүк.

Ул ҡошсоҡҡа нимә - ул йоҡламай,
Һалдаттарҙы арыу йоҡлата,
Бер ни булмағандай бар донъяла
Ил сигендә алһыу таң ата.

Әйләнә лә урман эстәренән
Күккә аша кәкүк тауышы.
Йылдар, минуттарға бүлгән кеүек
Тып-тын аҡҡан донъя барышын.

Ә бер һалдат йоҡоһона сумған
Йәйге иртә, йәмле йәй айы,
Әллә инде төштәрендә күрә
Сәғәттәрҙе кәкүк һанауын?

Әйтә кеүек кәкүк:
Уян, һалдат,
Татлы төштәреңде һин онот...
Белә кәкүк, һуғыш башланырға
Ҡалған бары бер нисә минут...

22 июнь бураны

Бына тағы июнь аҙағында
Тополь бурандары ҡотора,
Ҡыштар еткән кеүек йәй башында -
Аяҡ аҫтын ҡарға тултыра.

Төшкә керә.
Июнь ҡарын йырып
Арбаларҙы аттар тарталар,
Һуғыш яланына ирҙәр китә -
Ҡайһылары ҡабат ҡайталыр...

Берәү шунда гармунында уйнай,
Йәшен һөртә кемдер, эйелеп,
Аттар башын сайҡай, белгән кеүек,
Ҡабат ҡайтыуҙары икеле.

Ауыл сиге.
Кәртә буйы тулы
Һындай ҡатҡан халыҡ бер һүҙһеҙ,
Һүҙҙәр бөткән, йәштәр генә аға,
Тып-тын ҡалған халыҡ, бер өнһеҙ...

Киткән аттар менән халыҡ араһында
Урын таба алмай бер көсөк,
Бер аттарға саба, бер киреғә,
Аңлай алмай хәлде бер нисек...

Баҫылғандай булды юл туҙаны,
Гармун йыры шунда өҙөлә,
Барлыҡ күҙҙәр юл өҫтөндә ята, -
Кемдең эте икән, кем белә?

Түҙә алмай бер йәш егет шунда
Арбаһынан юлға һикерҙе,
Тотоп күкрәгенә ҡыҫты этте,
Ниҙер әйтте, шунан ебәрҙе...

Аттар китте.
Илап, бер яңғыҙы
Ялан уртаһында эт ҡалды,
Кешеләргә табан ашыҡманы -
Йәштәренән, бахыр, оялды...

...Мин булмаған саҡтар төшкә кермәй,
Төшкә кермәй һуғыш, яу ҡыры,
Их, иланым июнь иртәһендә
Хәтер ҡанатына ултырып...

Күҙ алдында һаман тота хәтер
Ир-егеттәр тулы арбаны -
Шулар араһында кеүек миңә
Ҙур һуғыштың тәүге ҡорбаны...

Хәбәрһеҙҙәр

Хәбәрһеҙҙәр, хәбәрһеҙҙәр...
Кемгә
Мәрхәмәтһеҙ яҙмыш бирелгән?
Үтә алмай яҙмыш упҡындарын
Сит ерҙәрҙә кемдәр күмелгән?

Тыуған ерҙән киткән ҡоштар кеүек,
Хәбәрһеҙҙәр китеп юғалған,
Исемдәре инде онотолған,
Хәтерҙәрҙә беҙҙең кем ҡалған?

Эҙҙәре юҡ инде ер өҫтөндә -
Килгәндәрме шуға был ергә?
Тол ҡатындар күңелендә генә
Хәбәрһеҙҙәр ҡалған ғүмергә...

Хәбәрһеҙҙәр бураҙналар һыҙған
Күҙ йәшенән кипкән күңелгә,
Яҙ айында ҡайтҡан ҡоштар кеүек
Хәбәрһеҙҙәр ҡайта түгелме?

Миләш төбөндә бер әбей

Япраҡтарын өҙә көҙгө елдәр
Өй артында үҫкән миләштең.
Елдәр өҙгән япраҡтарҙы һыйпап
Миләш менән ҡарсыҡ һөйләшә:

- Сәскә ҡойҙоң, инде япраҡтарың
Яҙмыш елдәрендә һарғайҙы.
Рәсемдәрҙә улым йәп-йәш көйө,
Һаман йәп-йәш, ә мин - ҡартайҙым...

Һағыш-ҡайғыларҙа яна-көйә,
Япраҡтарың тағын ҡыҙарҙы.
Һөйәрмен тип көтәм ейәндәрҙе,
Килен булыр тиеп - ҡыҙҙарҙы...

Һалҡын ҡыштар, яҙмыш бурандары
Йыйырсыҡтар һалды йөҙҙәргә.
Һин дә яңғыҙ, мин дә үкһеҙ етем,
Ҡаршылайбыҙ икәү көҙҙәрҙе...

Әллә яңғыҙлыҡтан уттай яна
Һалҡындарҙа ҡыҙыл миләштәр.
Хәбәрһеҙҙәр, ҡайталмаған улдар,
Һеҙҙе көтә тулған тәлгәштәр...

Инде ярты быуат үтеп китте,
Ярты быуат хәтер күгендә:
Сәстәренә ҡарҙар яуған әбей
Улын көтә миләш төбөндә...

Юҡҡа сыҡҡан ауыл ҡойоһо

Һыу ҡаҙерен белгән халыҡ, шуға
Ҡаҙылғандар мәңге-оҙаҡҡа
Һәр бер урам һайын йә торналы,
Йә сығырлы ҡойо, ҡоҙоҡтар.

Юҡҡа сыҡҡан ауыл менән бергә
Юҡҡа сыға милләт ояһы,
Урам уртаһында етем булып
Яңғыҙ ҡалған ауыл ҡойоһо.

Тар һуҡмаҡты үлән баҫып киткән,
Юғалтҡан ул йырын, моң-көйөн,
Бер кешеһеҙ ауыл урамында
Етемлектән илай был ҡойо.

Бураһында йәшел мүк эҙҙәре,
Ялғаштырып ҡуйған сылбыры,
Ҡапҡасы ла әллә ҡайҙа ята,
Урынынан ҡупҡан сығыры.

Ә ҡасандыр донъя гөрләп торған,
Кемдер бында аттар эсергән,
Һыуын алып мәңге йәш әсәйҙәр,
Тәмле-тәмле аштар бешергән.

Иҫләйҙер ул һабантуйҙар йәмен,
Бесән өмәләре шаулауын,
Таңды көтөп алған йәш парҙарҙы,
Ҡурай моңон, тальян йырлауын.

Хәтерләйҙер ҡойо бер-бер артлы
Һуғыштарға киткән сафтарҙы,
Күҙ йәштәре тамған, ҡандар тамған
Өс мөйөшлө ҡыҫҡа хаттарҙы...

Шаулап торған, ҡайнап торған тормош
Хәтерҙәрҙә ята уйылып,
Сағылғандай иҫтә ҡалған йөҙҙәр
Көҙгөһөндә иҫке ҡойоноң...

Юҡ ҡойолар ауылдарҙа хәҙер -
Торбаларҙан аға һыуҙары,
Юҡһыналар ҡойо сығырҙары
Уңған килендәрҙең ҡулдарын...

Ел иҫкәндә ишетелә тауыш
Ыңғыраша шығыр ҙа шығыр,
Әйтерһең лә, яраланған яҙмыш -
Кеше кеүек илай тик сығыр,
Үкһеп илай бары тик сығыр...

Иҫке өйҙәр

Ҡараңғылыҡҡа сорналып
Ҡаралғандар,
Өйҙәр, кисте көтөп алып,
Ут алғандар.

Урамдарҙа һәм өйҙәрҙә
Уттар серле.
Һәр өйҙөң дә үҙ төҫө бар,
Уттар төрлө.

Кемдер йоҡларға йыйына,
Кем уяна.
Ҡайҙа йәштәр түгә-түгә
Шәмдәр яна.

Ҡайһы өйҙә күҙен ҡыҫа
Бишле лампа,
Күләгәләр өйҙә йөҙә
Бата-ҡалҡа.

Өй бүрәнәһен шартлата
Тышта һалҡын,
Өйҙә дөрләй ҡыҙыу усаҡ,
Бейей ялҡын.

Һәр бер өйҙә өҫтәл тулы
Ҙур ғаилә,
Бала-саға ҙур бәхеттә
Шау-шыу килә.

Үҙ көйҙәрен йырлай шунда
Еҙ самауыр,
Эҫе сәйе, балы-майы,
Көйҙәре бар.

Шәмдәр ҙә юҡ бөгөн өйҙә,
Юҡ лампалар,
Шаулап торған ауылдар юҡ,
Юҡ балалар...

Ауыл түгел, урман унда
Йәшеллектә,
Кешеләре ҡалды хәҙер
Мәңгелектә...

✓ *Ахырызаман етһә, балалар - батша, атай-әсәй хеҙмәтсе булыр, тигән ваҡытта йәшәйбеҙ түгелме? Балалар ни һорай, шуны алып бирәбеҙ, уларҙы эшкә ҡушырға йәлләйбеҙ.*

ИНТЕРНЕТТАН

МАЙҺЫҘ ДИЕТА...

файҙалы түгел, имеш

■ Тәүлегенә һигеҙ сәғәт йоҡлау - йәш булып ҡалыуҙың нигеҙе, тип белдерә ғалимдар. Улар иҫбатлауынса, даими рәүештә йоҡо туймау организмды ваҡытынан алда ҡартайыуға дусар итә, шулай уҡ йоҡо баш мейеһе эшмәкәрлеге өсөн дә мөһим. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, төнгө йоҡоноң ҡыҫҡа булыуы организмдың үтә мөһим функцияларының боҙолоуына һәм биологик үҙгәрештәргә килтерә. Йоҡо туймау матдәләр алышыныуы, гормональ һәм эндокрин системаһы процесының боҙолоуына алып килә. Тәжрибәлә ҡатнашыусы йәш егеттәр тәүлегенә 4 сәғәт кенә йоҡлай, һөҙөмтәлә уларҙың ҡанында глюкозаның, шулай уҡ стресс гормоны - кортизол артыуы һәм гормональ баланстың үҙгәреүе күҙәтелә. Эксперименттарҙа ҡатнашыусыларға 12 сәғәт йоҡлап алырға рөхсәт бирелгәндән һуң был симптомдар юҡҡа сыға.

■ Һуңғы ун йыл эсендә үткәрелгән тиҫтәләрсә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майһыҙ диеталар сәләмәтлек өсөн зыян ғына килтерә. Бөгөн түбән калориялы аҙыҡ-түлек ҡулланыу модала һәм ул иң сәләмәт туҡланыу өлгөһө итеп ҡабул ителә. Бындай продукттар етештереүселәр вәғәҙәләүенсә, май күләме түбән булған аҙыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, яман шеш һәм диабеттан һаҡлай. Әммә был аҙыҡ төрҙәре составындағы тоҙ, трансжир, зарарлы углеводтар берәүгә лә файҙа килтергәне юҡ әле. Сәләмәтлек өсөн майҙың күләменә ҡарағанда, уның сифаты күпкә мөһимерәк. Мәҫәлән, түбән калориялы икмәктә май күләме аҙ, тик аҡ он һәм шәкәр күп, шуға ла майһыҙ, әммә эшкәртелгән углеводтарҙан торған диета ауырлыҡтың артыуына, йөрәк сирҙәренә, 2-се типтағы диабетҡа килтерә, ти ғалимдар.

■ Британия Физиотерапия Йәмғәтселеге экспертҡары күптәрҙең офистан сыҡҡас та смартфон, планшет, ноутбук ҡулланып, эшен юлда һәм өйҙә эшләүенә хәүеф белдерә. Бында хеҙмәт һөйөүселәрҙең умыртҡа баҫаналһы зыян күреүендә генә түгел эш, заман технологиялары офис хеҙмәткәрҙәренә бөтөнләй ял итергә бирмәй икән. Ике меңдән ашыу хеҙмәткәр араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, был кешеләрҙең өстән ике өлөшө эш көнө тамамланғас та эшләүен дауам итә. "Тиҙ арала хәл итеү кәрәклеге булған эште өйгә алып ҡайтыу насар күренеш түгел, шулай ҙа һәр кис һайын эшләү ғәҙәте арҡала һәм муйында ауыртыуға, стресҡа килтерә", - тип комментарий бирә доктор Хелена Джонсон. "Кеше портатив ҡоролмалар ҡулланһа, умыртҡа баҫаналһына тағы ла нығыраҡ зыян килә. Өйҙә эшләгән кеше иртәгәһенә офиста үҙенең эшен яҡшылап башҡара алмаясаҡ һәм, һөҙөмтәлә, эшен тағы ла өйгә аласаҡ. Шуға ла кешеләр смартфондарын һүндерергә өйрәнергә тейеш", - тип белдерҙе ул BBC-ҡа биргән интервьюһында.

■ Көнөнә 7 сынаяҡ сәй эсеү простата биҙе яман шеше хәүефен 50 процентҡа арттыра. Глазго университеты ғалимдары ошондай сенсацион белдереү яһаған һәм сәй индустрияһы вәкилдәре араһында тауыш ҡуптарған. Британия ғалимдары иҫкәртеүенсә, күп сәй эскән ир-егеттәр простата биҙе яман шешенә тиҙерәк бирешә. Ғалимдар был һығымтаға 4 йыл дауамында 6 мең ир-атты тикшергәндән һуң килгән.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

МИЛЛИ БАЛҠЫШ БИТ УЛАР!

Ниндәйҙер план үтәү, отчет бирер өсөн түгел, ә күңел талабы, йөрәк ҡушыуы буйынса бер ҡорға тупланып, ауылдың йәшәйешенә йән өрөп, йәм биреп, халҡыбыҙҙың үткәне менән киләсәген тоташтырыусы милли балҡыш булып йәшәй ағинәйҙәр. 15-16 июндә Белорет ҡалаһында һәм Бөрйән районы ауылдарында үткән осрашыуҙар ошоға дәлил булды. Сараларҙа республика "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, танылған шағирә Фирүзә Абдуллина ҡатнашты.

Йолалар һағында

Был көндө Белорет педагогия колледжы башҡорт рухы һәм мәҙәниәте солғанышында ҡот-нурға ҡойондо. Колледждың коридорҙарында, фойеһында Белорет районы ағинәйҙәре әҙерләгән ҡул эштәре күргәҙмәһе ҡатын-ҡыҙҙың ниндәй йәштә лә матурлыҡ тыуҙырыусы һөнәрмәндәр өлгөһө, милли кейемдәрҙәге Белорет, Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы, Ғафури ағинәйҙәренең нурлы йөҙҙәре, ипле аралашыуы, итәғәтле генә фекер алышыуы заманыбыҙға ҡот биреү сағылышы итеп ҡабул ҡылынды. Артабан аралашыуҙар ҙур залдың сәхнәһендә дауам итте. Белорет районының "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе Зөбәржәт Әхмәҙулла ҡыҙы Суфиянова район ағинәйҙәренең эштәрен барлап, кемдәрҙелер айырым билдәләп, һәр береһенә йылы һүҙен төбәп, шаяртып та, уйландырып та, телмәр тотто. Иң ҙур рәхмәт һүҙен, әлбиттә, ошо ҡорҙо ойоштороpға ярҙам иткән Белорет педагогия колледжы коллективына йүнәлтте.

Зөбәржәт Әхмәҙулла ҡыҙы билдәләүенсә, райондағы "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы бынан туғыҙ йыл элек Шығай ауылындағы ҡорҙан башланғыс ала. Шунан алып милли кейемдәге ҡатын-ҡыҙҙар ауылдарҙа үткән һәр акция, флешмоб, байрамдарға йәм биреүсе, йолалар башҡарыусы, балаларҙы ла төрлө тәрбиәүи сараларға йәлеп итеүсе бер көскә әйләнә. Башҡорт матбуғатын таратыу, мәктәптә этношәмбеләр, милли костюм көнө уҙғарыу ҙа ағинәйҙәр иңенә төшә. Бигерәк тә Земфира Кәримова етәкләгән Ҡарағайлы ауылы ағинәйҙәре һәр эштә әүҙемлек күрһәтеп, райондың милли һәм мәҙәни тормошоноң төп терәгенә әүерелә. Башҡа ауылдарҙа ла ағинәйҙәр йәшәйештә кәрәк булып торған боронғо йолаларҙы ҡулланылышҡа индерә, туйҙарҙа үҙҙәре лә ҡатнашып, килен төшөрөшә, уларҙы һыу юлына оҙата бара. Әлеге сарала ла беҙ быға башҡарылмаған йола күренештәренә шаһит булдыҡ. Инйәр-Ҡатай ағинәйҙәре "Әрмәк һуғыу" (тирүгә, буй балаҫ тип тә әйтәләр) кәсебен сәхнәләштерһә, Ғәбдүктәр төрлө ҡораманан тегелгән тәүге бәпәй күлдәге тураһындағы "Бетеү күлдәк" йолаһын күрһәтте. Абзаҡтарҙың быға ишетелмәгән "Етеле шәм" йолаһы иһә бөгөнгө Украина менән бәйле ваҡиғаларға ла ауаздаш булып, күҙҙәргә йәш төйөлдөрҙө. Маныштыларҙың барыбыҙға ла таныш "Килен һөйөү" йолаһын матур теләк-доғалар әйтеп, һамаҡлап башҡарыуҙары ла күңелгә үтеп инде. Халҡыбыҙҙың изге теләктәре лә, ямандан тыйыуҙары ла һамаҡлауға һалынып, оҫта тәрбиә алымына әйләнгән булыуын ошондай йолаларыбыҙ раҫлай ҙа инде бөгөн.

Был ҡорҙа "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһының көнитмешебеҙгә ҡайтарылған тағы бер йолаһы һоҡландырҙы: әле генә беҙ бер ауылда йәшәгән кешеләрҙең дә бер-береһенең тормошо менән ҡыҙыҡһынмауы, хатта күрше күршеһенең хәлен белмәүе тураһында зарлана инек. Ойошма ағзалары үҙ-ара аралашыуҙың бәҫен, мәртәбәһен күтәреп, ауылдаштар менән генә түгел, райондаштар менән генә лә түгел, ә күрше райондар, бар республика ҡатын-ҡыҙҙары менән аралаша, дуҫлаша, тәжрибә уртаҡлаша йөрөй. Белореттар ҡорона саҡырылған Баймаҡ, Учалы, Әбйәлил, Бөрйән, Ғафури райондарынан килгән ағинәйҙәр ҙә ошо хәкиҡәтте раҫлап, һәр береһе үҙ эше, үҙ фекере, үҙ ҡаҙанышы менән уртаҡлашып сығыш яһаны. Ысын мәғәнәһендә ағинәй аҡылы майҙан тотто был ҡорҙа.

Тереклек мәктәбе

Бөрйән районындағы осрашыуҙар Байназар ауылында башланды. Бында беҙҙе Байназар, Мораҙым, Мәһәҙей, Әбделмәмбәт, Килдегол ауылдары ағинәйҙәре ҡаршы алды. Мәктәп баҡсаһында үткән үҙенсәлекле лә, фәһемле лә сара һәр кемде хушһындырҙы. Тәбиғәт менән тығыҙ бәйләнештә булған Байназар ағинәйе Көнһылыу Ҡотлобаева һәм мәктәп уҡытыусылары "Тереклек мәктәбе"нең төрлө йүнәлештәге дәрестәрен үткәрҙеләр. "Сәләмәт өҫтәл" дәресе аша Байназар ағинәйе Ғәзизә Алтынбаева **(һүрәттә)** магазиндың химикат ҡушылған аҙыҡ-түлеге урынына үҙебеҙ етештергән хәләл ризыҡ менән туҡланырға саҡырҙы. "Көнһылыу Зәки ҡыҙы беҙҙе: "500 километрҙан ары үҫкән бөтә тереклек беҙҙең өсөн ағыу, беҙ үҙебеҙҙең ерлектә үҫкәнде генә ашарға тейешбеҙ", - тип өйрәтә торғайны. Мин дә балалар баҡсаһында эшләгәндә кескәйҙәргә магазинда һатылған бөтә ризыҡ та кеше өсөн файҙалы булмаҫҡа мөмкин икәнен төшөндөрә килдем. Ашарға ултырған саҡта ризыҡтың кеше организмы өсөн ниндәй файҙа килтереүе тураһында мәғлүмәт бирә инек. Шуға ла беҙҙең балалар мәктәпкә барғанда уҡ кеше өсөн ниндәй аҙыҡ кәрәкле, ә ҡайһыһы зыянлы икәнен яҡшы белзар мәктәбенең география уҡытыусыһы Айһылыу Мөхәмәтйәнова.

"Һөнәрмән ғаилә" дәресендә Нәзифә һәм Рәшит Әйҙовтар ғаиләһе өлгөһөндә бөгөнгө заманда балаларҙы хеҙмәт аша тәрбиәләүҙең ни тиклем кәрәкле һәм әһәмиәтле икәнен күрҙек. Ахырызаман етһә, балалар - батша, атай-әсәй хеҙмәтсе булыр, тигән ваҡытта йәшәйбеҙ түгелме? Балалар ни һорай, шуны алып бирәбеҙ, уларҙы эшкә ҡушырға йәлләйбеҙ. Балаларыбыҙҙың телефон ҡолдары булып ултырыуына ла күнегеп барабыҙ шикелле. Ә хеҙмәт - ул иң яҡшы тәрбиә ысулы икәне тарихта онотолоп ҡалды буғай. 8 бала тәрбиәләгән Әйҙовтар ғаиләһендә балалар көндәлек эштәрҙән тыш, боронғо кәсептәрҙе өйрәнеү менән дә мәшғүл. Малайҙар, мәҫәлән, йүкә ҡабығын һыуға һалып, һалабаш һыҙырып, бау ишеүгә тиклем башҡара беләләр. Ике яҡтан да ҡортсолар династияһын да дауам итә йәш Әйҙовтар. Улдары Ирәндек 2016 йылда үткәрелгән республика умартасылар конкурсында "Иң йәш ҡортсо" исемен ала. Күпләп йылҡы аҫраған ғаиләлә балалар бәләкәйҙән һыбай йөрөйҙәр, техника менән дә оҫта идара итәләр. 9-сы класты тамамлаған ҡыҙҙары Вәсилә төрлө һөнәр үҙләштерә. Бәләкәй генә сағынан ижад итергә әүәҫ ҡыҙҙың мәкәлә, шиғырҙары район гәзите уҡы-

✓ *Урманда аҙашып ҡалаһыңмы, ҡамауға эләгәһеңме, ҙур ҡалаға сығаһыңмы, әрмегә китәһеңме, йә берәй проблемаға тарыйһыңмы - ҡурҡыуға, шик-шөбһәгә бирелмәй, үҙеңде тыныс торорға, һаҡлыҡ күрһәтергә өйрәнергә тейешбеҙ.*

усыһына яҡшы таныш, ул яңыраҡ "Йәншишмә" гәзитенең йәш хәбәрсеһе исемен дә алды. Һәләтле ҡыҙ ҡурайҙа ла уйнап күрһәтте.

"Тернәксел башҡорт" дәресен беҙгә Байназар ауылы умартасыһы Фәнис Салауатов үткәрҙе. Бөтә әйбер һатып алыуға һәм хеҙмәт күрһәтеү аҡсаға ҡоролған һәм аҡсаның ҡиммәте булмаған заманда нисек итеп тормошта юғалып ҡалмай, лайыҡлы йәшәргә һуң? "Бөгөнгө заманда тормош яҡшы тиһәк тә, донъя көтөүе еңелдән түгел. Эшһеҙлек заманында үҙ эшеңде асыу өсөн дә күпме көс һәм аҡса сарыф итергә кәрәк. Тағы ла шул аҡса мәсьәләһенә барып терәләбеҙ. Борондан ҡалған кәсебебеҙ - ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеү беҙҙең йәшәйешебеҙҙең бер юлы ул, - тип һүҙен дауам итте Фәнис Ишбулды улы. - Ҡорт тотҡан кеше хәлле кеше тип тиккә әйтмәйҙәр. Әлбиттә, ҡорт тотоу ҙа сығымдар талап итә. Ә бына түмәрҙә ҡорт тотоуға иғтибар йүнәлткәндә күпкә отошло. Һәр кем балсы тығыҙ бәйләнештә йәшәү беҙҙең көндәлек йәшәү рәүеше булырға тейеш. Урманда аҙашып ҡалаһыңмы, ҡамауға эләгәһеңме, ҙур ҡалаға сығаһыңмы, әрмегә китәһеңме, йә берәй проблемаға тарыйһыңмы - ниндәй генә килеп тыуған хәлдәрҙә лә ҡурҡыуға, шик-шөбһәгә бирелмәй, үҙеңде тыныс торорға, һаҡлыҡ күрһәтергә өйрәнергә тейешбеҙ. Әле лә ғаиләләрҙең үҙ өйҙәрендә килеп тыуған проблеманы үҙаллы хәл итергә тырышмай, кемгәлер бәлә һалып, йөк өҫтәүе беҙҙең халыҡты биҙәмәй", - тип үҙ фекерен белдерҙе хаҡлы ялдағы биология уҡытыусыһы, викиөләсәй Көнһылыу Ҡотлобаева.

Шулай итеп, ниндәй генә килеп тыуған ҡаршылыҡтарҙы йырып сығыу, төрлө тормош шарттарында тереклекте наҡлап ҡалыу һәм ошоларға йәш быуынды өйрәтеп ҡалдырыу байназарҙарҙың төп маҡсаты. Был идеяны районның мәғариф бүлеге, "Мәсем" балалар һәм үҫмерҙәр клубы, ветерандар, хәрби хеҙмәттә булып ҡайтҡан ир-егеттәр ойошмалары ла күтәреп алған. Бөрйәндә

Әйүповтар.

булып та китә алмай, әлбиттә, егәрлеләр генә был һөнәргә эйә була ала".

"Робинзон ашханаһы" дәресендә Байназар мәктәбенең география уҡытыусыһы Фәнил Мөхәмәтйәнов **(һүрәттә)** 25 йыл "Тереклек мәктәбе"н етәкләүсе булараҡ сығыш яһаны: "Элек башҡорттар үләндәрҙе яҡшы белгән. Аксаков та үҙ яҙмаларында: "Ҡышын йонсоп сыҡҡан башҡорттар күгүләнгә баҫыу менән биттәре алһыуланып, теремекләнеп китә", - тип бәйән итә. Яҙ етеү менән иң тәүҙә оҫҡон йыуаһы, унан ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ килеп сыға. Фәрҙә үләне А витаминына бик бай. Бәпкә (балтырған) үләнен ашҡа һалып ашайбыҙ. Бәпембәнең япрағы ла, тамыры ла файҙалы. Ойотҡанға кесерткән, йә балтырған ҡушып ашар булғандар, шулай туҡлыҡлыраҡ булған. Әтлекте хәҙер күптәр белмәй, ул күберәк ылыҫлы урманда үҫә. Һарынанан, мәҫәлән, бутҡа бешерергә мөмкин".

Мәктәптә шулай уҡ 2016 йылдан алып "Любизар" хәрби-патриотик клубы эшләп килә. Хәрби әҙерлек, уҡ атыу кеүек төрлө йүнәлештә үҙ эсенә алған клубтың тағы бер йүнәлеше - ул "Тереклек мәктәбе" ("Школа выживания"). Уның ҡайһы бер ярыш төрҙәрен уҡыусылар башҡарып күрһәтте. Байназарҙар йыл да республика кимәлендә үткән слеттарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулай икәнен дә белдек. "Элек-электән башҡорт тәбиғәт балаһы булған. Ул үҙе йәшәгән ер-һыуҙы яҡшы белгән, үләндәрҙе дөрөҫ ҡулланған. Ул үләндәр менән туҡланып ҡына ҡалмаған, үҙен дауалай ҙа белгән. Ниндәй генә йәшәү шарттарында ла улар тереклекте дауам иткән. Тап шуға ла малайҙар үҫә төшкәс, егетлек буйынса бәйгеләр үткәрелгән. Ана шулай уларҙың үҙаллы йәшәй алыуы баһаланған. Ҡыҙҙарҙың да бирнә һандығының әҙерлеге матди хәлде түгел, ә уның ҡатын булараҡ тормош көтә алыуы күрһәткесе булған. Әле лә тәбиғәт менән "Спецназ" лагеры эшләй. Бында 12 йәштән 16 йәшкә тиклем үҫмерҙәрҙе тәрбиәләгән лагерҙың бер йүнәлеше - тереклек мәктәбе. Тимәк, балалар ауылдан ҙур ҡалаға уҡырға сығалармы, әрмегә баралармы - тормош үҙгәрештәренә әҙер буласаҡтар.

Сергетыш, ҡорама ҡораусылар

Бөрйәндәге сәфәр Яңы Монасип ауыл мәҙәниәт йортонда дауам итте. Бында беҙҙе Иҫке һәм Яңы Монасип, Нәби ауылдары ағинәйҙәре көтә ине. Яңыраҡ уҙған "Ҡыҙҙар ҡайтты ауылға" байрамы шауҡымында мәҙәниәт йорто сергетыш, ҡорама түшәктәр менән биҙәлеш алған. Тирә-яҡлап эленгән унлаған тирүгәнең береһенең береһе ҡабатланмауына хайран ҡалып һоҡландыҡ. Ә ҡорама түшәктәр һуң - үҙе бер ижад эше. Кемдер, хәҙер сепрәксапраҡ күп, ҡорай ғына күр, тип әйтер. Юҡ шул, ағинәйҙәр һәр эшен ентекле, сифатлы һәм матур итеп эшләүҙе маҡсат итеп ҡуйған. Туҡыма киҫәктәренең төҫтәр буйынса ярашыуы, сағыу булыуы ла кәрәк бит әле. Шуға ла улар ҡала магазиндарынан туҡыма алдыралар, тик бына хаҡтарҙың юғары булыуы ғына кеҫәләренә һуға.

Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Рәшиҙә Хәй ҡыҙы Ғиззәтуллина әйтеүенсә, Бөрйән ағинәйҙәренең ошо йүнәлештәге ҡул эштәре профессиональ кимәлдә эшләнеше менән айырылып тора. Шулай булмай һуң, мәҫәлән, Иҫке Монасиптар был кәсеп менән дәррәү шөғөлләнеп, 2 йыл рәттән районда үткән ҡышҡы ат ярыштарында күргәҙмә-конкурста ҡатнашалар. Нәби ағинәйҙәре иһә сергетыш эшләү өсөн ике көн эсендә 9 кейеҙ баҫыуға өлгәшә. Уларҙы бөгөн ҙур балаҫ һуғыу станогы булмауы борсой. Күмәктәренә бер станок булғанда ла әллә күпме тирүгә, аҫалы баланар

Йәшәү рәүеше ул

Шулай итеп, ағинәйлек - ул йәшәү рәүеше, булмыш, үҙ-үҙеңде тәрбиәләү юлы. Сәфәребеҙ һуңында Иҫке Собханғол ағинәйҙәре менән осрашып, ошо хаҡта фекер алыштыҡ. "Һеҙ бәхетле. Һеҙ балалар үҫтереп, хаҡлы ялға сығып, үҙ-үҙегеҙҙе ҡатын-ҡыҙ, талант эйәһе, йәмәғәт эшмәкәре булараҡ тормошҡа ашыраһығыҙ. Үҙ ҡулдарығыҙ менән матурлыҡ тыуҙыраһығыҙ, халыҡ араһына сығып аралашыу бәхетенә эйәһегеҙ. Һеҙҙә шул аҫылы үҙтәрбиә бара - айыҡ, аҡыллы, иманлы, кәнәшле ағинәй өлгөһөн тәрбиәләйһегеҙ. Бына шундай асылыбыҙға ҡайтып ҡына милләтебеҙҙе наҡлап ҡала аласаҡбыҙ", - тине үҙ сығышында республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева. Бөрйән районы хакимиәтенең социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Венера Вәлиева ла ошо фекерҙе хуплап, бындай сараларҙың мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып үтте. "Ысынлап та, ағинәйлеккә кәрәк булған өсөн түгел, ә күңел ҡушыуы буйынса килергә кәрәк", тигәйне Рәшиҙә Ғиззәтуллина. Арабыҙҙа йөрөгән ағинәйҙәребеҙҙең күбеһе ана шулай итәлер ҙә, тим. Юғиһә, анау тиклем матур милли күлдәктәр тегеп кейә алырҙар инеме лә, береһенән-береһе зауыҡлы сергетыш, ҡорамалар, тирүгә, баланарын һуғып ултыра алырҙар инеме һуң!

Әйткәндәй, һөйләшеүҙәр барышында ир-аттарҙы ла бер ҡорға туплау, улар араһында ла боронғо кәсептәребеҙҙе үҫтереү кәрәклеге тураһында фекерҙәр яңғыраны. Осрашыуҙарҙа барыбыҙҙың да яратҡан шағирәбеҙ Фирүзә Абдуллинаның ҡатнашыуы һәм үҙенең шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ рухына ауаздаш шиғырҙарын уҡыуы барыһының да күңеленә хуш килде.

Динара ҠОТЛОБАЕВА.

УҢЫШ ҠАҘАН

БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

Мейе тулҡындары һәм тормош мәғәнәһе

Әлегәсә һеҙ эҙмә-эҙлекле программаны, йәғни кәрәкле ваҡытта яҙылғандарҙы ситкә ҡуйып тороп, күнекмәләр үтәнегеҙ, яңы тулҡынға көйләндегеҙ. Үҙегеҙҙе ошо күпте вәғәҙә итеүсе сифат өсөн маҡтап алығыҙ. Ул фәрештәләрҙең ярҙамын, тирә-яҡтағыларҙың ихтирамын, Илаһ тарафынан күберәк һөйөү вәғәҙә итә. Ошо тойғо һеҙҙән сағылған һөйөүгә әйләнһен. Тормош бәхет тауының үренә ышаныслы барғанда, һеҙ мөхәббәт тирәһендә ҡуйылған кәртәләрҙе емерә алаһығыҙ.

Алда, әлбиттә, яҡшыраҡ тормош көтә. Яҙмаларҙың аҙағына барып етеүгә аңығыҙ тирә-яҡ мөхит менән берлектә булыуын тойорлоҡ кимәлгә етәсәкһегеҙ. Һеҙ шул уҡ кеше булып ҡаласаҡһығыҙ. Әммә һеҙҙә ике мөһим физик булмаған үҙгәреш күҙәтеләсәк: һеҙ тирә-яҡтағыларҙы яратасаҡһығыҙ һәм үҙ тормошоғоҙоң мәғәнәһен аңлаясаҡһығыҙ.

Кем өсөндөр, бәлки, был мөһим дә түгелдер, улар был үҙгәрештәрҙе һиҙмәйәсәк тә, ләкин иғтибарлап тыңлай, етди ҡабул итә, кәңәштәрегеҙгә ҡолаҡ һала һәм төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеү һәләтегеҙгә иғтибар итә башлар. Бәлки, был үҙгәрештәр ғаилә тормошоғоҙҙо ла тамырынан үҙгәртер. Һеҙ быға әҙер йәшәргә ҡамасаулаған ауырлыҡтарҙы еңдегеҙ. Ҡаршылыҡтар, иҙелгәнлек тойғоһо, дошманлыҡ үҙ-үҙеңә ышаныс менән алышынды.

Был ике мөһим үҙгәреш менән аңлатыла: һеҙ үҙ тормошоғоҙҙо ныраҡ ярата һәм яҡшыраҡ аңлай башланығыҙ. Әгәр ҙә улай түгел икән, ябай күнегеүгә ике минутығыҙҙы бүлергә йәлләмәгеҙ. Ул Ерҙәге үҙ миссияңды яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә.

Күнекмәне бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Үҙеңдең миссияңды нисек аңларға:

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм тыныс картинаны күҙаллағыҙ.
- Картина яйлап юғала, уның урынын Юғары Минегеҙ ала: ул һеҙҙән бейектәрәк һәм яҡты аҡ нур менән уратып алынған.
- Урынығыҙҙан тороп, Юғары Минегеҙҙе ҡосаҡлағыҙ һәм ҡабат ултырығыҙ.
- Уйығыҙҙан ғына: "Тормош мәғәнәм нимәлә?" - тип һорағыҙ.
- Юғары Минегеҙ ситкә китеп, эргәлә урынлашҡан экранға күрһәтеп юғаласаҡ.
- Уйығыҙҙа ғына һорауығыҙҙы ҡабатлап, экранды иғтибарлап күҙәтегеҙ. Унда юғары миссия, тәғәйенләнеш менән бәйле күренеш пәйҙә булырға тейеш. Экранда барған ваҡиғаларҙы күҙәтегеҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ. Әле генә күргәндәрегеҙ тураһында уйлағыҙ.

Яҙмаларҙы ситкә ҡуйып, күнекмәне ҡабатлағыҙ.

Роберт СТОУН.
(Дауамы бар).



27 ИЮНЯ
ПОНЕДЕЛЬНИК
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Анна Каренина". [12+]
0.55, 1.40 Т/с "Письма на стекле". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "По горячим следам". [16+]

БСТ

7.00 "Сәләм". [12+]
10.00 Т/с "Бабье лето". [16+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [12+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]
17.30 История одного села. [12+]
17.45 Ради добра. [12+]
18.00 Пофутболим? [12+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Елкән". [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Спортивная история. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Күстәнәс. [12+]
23.30 Х/ф "Вид сверху лучше". [12+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.30 Спектакль "Моя семья". [12+]
4.30 Күстәнәс. [12+]
5.00 "Бай". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

28 ИЮНЯ
ВТОРНИК
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Анна Каренина". [12+]
0.55, 1.40 Т/с "Письма на стекле". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "По горячим следам". [16+]

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бабье лето". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Хазина. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
15.30 "КультУра". [6+]
15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]
17.30 "Дорога к храму". [0+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Ныкбул. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "Это моя профессия". [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Корсиканец". [12+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Любовь на троих". [12+]
5.00 Автограф. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

29 ИЮНЯ
СРЕДА
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Анна Каренина". [12+]
0.55, 1.40 Т/с "Письма на стекле". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "По горячим следам". [16+]

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бабье лето". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Тормош. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "Сулпылар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]
17.30 Спортивная история. [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Х/ф "Жмот". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Спрячь любовника в шкаф". [12+]
4.00 История одного села. [12+]
4.15 Башҡорттар. [6+]
4.45 Әлләсе... [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

30 ИЮНЯ
ЧЕТВЕРГ
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Анна Каренина". [12+]
0.55, 1.40 Т/с "Письма на стекле". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "По горячим следам". [16+]

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Бабье лето". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Тормош. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "Сулпылар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]
17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Башҡорттар. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Ап-асыҡ. [12+]
23.45 История одного села. [12+]
0.00 Х/ф "Дело Коллини". [16+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.15 Спектакль "Вот так случилось..." [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

1 ИЮЛЯ
ПЯТНИЦА
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Х/ф "Экипаж". [6+]
23.50 Д/ф "Немецкая Украина. От гетмана до гауляйтера". [16+]
0.50 Т/с "Белая гвардия". [16+]

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 "Моя история". [16+]
10.30 Бай баҡса. [12+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Уткән гүмер. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 "Это моя профессия". [12+]
14.00 БашГост. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 "Моя история". [16+]
17.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
17.30 "Аль-Фатиха". [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
19.45 Топ-5 мифов о малой авиации. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Йома". [0+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 БашГост. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Автограф. [12+]
23.30 Х/ф "Белль и Себастьян". [6+]
1.45 Спектакль "Белый пароход". [12+]
3.45 Х/ф "Белль и Себастьян". [6+]
5.45 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

2 ИЮЛЯ
СУББОТА
РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.40 Т/с "Я больше не боюсь". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Неродная". [12+]
0.30 Т/с "Белая гвардия". [16+]
3.55 Х/ф "Пять лет и один день". [12+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Аль-Фатиха". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Это моя профессия". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "МузКәрәҙ". [6+]
11.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
11.30 Ныкбул. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Уткән гүмер. [12+]
13.00 Автограф. [12+]
13.30 Башҡорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Концерт заслуженной артистки РБ Резеды Аминевой. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
19.45 Ради добра. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Первый Республиканский "Лесной сабантуй". Баймакский район. Репортаж. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.00 Х/ф "Белль и Себастьян: Приключения продолжаются". [6+]
1.45 Новости недели (на баш. яз).
2.30 Спектакль "Дети мои". [12+]
4.15 Х/ф "Белль и Себастьян: Приключения продолжаются". [6+]
6.00 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

3 ИЮЛЯ
ВОСКРЕСЕНЬЕ
РОССИЯ 1

5.35, 3.10 Х/ф "Букет". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.40 Т/с "Я больше не боюсь". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Кресты". [12+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.00 "Дорога к храму". [0+]
15.30 Историческая среда. [12+]
16.00 Спектакль "Детектив на перекрестке". [12+]
17.00 НСО РБ. Фестиваль к 30-летию коллектива. [12+]
19.15 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
19.30 День ГИБДД. [12+]
19.45 Топ-5 мифов о малой авиации. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 Әлләсе... [12+]
21.00 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Х/ф "Белль и Себастьян: Друзья навек". [6+]
0.30 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]
3.00 Х/ф "Белль и Себастьян: Друзья навек". [6+]
5.15 "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1443 һижри йыл.

Июнь (Зөлкағиҙә - Зөлхизә)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Ағшам намаҙы	Йәстү намаҙы
27 (28) дүшәмбе	3:13	4:43	13:30	19:04	21:54	23:24
28 (29) шишәмбе	3:13	4:43	13:30	19:04	21:54	23:24
29 (30) шаршамбы	3:14	4:44	13:30	19:04	21:54	23:24
30 (1) кесе йома	3:14	4:44	13:30	19:04	21:54	23:24
1 (2) йома	3:15	4:45	13:30	19:04	21:53	23:23
2 (3) шәмбе	3:16	4:46	13:30	19:04	21:53	23:23
3 (4) йәкшәмбе	3:17	4:47	13:30	19:04	21:52	23:22

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

✓ *Документта Рәсәй Мәғариф министрлығын мәктәп тапшырған отчет документтарының аныҡ исемлеген раҫларға мәжбүр иткән аныҡ нормалар әҙерләргә тәҡдим ителә.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

27 ИЮНЬ - РӘСӘЙ ЙӘШТӘРЕ КӨНӨ



Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

24-се һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Сафин. Ҡашғари. Архангел. Хайуан. Алдыр. Әҙәп. Фарман. Әҫпе. Тал. Тауис. Ишәк. Әй. Рәшә. Игеҙәк. Ябаға. Үткән. Неон. Локк. Шайба. Пион. Атай.

Вертикаль буйынса: Австрия. Абдуллина. Ресторан. Ҡала. Европа. Ниәт. Аншлаг. Әүнәш. Әсә. Анна. Лапаҫ. Край. Нарат. Буҙа. Хәлфетдинова. Идеал. Урам. Наян. Кәкүк.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

УҠЫТЫУСЫ ОТЧЕТ БИРМӘЙ

Депутаттар Рәсәй уҡытыусыларын артыҡ отчет биреүҙән азат итергә ниәтләй. Сираттағы пленар ултырышта Дәүләт Думаһы беренсе уҡыуҙа уҡытыусыларға бюрократик йөкләмәне кәметеү тураһында закон проектын ҡабул итте. Документта Рәсәй Мәғариф министрлығын мәктәп тапшырған отчет документтарының аныҡ исемлеген раҫларға мәжбүр иткән аныҡ нормалар әҙерләргә тәҡдим ителә. Был педагогтарға иғтибарын мәктәп уҡыусыларына белем һәм тәрбиә биреүгә йүнәлтергә мөмкинлек бирергә тейеш. Төҙәтмәләр "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы законға индерелә.

ТУҠМАС ЭЛМӘ!

Рәсәйҙә фейктар менән көрәш өсөн "Лапша" тип аталған тәүге фактчекинг сервисы эшләй башланы. Проектты "Диалог" йәмғиәте эшләгән. Был агрегат ярҙамында Интернеттағы теге йәки был мәғлүмәттең дөрөҫлөгөн тикшерергә була. Бының өсөн шик тыуҙырған сығанаҡтың һылтанмаһының күсермәһен сайттағы махсус формаға һалырға кәрәк. Дөрөҫлөккә тап килмәгән мәғлүмәт унда махсус билдәләнә. Төп порталдан тыш, Telegram, Viber һәм Бәйләнештә селтәрендә чат-боттар менән файҙаланырға мөмкин. "Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, халыҡтың 90-дан ашыу проценты фейктарҙы асыҡлау процесында ҡатнашырға теләй. Улар һаны 2020-2021 йылдарҙа коронавирус таралған осорҙа һәм әле тағы ла артты. Февраль аҙағынан беҙ ялған хәбәрҙәрҙе былтыр теркәлгән күләмдә асыҡланыҡ", - ти "Диалог" йәмғиәте генераль директоры Владимир Табак.

ТӨРКИӘГӘ...

AZUR авиакомпанияһы 18 июндән Өфөнән Төркиәнең популяр курорты Антальяға осоштарҙы арттырҙы, ә 22 июндән Даламанға рейстар асылды. Ике йүнәлештә лә 238 урынлыҡ 757-200 самолеттары оса. Өфөнән Даламанға рейстар аҙнаһына ике тапҡыр - кесаҙна һәм йәкшәмбе көндәрендә. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, әле Өфөнән Төркиә курорттарына рейстарҙы Red Wings авиакомпанияһы хеҙмәтләндерә.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

ҺАМАР ӨЛКӘҺЕНДӘ...

Ошо көндәрҙә Һамар өлкәһендә күренекле ғалим һәм йәмәғәт эшмәкәре, хәҙерге башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусыларҙың береһе булған билдәле тел белгесе Ғәббәс Дәүләтшинға (1892-1937) һәйкәл асылды.

Ғалимдың тыуған төйәгендә, Оло Глушица ауылында, өс метрлыҡ һәйкәл Һамар өлкәһе башҡортары ҡоролтайы башланғысы менән барлыҡҡа килде. Һәйкәлдең скульпторы - Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәниф Хәбибрахманов. Байрамда сәләмләү һүҙҙәре менән Һамар өлкәһенең Оло Глушица районы башлығы Валерий Анцинов һәм Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Александр Хинштейн сығыш яһаны. Шулай уҡ мәртәбәле ҡунаҡтар - Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова, Һамар өлкәһенең йәмәғәт именлеге департаменты етәксеһе Юрий Иванов, Башҡортостан мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары Наталья Лапшина һәм Ғәббәс Йәғәфәр улының ейәнсәре - режиссер-документалист Элла Дәүләтшина телмәр тотто. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылда Өфөлә башҡорт тел белгесе Ғәббәс Дәүләтшинға мемориаль таҡтаташ асылғайны.

МӘСКӘҮҘӘ ҺАБАНТУЙ

Мәскәүҙең Таганский районында һабантуй байрамы үтте.

Рәсәй башҡорттарының федераль милли-мәҙәни автономияһы башҡарма директоры Искәндәр Юлдашев Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылында башҡорт, татар һәм башҡа халыҡтарҙа ҙур иғтибар биргәндәре һәм баш ҡала үҙәгендә һабантуй ойоштороуҙа ярҙам күрһәткәндәре өсөн Мәскәү хөкүмәтенә рәхмәт һүҙҙәрен еткереп: "Һабантуй Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫын һаҡлап ҡалыуға ҙур өлөш индерә һәм халыҡ-ара байрам булараҡ берҙәмлеккә, халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең гармониялашыуына һәм нығыуына булышлыҡ итә", - тип белдерҙе. Һабантуйға килгән ҡунаҡтар алдында "Аҡбуҙат" фолк-төркөмө, йырсы Айгөл Үтәғәнова, "Илһам" Мәскәү башҡорт театры һәм Мәскәү башҡорттарының "Аҡ тирмә" фольклор коллективтары, шулай уҡ башҡа халыҡтар вәкилдәре сығыш яһаны. Байрам балалар һәм ололар өсөн башҡорт бейеүҙәре буйынса оҫталыҡ дәресе үткәреү менән тамамланды. Теләге булған һәр кем бейеү хәрәкәттәрен өйрәнде һәм иҫтәлекле миҙал алды.

ЭСТОНИЯЛА...

Эстония башҡорттары 18 июндә халҡыбыҙҙың милли геройы Салауат Юлаевтың тыуған көнөн билдәләне.

Традиция буйынса сара эстон ҡалаһы Палдискиҙың үҙәгендә урынлашҡан һәм Салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡуйылған паркта уҙҙы. "Беҙ сәскәләр ултырттыҡ, Көрьән сүрәләре уҡыныҡ, Салауаттың Палдиски ҡалаһындағы бынан ике йөҙ йыл элек йөрөгән эҙҙәренән үттек", - тине Таллиндың (Эстония) "Ағиҙел" башҡорт мәҙәниәте йәмғиәте етәксеһе Флүзә Хәйруллина. Уның билдәләүенсә, Палдискиҙа Салауат Юлаевҡа һәйкәл 1989 йылда асылған. Скульптура авторы - Башҡорт АССР-ның халыҡ, РСФСР-ҙың атҡаҙанған рәссамы Тамара Нечаева. "Ағиҙел" башҡорт мәҙәниәте йәм-ғиәте йыл һайын Таллиндан 45 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Палдиски ҡалаһына сәфәр ойоштора. Салауат һәйкәленә сәскәләр һалып, уның тирә-яғын таҙартып, төҙөкләндереп, сәскәләр ултыртып, башҡорт халҡының милли геройының ғүмер юлын һәм Крәҫтиәндәр һуғышы хронологияһын иҫләйҙәр, Көрьәндән сүрәләр уҡыйҙар.

✓ *"Евразия йөрәге-2022" халыҡ-ара сәнғәт фестиваленең гала-концерты 26 июндә була һәм Йәштәр көнөнә арнала. Был көндө республикабыҙҙың йәш артистары сәхнәгә сыға.*

СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ.

"ЕВРАЗИЯ ЙӨРӘГЕ-2022"

24-26 июндә Өфөлә күптән көтөлгән йыр-моң байрамы - "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале уҙғарыла. "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивален ойоштороусылар йәнә баш ҡала һәм республика халҡын һәм ҡунаҡтарын форумды уҙғарыу күләме, башҡарыусыларҙың донъяуи кимәле, стилдәрҙең һәм йүнәлештәрҙең киңлеге менән ҡыуандырырға әҙер. Сара "Торатау" Конгресс-холы амфитеатрында була.

24 июндә фестиваль "Башҡортостанда тыуғандар" программаһы менән асылды. Унда төрлө миҙгелдәрҙә "Голос" шоуында ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙ сығыш яһаны. Шулай уҡ тамашасы Башҡорт дәүләт филармонияһының Башҡортостандың халыҡ артисы Олег Касимов етәкселегендәге Эстрада-джаз оркестрын тыңланы. Беренсе көндөң хедлайнерҙары - "ТенорА XXI века" арт-проекты һәм "Пицца" төркөмө. Форумдың икенсе көнөндә, 25 июндә, "Симфоник тон" Башҡортостан Республикаһы Милли симфоник оркестры башҡарыуында донъя классикаһы шедеврҙарын тәҡдим итә. Дирижер пульты артында - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Дмитрий Крюков. "Евразия йөрәге-2022" халыҡ-ара сәнғәт фестивалененң гала-концерты 26 июндә була һәм Йәштәр көнөнә арнала. Был көндө республикабыҙҙың йәш артистары сәхнәгә сыға. Улар араһында бөтә Рәсәй конкурстары лауреаты Гөлнара Байғужина, Эдуард Хөснөтдинов, Nail Bashstyle һәм башҡалар бар. Тамашасылар алдында шулай уҡ "Бишбармаҡ" һәм "Дәрүишхан" төркөмдәре сығыш яһай. Бынан тыш, Бүрәт Республикаһының "Намгар" этно-төркөмө, Ҡазағстандың "HasSak" этно-фолк төркөмө сағыу номерҙар менән ҡыуандырмаҡсы. "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале гала-концертының хедлайнерҙары - Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Сергей Трофимов (Трофим) һәм "Дискотека Авария" төркөмө. Фестиваль байрам фейерверкы менән тамамлана.

БЕР ГЕНӘ БӨРТӨК УЛ

Сибай концерт-театр берекмәһенең "Сулпан" балалар театры (әйткәндәй, республикала берҙән-бер балалар театры!) ижади миҙгелен ябыу тантанаһын үткәрҙе.

Рафаэль Ғәйнуллиндың "Ерән бесәй балаһы" пьесаһы буйынса режиссер Денис Нурғәлин сәхнәләштергән спектаклде балалар бик ихлас ҡараны, бер миҙгелгә булһа ла тыштағы, өйҙәрендәге мәшәҡәттәрен онотоп, әкиәт донъяһына сумды. Әйткәндәй, сәхнәлә барған ваҡиғалар йәнһүрәттәрҙәге кеүек ҡабул ителә, әммә бында әкиәт персонаждарын тере актерҙар тере тауышҡа уйнай. Балаларыбыҙ башкөллө сума барған виртуаль донъя геройҙары менән сәхнәләге образдар бик ныҡ айырыла, быны балалар, ихласлыҡтары арҡаһында, тәрәнерәк һәм нескәрәк һиҙә: уларҙың иғтибары көслөрәк, көлөүҙәре шул тиклем дә ихлас һәм эскерһеҙ, һис тә оялып тормай улар үҙҙәренең бәләкәй күкрәк ситлектәренә һыймаған тойғошатлыҡтарын белдереүҙән. Асыулана торған урында шымып ҡалалар, күңеллерәк ваҡиғалар башланһа, донъяларын онотоп, залды шат ауаздар менән тултыралар.

Шулай үтте сираттағы миҙгелде ябыу тантанаһы: балалар балаларса баһа бирҙе, өлкәндәр йола буйынса иң тырыш хеҙмәткәрҙәргә Маҡтау ҡағыҙҙары тапшырып ҡыуандырҙы. Тормош дауам итә! Киләһе миҙгелдә балалар Ырымбур өлкәһенән саҡырылған режиссер Булат Хәйбуллиндың "Хужа Насретдиндың алтын ишәге" спектаклен ҡараясаҡ. Шунһыҙ булмай - балалар театры балалар алдындағы бурысын кисектергеһеҙ үтәргә тейеш.

АСҠАРОВТЫҢ ЯҢЫ КИНОһЫ...

Минскиҙа Мостай Кәримдең "Ярлыҡау" повесы буйынса фильм төшөрәләр. Был хаҡта фильмдың режиссеры Айнур Асҡаров хәбәр итте.

"Команда шәп, йәш, матур актерҙар. Сценарий авторы - дуҫым Айҙар Аҡманов, рәссам Вячеслав Виданов, оператор Андрей Макаров. Алда беҙҙе 17 смена көтә. Әгәр барыһы ла планға ярашлы барһа, 7 июлгә тиклем бында булабыҙ, - тине Айнур Асҡаров. - Ҡыҫҡаһы, әҫәрҙең төп идеяһы - әхлаҡ һәм закон бәрелеше".

Фильм өҫтөндә "Беларусь кино" һәм Мостай Кәрим исемендәге фонд булышлығында "Мотор" студияһы эшләй. Бер йылға яҡын сценарий буйынса эш алып барылды, тип белдерҙе Айҙар Аҡманов. Әйткәндәй, ул Мостай Кәримдең әҫәрҙәре буйынса фильмдарҙы тәүгә генә эшләмәй ("Һеңлекәш", "Өс таған"). Төп ҡатын-ҡыҙ ролен, Мария Терезаны, Өфө уҡыусыһы, Константин Хабенский ойоштороған студияны тамамлаған Йәмилә Мөҙәрисова уйнай. Фильмда Рәсәй актерҙары ла бик күп. Мәҫәлән: Казарин ролен грузин-испан тамырҙары булған актер Гела Месхи башҡара. Юрий Лопарев - Буренкинды, Александр Новиков - Любомир Зухты, Николай Ғәләмов Йәнтимер Байназаровты уйнай. Ҡышҡыһын фильмды Петербургта төшөрәләр. Эште 2023 йылда тамамлау күҙаллана. "Ярлыҡау" лирик повесы - Башҡортостандың халыҡ шағиры, яҙыусы һәм драматург Мостай Кәримдең уҙған быуаттың 80-се йылдарында ижад иткән күренекле әҫәрҙәренең береһе. Ул реаль ваҡиғаларға таянып яҙылған. Фажиғәгә әүерелгән романтик тарих, һуғыштың кешелекһеҙ асылына ҡаршы протест һәм уның геройҙарын да, ғәйепһеҙ ҡорбандарҙы ла онотмаҫҡа саҡырыу ул.

БАЛАЛАР БӘЙГЕ ТОТТО

Бөрйән районында балалар һәм йәштәр араһында I Бөтә Рәсәй сәсәндәр конкурс-фестивале тамамланды. Гала-концерт Иҫке Собханғол ауылының Мәҙәниәт йорто алдындағы майҙанда үтте. Ҡатнашыусыларҙы һәм ҡунаҡтарҙы Бөрйән районы хакимиәте башлығы Ғәзиз Манапов, Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Артур Әлибәков, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова һәм Сәсәндәр үҙәге директоры Нәфисә Тулыбаева сәләмләне.

Йәштәр араһында Гран-призы Баймаҡ районынан Мирас Үҙәнбаев һәм Ҡырғыҙ Республикаһынан Гулжигит Кубанычбеков яуланы. Лауреаттар дипломдарға, иҫтәлекле бүләктәргә, шулай уҡ фестивалдең гәүһәр менән бизәлгән алтын символына лайыҡ булды. 5-12 йәшлек ҡатнашыусылар араһында жюри Гран-при тапшырмаҫҡа ҡарар итте. 5-12 йәшлек ҡатнашыусылар араһынан I дәрәжә дипломды һәм лауреат исемен - Дарья Топычканова (Өфө), икенсе урынды - Илмир Ҡужабаев (Бөрйән районы), өсөнсө урынды Альбина Ғәйфуллина (Мәләүез районы) алды. Красноярск крайынан Мария Рау, Дыуан районынан Аида Йомағужина, Хәйбулла районынан Тимур Билалов махсус приздар менән бүләкләнде.13-25 йәшлектәр араһында I дәрәжә лауреат исемен Тойғон Гоголев (Саха-Яҡутия Республикаһы) алды. II дәрәжә лауреат - Гөлүзә Әхмәҙиева (Дәүләкән районы); III дәрәжә лауреат - Велытяк Мария (Мәскәү ҡалаһы). Ошо йәш категорияһында махсус бүләктәр Айһылыу Кәримоваға (К. Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжы) һәм Миләүшә Дусыеваға (Баҡалы районы) бирелде.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәкикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

АҠЫЛЛЫ ЯНЫНА...

аңғыраны эйәртмә

Көслө алдында эйелмә, ҡыйынлыҡ алдында бөгөлмә.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Етди кешеләрҙең идеялары ла аҙ, башы тулы идея булған кешеләр... етди була алмай.

(Поль Валери).

Миңә төшөмдә, йәшәү - ул бәхет, тигәнде белгерттеләр, уянғас, йәшәү - ул хеҙмәт итеү икәнен аңланым. Мин хеҙмәт итә башланым һәм хеҙмәт итеүҙә генә бәхет табыла икәнен аңланым.

(Рабиндранат Тагор).

Былай йәшәргә ярамай, әлбиттә, әммә беҙ башҡа төрлө йәшәй белмәйбеҙ.

(Борис Крутиер).

Әгәр ҙә һине дөйә тип иҫәпләйҙәр икән... барыһына ла төкөр.

(Владимир Голобородько).

Беҙ һәр ваҡыт үҙебеҙҙең балалар өсөн ни ҙә булһа эшләйбеҙ, балалар ҙа беҙҙең өсөн ни ҙә булһа эшләһен ине.

(Джозеф Аддисон).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Табипҡа йөрәк неврозы менән ауырыған бер кеше килә һәм: "Миңә бер ниндәй дарыуҙар ҙа ярҙам итмәй, миңә хәҙер ни эшләргә, һеҙ ниндәй кәңәш бирерһегеҙ?" - тип һорай. Табип ауырыуға бик иғтибарлап ҡарап тора ла, ярҙамсыһына ҡайсы килтерергә ҡуша. Ҡайсы килтергәнсе, ауырыу тулҡынланыуынан ни эшләргә лә белмәй һәм табиптан: "Һеҙ ҡайсы менән минең йөрәгемде киҫергә уйлайһығыҙмы?" - тип һорай. Табип йылмая һәм: "Мин хирург түгел. Унан һуң, ҡайсы ме-нән операция яһағандарын ҡайҙа күргәнең бар?" - ти. Табипҡа ҡайсы тоттороғас, ул ауырыуҙың жилетындағы бер төймәне киҫеп ала һәм: "Бында башҡаса төймә таҡма һәм ул урынға ҡулың менән ҡағылма", - ти. Шунан ул ауырыуға ике аҙнанан тағы килергә ҡуша, ошо арала хәлең яҡшырыр, тип тә ышандыра. Ауырыу табип ҡушҡандың барыһын да үтәй. Ике аҙнанан һуң ул шат йөҙ һәм яҡшы кәйеф менән табип эргәһенә килә һәм: "Үҙемдең табибым мине тикшерҙе, ҡараны ла, аптыраны: мин һаңһау хәҙер. Һеҙ мине ни эшләттегеҙ, әфәндем, төймә менән бергә минең йәнемдәге яуыз шайтанды ҡыуҙыңмы?" - ти. "Һинең ҡулың һәр ваҡыт жилетыңдағы йөрәк тапҡырындағы төймә менән уйнаған. Ул төймә һинең йөрәкте кимереүсе яуыз булған да инде. Ул төймәне киҫеп ырғытып, һинең йөрәкте нервылы ҡулдарыңдан ҡотҡарҙым - бары шул ғына..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
24 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 776